ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-6 февраль - март (шаҡай - буранай)

2025

№8 (1152)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Осҡондар ялҡынға әйләнһен!**



5

**Ауыл яҙыусыһы.**

Әҙәбиәттең ҡаҙаны Өфөлә булһа ла...



8-9

**Талантын сарыф итмәгәндәр...**

мораҙына өлгәшә лә инде



11

**"Ҡара алтын"дың шишмә башы...**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм йәмәғәт! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға ваҡытынан алда, 1 февралдән апрелгә тиклем, 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 971 һум 70 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

# ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ...

**Һеҙҙең тормош иртәнсәк нисек башлана, йәмәғәт? Минең һәр иртәм гәзит йәки журнал уҡыуҙан башлана. Ваҡытлы матбуғаттың яңы һандары булмаһа, электән үҙемә ҡыҙыҡлы һанағандарын йыйып барғандарын яңынан ҡараштырам. Бик тә булмаһа, төрлө темаларға арналған йыртма календарҙе ҡулыма алам. Шулай итеп, һәр яңы көнөмдә ниндәй ҙә булһа әлегәсә белмәгән ҡыҙыҡлы мәғлүмәткә эйә булам.**



Ҡағыҙ баҫмаларҙы уҡырға яратҡан һәр кемдең иң оҡшаған гәзите һәм журналы булалыр, моғайын. Минең ошондай гәзиттәремдең береһе - "Киске Өфө". Тәүге битенән үк позитивҡа көйләүсе, ышанысты арттырыусы, ниндәйҙер эштәр башҡарырға дәрт-дарман биреп тороусы был баҫманы оҙаҡ йылдар алдырам. Ул хәҙер минең генә түгел, тотош ғаиләбеҙҙең яратҡан һәм ихтирам иткән баҫмаһы.

Баш ҡалаға ғына түгел, ә тотош республикаға ҡағылышлы актуаль мәғлүмәт биреүе менән бер рәттән, илдәге һәм донъя кимәлендәге ижтимағи-сәйәси хәлдәргә төплө күҙәтеү эшләп барған "Киске Өфө" бары тик маҡтауға лайыҡ. Башҡорт халҡының тарихына һәм мәҙәниәтенә ҡарата оло иғтибар биреүе менән дә мәртәбәле ул. Туған телдең ҡәҙерен белергә, уны өйрәнеүгә һәм һаҡлауға өндәгән мәҡәләләрҙе яратып уҡыйым. Улар ҡайһы саҡта балаларына туған телде өйрәтеү кәрәклегенең әһәмиәтен баһалап етмәгәндәргә аңлатыу өсөн шәп материал булып тора.

Беҙ - тәбиғәт балалары. Уны яратырға, хөрмәт итергә өйрәтеүсе, тәбиғәттең кешелек өсөн ниндәй мөһим әһәмиәткә эйә булыуын аңлатыусы мәҡәләләр ҙә урынлаштырыла гәзиттә. Уларҙың һанын тағы ла арттырырға ине, тип теләйем. Тирә-яҡ мөхиттең ниндәй хәлдә булыуы беҙҙең йәшәйешкә туранан-тура тәьҫир итә һәм "Киске Өфө" был турала матур, аңлайышлы итеп еткерә белә. Баҫмалағы мәҡәләләрҙе уҡыйһың да, "Бәй, был ысынлап та шулай ҙа инде!" тип фекер төйнәп ҡуяһың.

Республика халҡының тормошона бәйле проблемаларҙы ла бик оҫта күтәрә гәзит. Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенә ҙур урын бирә. Театр, эстрада һәм башҡа өлкәләрҙе үҙ эсенә алған мәҡәләләре менән дә күңелдәргә үтеп инә. Ғөмүмән алғанда, баҫма бөтә яҡлап та оло хөрмәткә лайыҡ. Артабан да ошо йүнәлешенән тайпылмайынса, халҡыбыҙға кәрәк һәм терәк булып, оҙаҡ йылдар донъя күреүен теләйем. "Киске Өфө"бөҙ булыуы менән бәхетлебеҙ.

**Рәмзиә ӘСӘҘУЛЛИНА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БАШҠОРТСА ЛА ҺӨЙЛӘШӘ!




**Яндекс үҙенең сервистарына нейроселтәрҙе ҡулланған башҡорт телен синтезлау һәм таныу технологияһын өҫтәне. Ул тәржемәселә, эҙләүҙә һәм клавиатурала бар. Яндекс Рәсәй халыҡтарының өсөнсө теленә ошондай технологияны ҡуллана. Былтыр компания уны татар һәм сыуаш телдәре өсөн файҙаланды.**

Яндекс нейроселтәрҙәре ярҙамында башҡорттар туған телендә компания сервистарына һорауҙар бирергә мөмкин. Мәҫәлән, башҡортса һүҙҙәр әйтергә һәм уларҙы тәржемәселә йәки эҙләүҙә төрлө телдәргә тәржемә итергә була. Шулай уҡ тәржемәсенең мобиль ҡушымтаһында башҡортса диалог режимы барлыҡҡа килде - был иһә телдә аралашыусылар менән уны белмәйенсә лә аралашыу мөмкинлеген бирә. Мәҫәлән, бер ҡулланыусы русса һорау бирә, икенсеһе башҡортса яуап ҡайтара, ә ҡушымта фразаларҙы тейешле телдәрҙә тәржемә итеп, уҡып ишеттерә. Тексты ҡул менән йыйырға теләмәгәндә йәки быға ваҡыт булмағанда клавиатурала башҡортса фразаларҙы әйтһәң, сервис шунда уҡ уны тексҡа әйләндерә.

"Кеше туған телен өйрәнергә ынтылһын өсөн шарттар, яҡшы методик һәм техник программалар һәм, иң мөһиме, йәмғиәттә мәҙәнилек булдырыу мөһим. Был туған телдә һөйләшергә оялмау һәм шул уҡ ваҡытта бер-беребеҙҙе, республикабыҙҙағы төрлө телдә аралашҡан кешеләрҙе хөрмәт итеү өсөн кәрәк", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

Яндекс Рәсәй халыҡтары телдәрен интеграциялау проектын Милләттәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ, Рәсәй халыҡтары йорто һәм илдең төбәк тел институттары менән берлектә үҫтерә.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

*АФАРИН!*



# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ АҪАЛЫ БАЛАҪ!

**Роспатент Башҡортостандың яңы төбәк брендын - Башҡорт балаҫын теркәне. Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова үҙенең телеграм-каналында ошо турала хәбәр итте.**

Был иһә республиканың географик күрһәткес статусына эйә булған өсөнсө бренды. Быға тиклем Мансур граниты һәм Башҡорт мамыҡ шәле теркәлгәйне. Бөгөн Башҡортостанда 10 бренд бар, ошо йүнәлештә эш дауам итә. Лилиә Ғүмәрова билдәләүенсә, төбәк бренды - республиканың визит карточкаһы, шулай уҡ илдең иҡтисади үҫешенең ҡеүәтле ҡоралы. Брендтарҙы теркәү Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенконың ҡушыуы буйынса башланды. Мәғариф, фән һәм мәҙәниәт буйынса комитет Интеллектуаль милек буйынса федераль хеҙмәт менән берлектә төбәк брендтарын асыҡлау һәм теркәү өҫтөндә әүҙем эшләй. Әлеге ваҡытта реестрҙа Рәсәй субъекттарының 369 үҙенсәлекле тауары теркәлгән.

12+

✓ *Ураҙа тотоуҙың бик файҙалы һәм тәнде-йәнде паклаусы бер ғибәҙәт булыуын аңлатыу өсөн Рәсүлебеҙ ошо хәҙис шәрифте йыш телгә алған: "Һәр нәмәнең паклаусыһы булған кеүек, тәндең паклаусыһы ураҙа тотмаҡтыр".*



*БЫЛ АЙҘА...*

# БӘХЕТ АЛТЫН БАЙЛЫҒЫНДА ТҮГЕЛ...

## аҡыл байлығында



**Яҙҙың тәүге айы март - буранай - тулыһы менән быйыл изге Рамаҙан айы - ураҙа мәленә тап килә. Был үҙе бер символик мәғәнәгә эйә булыр төҫлө тойола күңелгә. Ошо нурлы ваҡиғаны изгегә, именлеккә, йорт-илебеҙгә килер тыныслыҡҡа юрайыҡ, сөнки, изге китаптарҙа әйтелеүенсә, Рамаҙан бит ул - "күк ҡапҡаларының асыҡ торған, шайтандар бығаулап ҡуйылған, иманлы бәндәләрҙең бөтә ғәмәлдәре Раббыбыҙ тарафынан ҡабул ителә торған бик тә дан-шөһрәтле ай".**

Шуның өсөн дә Рамаҙан айына хөрмәт күрһәтеү фарыз, ә был Аллаһтың тыйғандарынан тыйылып, ҡушҡандарын үтәү. Ана шул фарыз бурыстарҙың береһе - был айҙы ураҙала үткәреү. Бынан тыш, мөьмин мосолмандарға һәм аҡыл-зиһене камил бөтөн кешеләргә күберәк изге ғәмәлдәр ҡылыу, күберәк намаҙ уҡыу, йышыраҡ Ҡөрьән уҡыу һәм аят-доғалар бағышлау хәйерлерәк был айҙа. Ураҙа тотоуҙың бик файҙалы һәм тәнде-йәнде паклаусы бер ғибәҙәт булыуын аңлатыу өсөн Рәсүлебеҙ ошо хәҙис шәрифте йыш телгә алған: "Һәр нәмәнең паклаусыһы булған кеүек, тәндең паклаусыһы ураҙа тотмаҡтыр". Башҡа хәҙистәрҙә лә Рамаҙан айы хаҡында бик күп маҡтау һүҙҙәре әйтелә: "Рамаҙан айы дауамында көндөҙ бер аят, кискеһен бер аят уҡыусыны уҡылған аяттағы хәрефтәр тиклем яҡшылыҡ көтә". "Рамаҙан айында гонаһ эшләүҙән баш тартыусыға Аллаһы Тәғәлә ун бер айҙың гонаһын ғәфү итә". Әйҙәгеҙ, шулай булғас, имандаштар, милләттәштәр, был айҙы матур, хәйерле маҡсаттар менән лайыҡлы ҡаршылайыҡ һәм күңелдәребеҙҙе изге Рамаҙандың фарыз ғәмәлдәренә бағышлайыҡ, йорт-илебеҙгә именлек, үҙҙәребеҙгә, ғаиләләребеҙгә, яҡындарыбыҙға һаулыҡ, балаларыбыҙға тәүфиҡ һәм бәхет теләйек, доғалар ҡылайыҡ!

Аҡман-тоҡман ише тәбиғәт күренешенә бәйле март буранай тип йөрөтөлһә лә, был ай бик күп ҡояшлы, күңелгә яғымлы, матур байрамдар һәм күренекле, иҫтәлекле даталарға бай: Башҡорт ғаиләһе, Ҡатын-ҡыҙҙар, Ҡояш, Ер, Урман, Бәхет, Шиғриәт көндәре һәм башҡалар. Әйҙәгеҙ, шулар араһынан Халыҡ-ара бәхет көнөн **(20)** алып ҡарайыҡ әле. Һуңғы йылдарҙа бик тә танһыҡлатты түгелме был тойғо? Ә нимә һуң ул бәхет? Был турала быуаттар буйына философтар ғилми трактаттар яҙған, яҙыусылар, төрлө өлкәлә тикшеренеүсе ғалимдар уға яуап эҙләгән. Ә бит уйлап ҡараһаң, һәр кемдең бәхете - үҙенсә. Кемдер яратҡан йәре менән бергә булыуҙы бәхеткә иҫәпләһә, икенселәр өсөн - бай һәм аҡсалы тормош, өсөнсөләр өсөн ул - ныҡлы һаулыҡ, дүртенселәргә - ғаиләһе, сабыйының донъяға килеүе... "Бәхеткә илтер юл юҡ, бәхет - ана шул юл ул", - тигән Будда. "Бөтә яҡшы нәмәһе булған түгел, ә булған нәмәһенән яҡшыны айырып ала алған бәхетле" (Конфуций). "Кешене бәхетле итеү донъяны тыуҙырыу планына инмәгән" (Зигмунд Фрейд), "Мин донъяға тыуғанмын һәм миңә бәхетле булыу өсөн бөтөн кәрәкле нәмә ошо" (Альберт Эйнштейн), "Бәхетебеҙҙең ундан туғыҙ өлөшө һаулыҡҡа бәйле" (Артур Шопенгауэр), "Бәхет ул нимә теләйһең, шуны эшләү түгел, ә нимә эшләгәнеңде һәр ваҡыт теләп башҡарыу" (Лев Толстой).

Бәхет төшөнсәһен һәр кем үҙенсә ҡабул итә тигәнде бына ошо бөйөк фекерҙәр ҙә яҡшы раҫлап тора ла баһа! Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында ла бәхет тураһында ғәжәп зирәк, аҡыллы фекерҙәр һәм ҡанатлы әйтемдәр бик күп: "Бәхет башы - тәүфиҡ", "Бәхет ерҙән сыҡмаҫ, тирҙән сығыр", "Бәхет алтын байлығында түгел, аҡыл байлығында", "Бәхет ҡошо ҡунғанда беленмәй, осоп киткәндә беленә", "Бәхет теләктә түгел, беләктә лә йөрәктә", "Бәхетлененң кәмәһе ҡоронан йөрөй" һәм башҡалар.

Кешенең күпселек осраҡта шәхси, интим тойғоһон сағылдырған бәхет төшөнсәһенең халыҡ-ара календарь битендә күренекле датаға әйләнеп китеүенең үҙ тарихы бар, әлбиттә. Көньяҡ Азияла Һиндостан менән Ҡытай араһындағы үтеп сыҡҡыһыҙ Гималай тауҙары битләүендә бәләкәй генә бер ил бар - Бутан короллеге тип атала ул. Майҙаны 47 мең кв.м, илдә тибет сығышлы монголоид төркөмгә ҡараған 797 мең кеше йәшәй. Баш ҡалалары - Тхимпху. Шуныһы ҡыҙыҡ, ә бәлки, башҡа илдәр өсөн өлгөләр ҙә: Бутан хөкүмәте үҙенең төп маҡсатын илдәге бөтөн халыҡтың да бәхетле булыуында күрә. Һәм был ҡоро һүҙҙә генә түгел. Илдә дөйөм халыҡ бәхете буйынса дәүләт комиссияһы, шулай уҡ Бәхет министрлығы эшләй. Башҡа

*Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?*

# ПЕНСИЯҒА - ВАҠЫТЫНАН АЛДА

**РФ Социаль фондының Башҡортостан бүлексәһендә кемдәрҙең ваҡытынан алда пенсияға сығыу хоҡуғына эйә булыуы хаҡында һөйләнеләр.**

Республика бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә ваҡытынан алда пенсия тәғәйенләнергә хоҡуғы булған тотош категориялар исемлеге бар. Шулар араһында ауыр, хәүефле һәм зарарлы хеҙмәт шарттарында эш стажы булған кешеләргә эш биреүселәр махсус тариф буйынса пенсияға өҫтәмә страховка взносы түләй. Бынан тыш, уҡытыусылар, табибтар социаль сәбәптәр һәм һаулыҡтары буйынса ваҡытынан алда пенсияға сығыуға иҫәп тота ала. Күп балалы әсәләр, бала саҡтан инвалидтың ата-әсәһенең береһе, хәрби травма арҡаһында инвалидтар, радиация йәки техноген фажиғәләр менән бәйле кешеләр, осош-һынауҙар стажы булғандар ҙа был хоҡуҡҡа эйә.

Ваҡытынан алда пенсия тәғәйенләү хоҡуғына эйә булған категорияларҙың тулы исемлеге менән Социаль фонд сайтында танышырға мөмкин. Инвалид балалы ата-әсәләрҙең береһе ваҡытынан алда пенсияға был баланы 8 йәштән алып тәрбиәләгән шарттарҙа эйә була. Бындай баланы ҡараған осор ата-әсәнең береһенең стаж иҫәбенә индерелә. Шулай уҡ өс балалы ҡатындар ҙа пенсия йәшенән өс йылға иртәрәк законлы ялға сыға ала, ә инде дүрт балаһы булһа - дүрт йылға иртәрәк.

Әйткәндәй, ваҡытынан алда пенсияға сығыу өсөн күп балалы әсәләрҙең 15 йыл страховкалы эш стажы булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта күп балалы әсәләрҙең бала ҡарау осоро ла стажға иҫәпләнә, ләкин был 6 йылдан да артып китергә тейеш түгел. Шулай уҡ уларҙың индивидуаль пенсия коэффициенты ла туплана бара: тәүге балаһын ҡараған осор өсөн - 1,8 (йыл ярым ҡараһа - 2,7) коэффициент, икенсе бала өсөн - 3,6 коэффициент (йыл ярым - 5,4), өсөнсө һәм дүртенсе балаға - бер йыл өсөн 5,4 (йыл ярымға - 8,1). Бындай пенсияны тәғәйенләү өсөн ваҡытынан алда пенсияға сығыу хоҡуғы етерҙән 2 йыл алда Социаль фондҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Ваҡытынан алда пенсияға сығыуҙың тағы бер шарты - пенсия йәшенә тиклем ҡатын-ҡыҙҙың - 37, ирҙәрҙең 42 йыл стажы булырға тейеш. Пенсия алды йәшендәгеләрҙең эшкә урынлашыу мөмкинлеге булмаған хәлдә лә пенсияға иртәрәк китә ала.

**Галина БАХШИЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Шишмә районында Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында 10-сы класс уҡыусылары өсөн биш көнлөк уҡыу сборында ҡатнашыусылар менән осрашты. Осрашыуҙа 350-нән ашыу бала ҡатнашты. Уҡыусыларҙың һорауына яуап итеп, Радий Хәбиров ҡайҙа һәм ҡасан хеҙмәт итеүе тураһында һөйләне: "Мин 1982-1984 йылдарҙа Байкал аръяғы хәрби округында хеҙмәт иттем. Был яҡшы үҫеш мәктәбе ине. Ошо ике йылда егеттәр өлкәнәйеп ҡайта. Хеҙмәтемде рота старшинаһы булып тамамланым", - тине ул.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе, юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин менән осрашты. Осрашыу барышында Президент Тәлғәт Тажетдинға һәм Исламдың барлыҡ вәкилдәренә Рәсәй халыҡтарының конфессия-ара берҙәмлегенә һәм татыулығына өлөш индергәндәре өсөн рәхмәт әйтте. Ил Президенты һүҙҙәренсә, бөгөн Рәсәй мосолмандары үҙҙәренең иң яҡшы сифаттарын күрһәтә, атап әйткәндә, Махсус хәрби операцияла үҙҙәрен батырҙарса тота. Юғары мөфтөй имамдар Махсус хәрби операция барышында яугирҙәрҙең рухын күтәрә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика халҡын 25 февралдә билдәләнгән Дәүләт флагы көнө менән ҡотланы. Ул тыуған ергә сикһеҙ хөрмәт һәм киләсәк быуындарға тапшырыла килгән ҡиммәттәр символы булып тора, тип билдәләне республика етәксеһе. "Беҙҙең флаг, милләтенә, диненә, йәшенә, һөнәренә ҡарамайынса, республиканың бар халҡын берләштерә. Яҡташтарыбыҙҙың ҡаҙаныштарын һәм батырлыҡтарын иҫкә төшөрә. Яңы уңыштарға һәм еңеүҙәргә илһамландыра", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Башҡортостан баҫма киң мәғлүмәт сараларына яҙылыу буйынса алдынғы төбәктәр иҫәбенә инә. Был хаҡта Рәсәйҙең һанлы үҫеш, элемтә һәм киң коммуникациялар министры Мәҡсүт Шадаев Президент үткәргән кәңәшмәлә хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, гәзиттәрҙе күберәк Мәскәүҙә, Краснодар крайында, Башҡортостанда һәм Татарстанда алдыралар. Министр билдәләүенсә, таратылған баҫма матбуғаттың дөйөм күләме 5 йылда ике тапҡырға кәмегән. 2019 йылда яҡынса 500 миллион гәзит-журнал таратылһа, 2024 йылда иһә 257 миллион дана. Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостанда баҫма продукция һатылған киоскылар яңынан асыласаҡ.

✓Башҡортостандың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры вазифаһын башҡарыусы Алексей Гусев вазифаһын ҡалдырҙы. Алексей Гусев һүҙҙәренсә, хәҙер ул - республика етәксеһе Радий Хәбировтың кәңәшсеһе, ә сауҙа министры итеп Рәсәйҙең Үзбәкстандағы сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы Башҡортостан вәкиле Азат Асҡаров тәғәйенләнә.

*✓ Бутанда фәҡәт экологик таҙа электр энергияһы файҙаланыла, урамдарҙа электромобилдәр генә йөрөй. Төтөн борлатып, һауаға ағыу бүлеп сығарыусы заводтар, урам тулы текә машиналар параны юҡ.*



илдәрҙә ҡабул ителгән йән башына тулайым эске продукт (ВВП) Бутанда тулайым милли бәхет тип йөрөтөлә. Бында һәр кемгә бәхет ил Конституцияһы тарафынан гарантиялана. Илдең 60 процент майҙаны урман менән ҡапланған. Йәшеллеккә күмелеп ултырған был илдә беҙҙәге һымаҡ аяуһыҙ рәүештә ағас ҡырҡып һатыу, шунан килем алыу, урманды ҡырып юҡ итеү тигән нәмәне күҙ алдына ла килтермәйҙәр. Киреһенсә, булғанына өҫтәп, бик күп ағас ултырталар. Бутанда фәҡәт экологик таҙа электр энергияһы файҙаланыла, урамдарҙа электромобилдәр генә йөрөй. Төтөн борлатып, һауаға ағыу бүлеп сығарыусы заводтар, урам тулы текә машиналар параны юҡ. Шулай уҡ бында иң мөһиме коррупция ла, енәйәтселек тә, хәйерселек тә, өйһөҙҙәр ҙә юҡ, наркомания түгел, хатта тәмәке тартыу ҙа тыйылған - бөтәһе лә ҡәнәғәт һәм шат күңелле.

Ҡыҫҡаһы, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы (БМО) донъя илдәрен халыҡтарҙың тормош кимәлен яҡшыртыу өсөн бөтөн мөмкинлектәрҙе файҙаланып, Бутан өлгөһөнә эйәрергә саҡырҙы һәм 2012 йылда календарҙа Халыҡ-ара бәхет көнө булдырҙы. Дөрөҫ, айырым илдә бәхет утрауы төҙөүҙе ғәҙәттә утопия тип атарға яраталар, ләкин әлеге Бутанда бәхетле, етеш тормош, халыҡтың рухи үҫеш һәм юғары әхлаҡ кимәле - ысынбарлыҡ. Шуныһы бар, бәләкәй генә ыҡсым илдә һаны миллионға ла тулмаған халыҡты бәхетле итеү ауыр мәсьәлә лә түгелдер, ләкин был бит - нисек итеп бәхетле ил төҙөүҙең юлдарын, ысулдарын күрһәтеүсе өлгө; бәхетле илдең кесерәйтелгән моделе.

Әйткәндәй, йыл һайын Халыҡ-ара бәхет көнөнә арнап, Гэллап (Gallup) компанияһы донъя илдәре халыҡтарының бәхет кимәленә мониторинг үткәрә. 2022 йылда был рейтингта Рәсәй 80-се урында булһа, 2023-тә - 70-се, ә былтыр 72-се урында килә...

**Был айҙағы күренекле һәм иҫтәлекле көндәр:** Изге Рамаҙан айы һәм ураҙа башлана **(1)**, Башҡорт ғаиләһе, Бөтөн донъя граждандар оборонаһы, Наркоманлыҡ һәм наркобизнесҡа ҡаршы халыҡ-ара көрәш **(1)** көндәре, Ҡояш байрамы - Масленица, Халыҡ-ара балалар телевидениеһы һәм радиоһы **(2)**, Бөтөн донъя яҙыусылар, Бөтөн донъя ҡырағай тәбиғәт **(3)** көндәре, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға - 30 йыл тулған көн **(5)**, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар **(8)**, РФ архивтары **(10)**, Бөтөн донъя бөйөр **(13)** көндәре. Бөтөн донъя ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау **(15)**, Ҡырымдың Рәсәйгә ҡушылған көнө. Ҡырым Республикаһын Рәсәй Федерацияһы составына ҡабул итеү хаҡында Килешеүгә ҡул ҡуйылған көн **(18, 2014)**, Һыу аҫты кәмәһе моряктары, Клиент көндәре **(19)**, Үҙәк Совет власының Башҡортостан Хөкүмәте менән Башҡортостан автономияһы хаҡында Килешеүгә ҡул ҡуйылған көн **(20, 1919)**, Көн менән төндөң яҙғы тигеҙләнеш көнө, Бөтөн донъя Ер, Халыҡ-ара бәхет **(20)** көндәре, Халыҡ-ара урман, Халыҡ-ара Наурыз , Бөтөн донъя шиғриәт **(21)**, Бөтөн донъя һыу ресурстары **(22)**, Гидрометеорология хеҙмәте **(23)**, Туберкулезға ҡаршы көрәш, РФ Хәрби-Һауа көстәренең штурман хеҙмәте **(24)**, Ҡәҙер кисе **(26-һынан 27-һенә ҡара кис)**, Рәсәй мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре **(25)**, РФ Милли гвардия ғәскәрҙәре, Бөтөн донъя театр **(27)**, Советтарҙың 5-се Бөтөн башҡорт съезы раҫлаған беренсе Башҡорт АССР-ы Конституцияһына 100 йыл тулған көн **(27, 1925)**, Ураҙа байрамы, Ерҙе һаҡлау **(30)** көндәре.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**5 -** күренекле башҡорт яҙыусыһы, совет яҙыусыларының 1 Бөтөн Союз съезы делегаты, Салауат Юлаев исемендәге БАССР премияһы лауреаты **Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшинаның тыуыуына - 120 йыл** (1905-1954).

**8 (21) -** күренекле партия һәм дәүләт эшмәкәре, 1957-1969 йылдарҙа Башҡортостан партия өлкә комитетының беренсе секретары, 1969-1973 йылдарҙа СССР әҙерләүҙәр министры, 1973-1985 йылдарҙа СССР Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары, Социалистик Хеҙмәт Геройы **Зыя Нурый улы Нуриевтың тыуыуына - 110 йыл** (1915-2012).

**15 -** биолог, эколог һәм йәмәғәт эшмәкәре, биология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Тәбиғи фәндәр академияһы академигы, Юғары һөнәри белем биреүҙең почетлы хеҙмәткәре, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Сәфәрғәли Искәндәр улы Йәнтүринға - 80 йәш** (1945).

**24 -** рәссам, педагог, РФ Рәссамдар берлеге ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге БР Дәүләт премияһы лауреаты **Фәйзрахман Абдрахман улы Исмәғиловҡа - 70 йәш** (1955).

**24 -** хирург, медицина фәндәре докторы, профессор, 2003-2006 йылдарҙа БР һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары, Өфө ҡалаһы Дим районы дауаханаһының баш табибы, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, Пирогов ордены кавалеры **Фәнил Булат улы Шәмиғоловҡа - 60 йәш** (1965).

**25 -** табиб-терапевт, Өфө ҡалаһы Ашығыс медицина ярҙам клиник дауаханаһының бүлек мөдире, Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау отличнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, 2-се дәрәжә Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн орден миҙалы кавалеры **Фәрит Заһит улы Әсфәндийәровҡа - 60 йәш** (1965).

**28 -** фольклорсы, йырсы-сәсәниә, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры, аҡын һәм сәсәндәрҙең Алматы халыҡ-ара конкурсы лауреаты **Розалия Әсфәндийәр ҡыҙы Солтангәрәеваға - 70 йәш** (1955).

**30 -** хирург, медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, кафедра мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Илдар Ишмырҙа улы Һиҙиәтовҡа - 65 йәш** (1960).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ДОШМАН КҮГЕН "ГЕРАНЬ" ҠАПЛАНЫ

**Евросоюз тынғы тапмай, әйтерһең дә, ул тағы ла нисегерәк итеп Рәсәй тәнен зәһәрерәк тешләргә, күберәк ағыу сәсергә була икәне хаҡында көнө-төнө баш вата һәм мөмкин тиклем ҡатмарлыраҡ мәсьәләләр килтереп тыуҙырыу хаҡында ғына уйлай.**

Үҙҙәрен цивилизация үҙәге тип танытырға тырышыусы был континенттың "юлбашсылары" иҫәпләнгән Британия, Франция, Германия, шулай уҡ туҡтауһыҙ Рәсәйгә ҡарап өрөүсе сәүекте хәтерләткән Балтик буйы илдәре лидерҙары һәм русофоб сәйәсмәндәре, ысынлап та, "хәүефһеҙлек", "ер йөҙөндә именлек", "үҫеш һәм прогресс хаҡына хеҙмәттәшлек" тигән һүҙҙәрҙе һәм төшөнсәләрҙе, ғөмүмән, онотто, хәтер янсығынан сығарып ташланы. Юғары мәҙәнилек кимәлен билдәләүсе был һүҙҙәр урынына "санкция", "ҡоралланыу", "ҡаршы тороу", "шартлатыу", "реактив бомбалар менән тәьмин итеү", "ғәскәр индереү" һәм башҡа шундай "йөмлә"ләрҙән тора хәҙер Евросоюздың әүҙем аралашыу лексикаһы.

Украина конфликтын тыныс юл менән хәл итеүгә аяҡ салыусы Европа сәйәсмәндәре ҡылығы Америка Ҡушма Штаттары лидерҙарында күптән инде ризаһыҙлыҡ һәм асыу тыуҙыра. Әле яңыраҡ ҡына милли хәүефһеҙлек буйынса АҠШ президенты кәңәшсеһе Майк Уолтц та ошо хаҡта юғары трибунанан белдерҙе. Аҙаҡтан был хаҡта eadaily-com сайты ҡыҙыҡ ҡына реплика бирҙе: "Уолтц хаталана түгелме? Европала ниндәй сәйәсмән тапҡан ул тағы? Урсуламы - сәйәсмән? Һуң ул бит акушерка... Элекке математика уҡытыусыһы, әлеге ГФР сит ил эштәре министры Бербок ханыммы сәйәсмән? Ә инде гел ел ыңғайына баштарын бороусы Макрон менән Шольц тураһында һөйләп тороу ҙа уңайһыҙ: улар сәйәсмән түгел, ә мәрәкәсе-шут!" Эйе, ситтән яҡшыраҡ күренә бит ул, шуға ла бындай әсе телле хәбәрсе ҡәләме осона эләкмә генә инде!

Әйткәндәй, 23 февралдә Германияла канцлер вазифаһына ваҡытынан алда һайлауҙар булып үтте. Дәғүәселәр әлеге лидер Олаф Шольц, ХДС/ХСС блогынан Фридрих Мерц һәм "Йәшелдәр" партияһынан Роберт Хабек - улар Украинаны артабан ҡоралландырыу яҡлылар. Эксперттар айырыуса власть башына Мерцтың килеүенән хәүефләнә: ул канцлер була ҡалһа, Рәсәй менән ГФР мөнәсәбәттәре уғата киҫкенләшәсәк кенә, ти улар. Һәр хәлдә, Мерц күптән инде үҙен яңы канцлер ролендә күрә ине. Һайлауҙар һөҙөмтәһендә уның партияһы иң күп тауыш йыйып, еңеүсе булды һәм әле яңы хөкүмәт составын ойошторорға әҙерләнә. Ҡайһы бер сәйәсмәндәр күҙаллауынса, был һайлауҙарҙан һуң Германия үҙенең яңы канцлеры менән Европала лидерлыҡ ролен ҡулына аласаҡ һәм шул уҡ ваҡытта, Европаның позицияһын нығытып, АҠШ-тан бойондороҡһоҙлоҡҡа өлгәшергә ынтыласаҡ.

Украина.ру сайты хәбәренә ҡарағанда, әгәр Мәскәү менән Киев араһында килешеүгә өлгәшелгән хәлдә, Британия премьеры Кир Стармер Франция президенты Макрон менән берлектә төҙөлгән 30 мең һандағы "тыныслыҡ ғәскәре" көстәрен Украинаға индереү хаҡындағы планы менән Дональд Трампты таныштырасаҡ. Был йәһәттән Евросоюз Трамптан ярҙамға өмөт итә, ә Макрон менән Стармер АҠШ президентын Рәсәй менән үҙ-ара һөйләшеүҙәрҙән туҡтатырға маташасаҡ.

23 февраль - Ватан һаҡсылары көнөн Рәсәй Ҡораллы көстәре хәрби постарында уяу ҡаршыланы. Оборона министрлығы белдереүенсә, 23-өнә ҡарай төндә беҙҙең Һауа һөжүменә ҡаршы оборона саралары 20 украин пилотһыҙ аппаратын бәреп төшөрҙө. Дошмандың һауа һөжүме быны менән генә сикләнмәне, таңға табан Орел, Тула һәм Курскиға табан осоролған тағы ла 10 аппарат бәреп төшөрөлдө. Уның ҡарауы, 23 февраль төнө Украина Рәсәй армияһының ҡеүәтле һөжүменә дусар булды: дошман күгеn Рәсәйҙең "Герань" тибындағы 200-ҙән ашыу дроны ҡапланы. Бынан тыш, РФ Ҡораллы көстәре Одесса өлкәһе объекттарын утҡа тотто: 15 урында яңғыраған көслө шартлауҙарҙан һуң, янғындар башланды, тип хәбәр итә хәрби хәбәрселәр.

Украина хәрби көстәре Херсон өлкәһенең һул яҡ яры биләмәһендәге граждандар инфраструктураһына ҡарата ҡоралды баш-баштаҡлығын дауам итә. 22 февраль кис Херсон өлкәһенең тораҡ пункттарына 23 снаряд яуҙырылған, унан 23-өнә ҡарай төнө буйы тағы 18 снаряд атылған. Яңы Збурьевка ауылында бер граждан һәләк булған, башҡа ауылдарҙа, бәхеткә күрә, тыныс халыҡ араһында зыян күреүселәр һәм ҡорбандар юҡ. Курск өлкәһенә бәреп ингән дошман көстәре менән һуғыштар дауам итә.

...Ә Трамп ваҡиғаларҙы ашыҡтыра. Уның матбуғат секретары әйтеүенсә, АҠШ президенты "ошо аҙнала уҡ", имеш, Украина конфликтын көйләү буйынса килешеүгә өлгәшеләсәгенә өмөт итә. Шул уҡ ваҡытта матбуғат секретары Дональд Трамп менән Владимир Путиндың осрашыу мәсьәләһе буйынса әлегә бер ни ҙә әйтә алмауын белдерҙе.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Халыҡ-ара туған тел көнө уңайынан республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы башлап ебәргән "Башҡорт теле" флешмобына тәүгеләрҙән булып министр Илдар Мәүлитбирҙин ҡушылды, видеояҙмала ул башҡорт шағиры Баязит Бикбайҙың шиғырын һөйләне. "Туған тел - быуындарҙы бәйләүсе тере еп, үткәндәр һәм киләсәктәр араһындағы күпер. Тел аша һәр милләттең ата-бабаларының аҡылы, ғөрөф-ғәҙәттәре, тарихы һәм үҙенсәлекле һыҙаттары күсә. Тел - халыҡтың күңеле, уның хәтере һәм рухи байлығы", - тип мөрәжәғәт итте министр республика халҡына.

✓Башҡортостандың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Зөһрә Гордиенко туристар өсөн хаҡтар билдәләү сәйәсәте тураһында һөйләне. "Унда факторҙар күп - ял индустрияһы хеҙмәткәрҙәре өсөн эш хаҡы ла, ял базаларын хеҙмәтләндереү ҙә - электр, таҙалыҡ, сифатлы сервис тураһында ҡайғыртырға кәрәк. Әлбиттә, тәбиғәт шарттары ла хаҡтарға йоғонто яһамай ҡалмай, беҙҙә йылытыу миҙгеле октябрҙән апрелгә тиклем дауам итә, ошо ресурстар өсөн түләргә кәрәк", - тип белдерҙе Гордиенко.

✓Башҡортостандың Мәскәүҙәге тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә республикабыҙҙа тыуып үҫкән студенттарҙың Премьер-министр Андрей Назаров менән осрашыуы ойошторолдо. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Осрашыуҙа студенттар Башҡортостандың Министрҙар кабинеты башлығына шәхси һәм профессиональ үҫеш тураһында һорауҙар бирҙе, идеялары һәм тәҡдимдәре менән таныштырҙы, республикаға ҡайтыу мөмкинлектәре тураһында белешә алды.

✓Башҡортостанда киҙеү сәбәпле 4 мәктәп һәм 1 балалар баҡсаһы карантинға ябылды, шулай уҡ 33 мәктәптә 66 класс һәм 16 балалар баҡсаһында 25 төркөмдөң эше өлөшләтә туҡтатылды. Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығында белдереүҙәренсә, һуңғы аҙнала республикала респиратор инфекциялар менән ауырыусыларҙың 7 процентҡа артыуы күҙәтелә. Уҙған аҙнала республикала киҫкен респиратор инфекциялар йоҡтороуҙың 28 меңдән ашыу осрағы теркәлгән, шуларҙың яртыһы - 14 йәшкә тиклемге балалар. Башҡа респиратор вирустар араһында грипп вирустарының өлөшө - 64,5 процент. А киҙеүе (H1N1) вирусы өҫтөнлөк итә.

✓Башҡортостанда "Айыҡ водитель" оператив-иҫкәртеү операцияһы үтте. Республиканың дәүләт автоинспекцияһында белдереүҙәренсә, махсус операцияның төп бурысы - эскән килеш транспорт менән идара итеүгә бәйле юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙарҙы иҫкәртеү. Дәүләт автоинспекцияһы статистикаһы буйынса, 2024 йылда һәр дүртенсе үлемесле юл-транспорт ваҡиғаһы иҫерек водителдәр ҡатнашлығында була. Улар юл хәрәкәтендә ҡатнашыусылар өсөн ҙур хәүеф тыуҙыра.

*✓ Алғы һыҙыҡта уларҙың яуаплылыҡ, намыҫ, Тыуған илгә тоғролоҡ, киҫкен хәлдәрҙә ҡарар ҡабул итә белеү кеүек иң яҡшы сифаттары сыныҡты. Бөгөн етәксе өсөн ошондай сифаттар бик мөһим.*



ҠЫҪҠАСА

# УҠЫУСЫЛАРҘЫ ДӘРТЛӘНДЕРЕҮ ӨСӨН...

**Башҡортостан Башлығы уҡыусылар өсөн 150 мең һумлыҡ өҫтәмә премия тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Уны мәктәп олимпиадалары призерҙары һәм еңеүселәре республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттарына ингән осраҡта ғына алырға мөмкин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2018 йылда Башҡортостанда уҡыусылар олимпиадаһында ҡатнашыусылар һәм балаларҙы әҙерләгән уҡытыусылар өсөн премиялар булдырылды. Түләүҙәр күләме 2021 һәм 2024 йылда арттырылды. Хәҙер Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы еңеүселәре һәм уларҙың педагогтары 300 мең һум алырға мөмкин. Тәүҙә премияның суммаһы 60 мең ине, 2021 йылда ул 100 меңгә етте. Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы призерҙарына һәм уларҙың уҡытыусыларына 150 мең һум күләмендә премия түләнә. Быға саҡлы уның күләме 30 мең, аҙағыраҡ 60 мең һум булды. Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса 100 балл йыйған уҡыусыларҙың 150 мең һум күләмендә бер тапҡыр биреләсе торған премия алыу мөмкинлеге бар. Премия донъя кимәлендәге Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенә ҡараған республика вуздарына уҡырға ингән осраҡта ғына тапшырыла.

✓ **Башҡортостанда биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән әсәләр "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнде.** Бүләкләнеүселәр араһында Әбйәлил, Әлшәй, Ауырғазы, Баймаҡ, Баҡалы, Бәләбәй, Бөрйән, Дәүләкән, Йәрмәкәй, Йылайыр, Иглин, Илеш, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Краснокама, Күгәрсен, Мәсетле, Миәкә, Нуриман, Өфө, Учалы, Хәйбулла, Саҡмағош, Шаран районларынан һәм Салауат, Ағиҙел, Өфө ҡалаларынан 50 ҡатын-ҡыҙ бар. Башҡортостанда "Әсәлек даны" миҙалы 1998 йылдан алып биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға тапшырыла. Бөгөнгә 9 меңдән ашыу әсә ошондай миҙалға һәм бер тапҡыр түләнә торған 100 мең һум аҡсаға лайыҡ булған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Ғаилә йылы йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда 306 ғаилә балалар тәрбиәләү өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн дәүләт наградаларын алды. Шуларҙан алты әсә - "Герой-әсә" ордены (улар бөтәһе 8), туғыҙ ғаилә - "Ата-әсәлек даны" ордены миҙалы, 10 ғаилә - "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы һәм 281 ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнде.

✓ **Стәрлетамаҡта Ағиҙел йылғаһы аша яңы күперҙе 2026 йылдың аҙағына тиклем файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә.** Республика етәксеһе билдәләүенсә, юл үткәргес мөһим транспорт артерияһы булып тора, ҡаланы башҡа муниципалитеттар менән бәйләй. "Быйыл иҫке күпергә - 45 йыл. Беҙ халыҡҡа уны реконструкциялауҙы күптән вәғәҙә иттек. Хатта уңайһыҙлыҡ тыуҙырмаҫ өсөн күләмле эштәр осоронда ваҡытлыса понтон күпере төҙөү ҙә планлаштырылған ине, ләкин икенсе ҡарарға килдек. Яңы ике һыҙатлы күпер булған күперҙең дублеры буласаҡ. Уны тапшырғандан һуң, иҫкеһе менән ни эшләргә икәнен уйларбыҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИДАРА ИТЕРГӘ ӘҘЕРЛӘЙҘӘР




**Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар проекты старт алды**

Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров хәбәр итте: "Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса беҙ "Геройҙар дәүере" федераль проектын киңәйтәбеҙ. МХО-ла ҡатнашыусылар араһынан дәүләт һәм муниципаль власть органдарында, предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа эшләү өсөн квалификациялы идарасылар әҙерләйбеҙ. Алғы һыҙыҡта уларҙың яуаплылыҡ, намыҫ, Тыуған илгә тоғролоҡ, киҫкен хәлдәрҙә ҡарар ҡабул итә белеү кеүек иң яҡшы сифаттары сыныҡты. Бөгөн етәксе өсөн ошондай сифаттар бик мөһим. Программала ҡатнашыусылар тәжрибәле остаздар етәкселегендә уҡып сығып, стажировка үтеп, беҙҙең идара итеү командаһында лайыҡлы урын алырға тейеш".

Программаның маҡсаты - МХО яугирҙары араһынан яңы быуын идарасылар әҙерләү. Проектта ҡатнашыу өсөн Махсус операцияла ҡатнашҡан һәм урта һөнәри йәки юғары белемгә эйә булған һәр кем ғариза бирергә хоҡуҡлы. Башта героибашкортостана.рф сайтында теркәлергә, анкета тултырырға, эссе яҙырға, онлайн-тест һәм әңгәмәләшеү үтергә кәрәк. Бынан һуң квалификацияны күтәреү курстары асыла. Юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкәндәр ҡайтанан һөнәри әҙерлек программалары буйынса уҡып сығырға һәм уларға эш тәҡдим ителергә тейеш.

# ҒАЛИМДАРҒА - ШУНДАЙ БУРЫС

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә "Фән сәғәте"н үткәрҙе. Был сара Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәгендә уҙҙы.**

"Күпселектә ғилми потенциалдың юғары булыуы һөҙөмтәһендә Башҡортостан алдынғы, сәнәғәт яғынан үҫешкән төбәктәр иҫәбенә инә. Өсөнсө йыл беҙ - Милли фәнни-технологик үҫеш рейтингында тәүге унау иҫәбендә. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге - республиканың төп ғилми үҙәге, илдең алдынғы фәнни учреждениеларының береһе. Беҙҙең үҙәк көслө ғилми мәктәптәре, тармаҡ компетенцияларын үҫтереү үҙәктәре булған лидер ойошма тип танылды. 14 институт фәнни өлкәнең бөтә йүнәлештәрен тиерлек үҙ эсенә ала. Һеҙ мөһим тикшеренеүҙәр үткәрәһегеҙ, тәбиғи һәм техник фәндәр өлкәһендә ҙур асыштар яһайһығыҙ. Евразия социомәҙәни киңлегендә киң гуманитар, этнологик компетенцияларҙы үҫтерәһегеҙ", - тине Радий Хәбиров.

Республика Башлығы шулай уҡ Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге коллективы алдына өс бурыс ҡуйҙы. "Беренсеһе - йәш ғилми кадрҙар әҙерләү. Университетты тамамлаусыларҙың күбеһенең карьераһын республика иҡтисадының фән һәм технологик секторҙары, фән менән бәйләүе беҙҙең өсөн бик мөһим. Улар менән ныҡлы эшләргә, ректораттар, уларҙың ғилми етәкселәре менән эш алып барыу зарур. Икенсеһе. Уҙған йыл аҙағында беҙ республиканың фәнни-технологик үҫеш дәүләт программаһын раҫланыҡ. Ғилми-технологик көн тәртибенә әүҙем ҡушылырға кәрәк. Өсөнсөһө. Хөрмәтле коллегалар, беҙ һеҙҙә иҡтисадты һәм социаль өлкәне үҫтереүҙең төп мәсьәләләрендә хеҙмәттәштәр, партнерҙар күрәбеҙ. Һеҙҙең тикшеренеүҙәр башлыса иҡтисадтың, аграр тармаҡтың, социаль өлкәнең инновациялы секторҙары өсөн ғәмәли һөҙөмтәгә йүнәлтелгән булырға тейеш", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

# ИМТИХАНДАР...

**РФ Мәғариф министрлығы һәм Рособрнадзор 2025 йылда Берҙәм дәүләт имтиханын (БДИ), Төп дәүләт имтиханын (ТДИ) һәм дәүләт сығарылыш имтиханын үткәреүҙең рәсми даталарын, шулай уҡ контроль үлсәү материалдары заданиеларын үтәү өсөн ҡулланырға мөмкин булған уҡытыу һәм тәрбиә саралары исемлеген иғлан итте. Был хаҡта мәғлүмәт Рособрнадзор сайтында баҫылған.**

Раҫланған бойороҡтарға ярашлы, 2025 йылда Берҙәм дәүләт имтиханы ваҡытынан алда 21 марттан 21 апрелгә тиклем, төп осорҙа 23 майҙан 23 июнгә тиклем уҙа. Өҫтәмә осор, резерв сроктарҙы ла индереп, 4 сентябрҙән 23 сентябргә тиклем. 2024 йылдағы кеүек өҫтәмә көндәр ҙә билдәләнгән, унда ҡатнашыусылар уҡыу предметтарының береһен - 3 һәм 4 июлдә ҡайтанан тапшыра ала. 23 майҙа тарих, әҙәбиәт һәм химия буйынса имтихандар Берҙәм дәүләт имтиханының төп осорон аса. 27 майҙа - база һәм профилле кимәлдәге математиканан, 30 майҙа рус теленән имтихандар үтә. 2 июндә - йәмғиәтте өйрәнеү һәм физика, 5 июндә биология, география һәм сит телдәр буйынса Берҙәм дәүләт имтиханының яҙма өлөшөн тапшыра ала. 10 һәм 11 июндә информатика һәм телдән имтихан планлаштырыла. 16 июндән 23-өнә тиклем расписаниела бөтә фәндәр буйынса имтихан тапшырыу өсөн резерв көндәр ҡаралған. 9 класты тамамлаусылар өсөн Төп дәүләт имтиханы ла өс осорға бүленә: ваҡытынан алда (22 апрелдән 17 майға тиклем), төп (21 майҙан 2 июлгә тиклем) һәм өҫтәмә (2 сентябрҙән 23 сентябргә тиклем).

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

# СИТТӘН КИЛЕҮСЕНЕҢ ТӘРТИБЕ...

**Былтыр миграция ҡануниәтен боҙған 659 кешене Башҡортостандан ҡыуып сығарғандар һәм депортациялағандар.**

Был хаҡта 20 февралдә республиканың етенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 19-сы ултырышында Башҡортостан буйынса эске эштәр министры, полиция генерал-лейтенанты Александр Прядко хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, инеүгә рөхсәт бирмәү тураһында 2000-дән ашыу тәҡдим ебәрелгән һәм сит ил кешеләренең йәшәү ваҡытын ҡыҫҡартыу тураһында 1000-дән ашыу ҡарар ҡабул ителгән. Шулай уҡ полиция хеҙмәткәрҙәре законһыҙ миграцияны ойоштороуҙың 11 фактын асыҡлаған.

- Әгәр рәсми статистиканы алһаҡ, сит ил кешеләре, әлбиттә, республикалағы криминаль хәлгә бик үк йоғонто яһамай, әммә улар ҡатнашлығындағы һәр ваҡиғаны халыҡ бик ауыр ҡабул итә. Был йәһәттән Өфөнөң Ленин районында һәм Кушнаренко районында сит ил граждандарының балаларҙы, ҡаты тәрбиә сараларын ҡулланып, Ҡөрьән нигеҙҙәренә өйрәтеүҙе ойоштороу фактын да билдәләп үтмәй булдыра алмайым, - тип хәбәр итте Александр Прядко.

**Ксения КАЛИНИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда республика символы - ҡурай төшөрөлгән яндауырҙар барлыҡҡа килде. Хәҙер улар Туймазы индустриаль колледжы корпустарының береһен биҙәй. Был хаҡта колледж директоры Олег Ғайсин хәбәр итте. "Башҡортостан символы, ҡурайҙы беҙҙең производствоға өйрәтеү мастеры Артур Йәнгиров колледждың лазер станогында ҡырҡып эшләне. Радий Хәбиров гранты аҡсаһына һатып алынған станокта", - тине ул.

✓ Учалы районы егете, "Лука" позывнойлы Махсус хәрби операция яугиры Украина Ҡораллы көстәре полковнигын һәм майорын әсиргә алған. Яҡташыбыҙҙың ҡаһарманлығы хаҡында "Башҡорт батальоны" телеграм-каналы хәбәр итә. "Лука" Оҙонкүл ауылында тыуған. Мәктәпте Озерный ауылында тамамлаған, колледждан һуң иретеп йәбештереүсе булып эшләгән. 2022 йылда контракт төҙөп, МХО биләмәһенә юлланған. Килешеү ваҡыты үткәс, тыуған яғына ҡайтҡан, ләкин шул уҡ йылдың көҙөндә өлөшләтә мобилизация сиктәрендә фронтҡа киткән. "Лука" штурм төркөмөндә хеҙмәт иткән, һуңынан рота командиры итеп тәғәйенләнгән, бер нисә тапҡыр яраланған.

✓ Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы фенол тураһында ялған хаттар тураһында хәбәр итте. Ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, министрлыҡ сәләмәтлекте фенол йоғонтоһонан һаҡлау сараларын көсәйтеү тураһында хат ебәрмәгән. Социаль селтәрҙәрҙә уҡыусыларҙың һәм персоналдың һаулығын фенол йоғонтоһонан һаҡлау өсөн өҫтәмә саралар ҡабул итеү кәрәклеге тураһында документ таралғайны."Был мәғлүмәт дөрөҫ түгел. Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы белем биреү учреждениеларына хаттар ебәрмәгән, күрһәтелгән номерлы документ теркәлмәгән", - тип белдерҙеләр ведомствола.

✓ Сит ил агенты статусы асыҡ власть органдарында вазифа биләүселәрҙең вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатыу өсөн нигеҙ булырға тейеш. Республика парламенты беренсе уҡыуҙа "Башҡортостан Республикаһы Башлығы тураһында" һәм "Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутатының статусы тураһында" законадарына үҙгәрештәр индергән тейешле закон проектын ҡабул итте. Билдәләнеүенсә, бындай ҡарар милли именлек, йәмғәтселек мәнфәғәттәрен яҡлау кәрәклеге менән бәйле.

✓ Туризмды үҫтереү үҙәге директоры урынбаҫары Артур Иҙелбаевтың мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн республика халҡы һәм ҡунаҡтары экономлы ял итә ала, премиум класлы туризм да үҫешә. "Хәҙер һайлау мөмкинлеге киң, эконом-сегментта ял итеү өсөн 1,5-6 мең түләргә кәрәк. Тыныс ҡына төн ҡунып сығырға мөмкин, бәҙрәф, душ бар. Дүрт йыл элек бер ниндәй ҙә һайлау мөмкинлеге юҡ ине", - ти ул.

✓ *Ғаиләнең имен булмауын иртәрәк асыҡлау һәм ғаиләгә ваҡытында ярҙам күрһәтеү етемлек проблемаларын хәл итеүҙең төп юлы булып ҡала. 2024 йылда 336 бала тәрбиәләнгән 168 ғаилә ярҙам алды.*



*АФАРИН!*

# ОСҠОНДАР ЯЛҠЫНҒА ӘЙЛӘНҺЕН!



**Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында үткән башҡорт мәҙәниәтенә, башҡорт теленә арналған матур саралар тураһында яҙғаныбыҙ бар инде.**

Уҡыу йорто "Родина" кинотеатры менән берлектә асыҡ "Рәми дәресе" проектын тормошҡа ашыра. Уның сиктәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре кинотеатрҙа башҡорт фильмдарын ҡарау, актерҙар һәм кинорежиссерҙар менән осрашыуҙар форматында үтә. Бында шулай уҡ йыл да Башҡортостан халыҡтарының милли аш-һыуын һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән бер нисә проект тормошҡа ашырыла, улар араһында: башҡорт бауырһағы, рус ҡоймағы байрамдары, осетин бәлешен әҙерләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре һәм пасха күмәсен бешереү буйынса ярыштар ойоштороу ҙа йолаға әйләнгән.

Ә күптән түгел Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында икенсе тапҡыр, хәҙер инде республика кимәлендә "Осҡон" II Асыҡ интеллектуаль уйындары үтте. Уны Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды һәм "Йәшлек" гәзите Халыҡ-ара туған телдәр көнөнә арнап ойошторҙо.

Быйыл интеллектуаль уйын 2 этапта уҙғарылды, беренсе этап ситтән тороп үткәрелде һәм унда республика ҡалалары һәм райондарынан тиҫтәнән артыҡ урта уҡыу йорто командалары ҡатнашты. Финалда иһә Б.М. Мәмбәтҡолов исемендәге Сибай педагогия колледжы, Салауат белем биреү һәм профессиональ технологиялар колледжы, Башҡортостан кооператив техникумы, Мәсәғүт педагогия колледжы, Өфө ағыулыҡ-энергетика колледжы һәм Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы командалары визитка, "Әлләсе" уйынында, капитандар ярышында, башҡорт халыҡ әкиәтен сәхнәләштереүҙә үҙ-ара көс һынашты.

Уйындың бөтә турҙары буйынса I урынды Сибай педагогия колледжы, II урынды Салауат белем биреү һәм профессиональ технологиялар колледжы, III урынды Башҡортостан кооператив техникумы яуланы, ҡалғандар төрлө номинациялар буйынса баһаланды. Командалар сығыштарын Рәсәй Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты өлкән ғилми хеҙмәткәре Эльвира Рахимова, "Йәшлек" республика гәзите вәкиле Гөлназ Шәйхетдинова ҡатнашлығындағы абруйлы жюри баһаланы.

Әйткәндәй, бынан ике тиҫтәнән ашыу йылдар элек Өфөлә уҡыусы балалар өсөн башҡорт "Шаянинум"ы ойошторолоуы оло ваҡиғаға әйләнгәйне. Ул бөгөн дә баш ҡаланың ғына түгел, ә республика кимәлендә уҡыусы балаларҙың яратып ҡатнашҡан, уларҙы башҡорт теле, башҡорт юморы тирәләй берләштергән тапҡырҙар бәйгеһе булып ҡала. Ҡалаларҙағы урта белем биреү усаҡтарында, колледждарҙа башҡорт телендә башҡорт мәҙәниәтенә, әҙәбиәтенә, теленә арналған саралар үткәреү, ҡыҙғаныска ҡаршы, бик үк йыш күренеш түгел. Шуның өсөн Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы етәкселегенең был башланғысы, йәғни "Осҡон" Асыҡ интеллектуаль уйындары ойоштороуы маҡтауға лайыҡ. Был тәжрибәнең башҡа ҡалаларыбыҙҙағы колледждарға ла таралыуын теләге килә. Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры Ришат Сабитовтың "Бөгөнгө йәш йөрәктәрҙәге осҡон ялҡынға әүерелеп, тыуған телебеҙгә һөйөүҙе дөрләтһен", - тигән һүҙҙәре шуға ишаралай ҙа инде.

**Камилә ҒӘЛИЕВА.**

*БЕЛМӘҺӘҢ...*

# СОЦИАЛЬ КОНТРАКТ НИ БИРӘ?



**Ишле ғаиләләр, МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре социаль контракт формаһында дәүләт ярҙамы күрһәтелгәндә өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин тейешле ҡарарға ҡул ҡуйған.**

Ошондай ярҙам юллаған ваҡытта уларҙың йән башына уртаса килемен иҫәпләгәндә берҙәм пособие индерелмәй, тип асыҡлыҡ индерҙе Мишустин һәм бының йыл һайын өҫтәмә рәүештә 118 мең самаһы социаль контракт төҙөргә мөмкинлек бирергә тейешлеген билдәләне. Дәүләт башлығы Владимир Путин социаль контракт нигеҙендә дәүләт ярҙамы күрһәтеү өсөн ғаиләнең йән башына уртаса килемен иҫәпләгәндә берҙәм пособиены иҫәпкә алынған килемдәр исемлегенән төшөрөп ҡалдырырға ҡушты. Ошондай контракт ярҙамында аҙ килемле граждандар яңы эш табыу, үҙ эшен асыу, шәхси ярҙамсы хужалыҡты үҫтереүгә аҡса алыу өсөн ҡайтанан уҡып сығырға, квалификацияһын күтәрергә мөмкин. Министрҙар кабинеты етәксеһе билдәләүенсә, социаль контракттар үҙҙәренең һөҙөмтәлелеген раҫлай. Алдағы алты йылда төбәктәр уларҙы тормошҡа ашырыу буйынса сығымдарҙы берлектә финанслауға кәмендә 100 миллиард һум алырға тейеш.

*ҠЫҪҠАСА*

# ВЕТЕРАНДАРҒА...

**Бөйөк Еңеүгә 80 йыл тулыу айҡанлы Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе ветерандарға бер тапҡыр аҡса түләй.** Рәсәй Федерацияһы Президенты Указы менән Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәм инвалидтарға, уларҙың тол ҡатындарына, шулай уҡ "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе", "Камауҙа ҡалған Севастополдә йәшәүсе", "Камауҙа ҡалған Сталинградта йәшәүсе" билдәләре менән бүләкләнгән граждандарға һәм элекке бәлиғ булмаған концлагерь тотҡондарына бер тапҡыр 80 мең һум аҡса бирелә. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда тылда (алты айҙан да кәм түгел) эшләгәндәргә, шулай уҡ һуғыш йылдарында фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн СССР-ҙың орден-миҙалдары менән бүләкләнгәндәргә һәм элекке нацистик концлагерь, төрмә, геттоларҙың бәлиғ булған тотҡондарына 55 мең һум түләнә. Социаль фондтың республика буйынса бүлексәһе идараһы Фәнил Вәхитов әйтеүенсә, әле республикала үрҙә әйтелгән түләүҙе алырға хоҡуҡлы 7,5 меңдән ашыу граждан, шул иҫәптән 116 Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы һәм инвалид йәшәй. Аҡса апрель пенсияһы менән бергә бирелә.

✓ **Өфөлә 1,5 меңгә яҡын бала дәүләт ҡарамағында. Өфөнөң Опека һәм попечителлек идаралығы мәғлүмәте буйынса, 1468 тулы һәм социаль етемдәрҙең 93 проценты тәрбиәгә алған ғаиләләрҙә йәшәй.** 2024 йылда Өфөлә 236 бала (2023 йылда иһә 289) етем ҡалған. Шул иҫәптән алты сабыйҙан баш тартҡандар. Тәүҙә улар 19 булған, ләкин 13 әсәне балаларын алырға күндергәндәр, тип хәбәр итте идаралыҡ етәксеһе Ильнара Сатаева. Былтыр ғаиләләргә урынлаштырылған балалар 19 процентҡа артҡан: 390 етем уллыҡҡа йәки ҡыҙлыҡҡа алынған, йәки опекаға бирелгән. Ә 72-һе балалар йорттарына һәм приюттарға оҙатылған. "Ғаиләнең имен булмауын иртәрәк асыҡлау һәм ғаиләгә ваҡытында ярҙам күрһәтеү етемлек проблемаларын хәл итеүҙең төп юлы булып ҡала. 2024 йылда 336 бала тәрбиәләнгән 168 ғаилә ярҙам алды", - тип хәбәр итте Ильнара Сатаева. Хәбәр иткәнебеҙсә, уҙған йылда Башҡортостанда 1025 етем торлаҡлы булды.

✓ **Февраль айында арттырылған социаль түләүҙәр, пособиелар һәм компенсациялар араһында бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие ла бар.** Дәүләт Думаһында белдереүҙәренсә, түләүҙең күләме бала тыуған көнгә билдәләнә. 2025 йылдың февраленән төп күләме яҡынса 27 мең һум тәшкил итә. Был пособие илдең теләһә ниндәй төбәгендә яңы тыуған сабыйҙың ата-әсәһенең беренһенә түләнә (килеме һәм эше булмаһа ла). Әгәр ике йәки өс игеҙ бала тыуһа, пособие һәр сабыйға бирелә. Ҡағиҙә булараҡ, пособие әсәнең исеменә күсерелә, ләкин уның бала табыр алдынан рәсми эше булмаһа, ә тормош иптәше эшләп йөрөгән осраҡта, пособие уға эшләгән урыны буйынса күсә. Әгәр ике ата-әсә лә эшләмәй икән, аҡса алыу өсөн Дәүләт хеҙмәттәре порталында йәки Рәсәйҙең Социаль фонды йә иһә Күп функциялы үҙәк бүлексәләрендә ғариза яҙырға мөмкин. Башҡортостанда бала тыуғанда пособие күләме хәҙер 31 мең һумға яҡын (15 процент Урал коэффициентын иҫәпкә алып).

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан халҡын марттың һуңғы көнөндә Ураҙа байрамына бәйле өҫтәмә ял көтә. Быйыл мосолман байрамы йәкшәмбегә, 30 мартҡа, тура килә. Шуға ял көнө дүшәмбегә, 31 мартҡа, күсерелә. Ураҙа байрамы донъя мосолмандарының 30 көнлөк ураҙаһы тамамланғас, изге Рамаҙан айының аҙағында билдәләнә.

✓2025 йылдың йәйенә үк Өфө үҙәгендә 1100 түләүле парковка урыны барлыҡҡа килә, тип хәбәр итте журналистарға баш ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев. "Муниципаль контракттарға ҡул ҡуйылды. Ҡар иреп бөткәс тә, мәғлүмәти-аңлатыу эшен башлайбыҙ, тариф һәм мәғлүмәт системаһының нисек эшләүен аңлатырбыҙ. Шулай уҡ тейешле юл билдәләре ҡуйырға кәрәк", - тине ул.

✓Өфөнөң К-60 трамплинында капиталь ремонт тамамланды. 33-сө олимпия резервы спорт мәктәбенә ҡараған был объектта иретеп йәбештереү, конструкцияны нығытыу, тау өлөшөн тышлау һәм таҡта һалыу кеүек эштәр башҡарылды. Спорт ҡоролмаһы яңынан файҙаланыуға әҙер, саңғысылар күнекмәләр башлаған да инде. 2024 йылдың июнендә трамплин янғындан зыян күргәйне. Өфө халҡы, спорт объектын реконструкциялауҙа ярҙам һорап, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән тура бәйләнештә мөрәжәғәт итте.

✓Өфөлә Милли әҙәбиәт музейында "Башҡорт әҙәбиәте ынйыһы" күргәҙмәһе асыла. Ул бөйөк яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты һәм Көнсығышта ҡатын-ҡыҙҙар араһында беренсе роман яҙған Һәҙиә Дәүләтшинаның тыуыуына 120 йыл тулыуға арнала. Күргәҙмә 6 мартта Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында асыла. Ул әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәтендә мөһим урын биләгән Һәҙиә Дәүләтшинаның ижады менән таныштыра.

✓Башҡортостан каратистары Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренең Фуджейра ҡалаһында уҙған халыҡ-ара ярыштарҙа миҙалдар яуланы. Ҡыуаныслы яңылыҡты республика Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Өфө ҡыҙы Аида Бикмәтова 68 килограмм ауырлыҡ категорияһында - беренсе, Сафия Маннанова 42 килограмм ауырлыҡ категорияһында өсөнсө урынды алды. Турнирҙа донъяның 86 иленән 2200 спортсы ҡатнашты.

✓Өфө рапирасыһы Тимур Сафин фехтование буйынса "Гран-при"ҙың 2-се этабында көмөш призер булды. Ярышта илдең иң көслө спортсылары ҡатнашты. Ярымфиналда Тимур Сафин Дмитрий Осиповты еңде - 15:11, әммә финалда Кирилл Бородачёвтан 15:12 иҫәбе менән еңелде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡыҙғатау**
**(Большой веретенник)**



Күгәрсен ҙурлығында. Суҡышы нәҙек, тура һәм оҙон. Ҡош туйы ваҡытында ата ҡыҙғатауҙың башы, муйыны, түшенең өҫкө яғы сағыу ерән төҫкә инә, түшенең аҫҡы өлөшө аҡ, ҡара-көрән, ерән төҫтәге таптар менән ҡаплана, аҡ ҡорһағы ҡара төҫтәге ҡауырһындар менән биҙәлә. Ҡойроғо - ҡара, ҡойроғоноң төбө - аҡ. Көҙгөнән оло ҡоштарҙың барыһы ла һоро төҫкә инә. Йәш ҡыҙғатауҙар иһә - ерән-ҡыҙғылт.

Ата ҡыҙғатау ҡош туйы мәлендә һауала түңәрәктәр яһап оса - йә бер ҡанатына, йә икенсеһенә "ауа", йә бер урында ҡанатын елпеп, туктап тора, үҙе бер туктауһыҙ "ву-этю-вутю" тип һайрай.

Евразия киңлектәрендә осрай. Асыҡ урындарҙы ярата, тауҙарҙа һирәгерәк осрай.

Өфө яйлаһында һәм унан көнсығышҡа ҡарай киткән райондарҙа - һирәк ҡош. Көньяҡ Уралдың дала һәм урманлы далаларында аҙ һанда. Ә бына урманлы тауҙар өҫтөнлөк иткән райондарҙа бөтөнләй осрамай. Дим, Агиҙел һәм Тиҙ Танып йылғалары буйында күргәнебеҙ булды. Яйыҡ йылғаһы, Учалы һәм Әбйәлил күлдәрендә иһә - ғәҙәти ҡош. Ырымбур өлкәһендә оя ҡора.

Бик иртә, апрелдең башында уҡ ҡайта. Асыҡ, үләнле йәки бөтөнләй таҡыр урынға ла оя ҡора ала. Яландар, үлән ныҡ баҫмаған һаҙлыҡтарҙа оялай. Хатта баҫыу ситтәрендә лә оя ҡора ала.

Ғәҙәттә 4 (һирәгерәк 3-5) йомортҡа һала. 1964 йылдың майында Үргөн күлендә 5 йомортҡалы ояға тап булдыҡ. Йомортҡаларҙы 23-25 көн буйына инә ҡош менән ата ҡош сиратлап баҫа. Ояға кеше йәки йыртҡыс ҡоштар яҡынлаһа, ныҡ шаулап осоп китә, шул рәүешле иғтибарҙы үҙенә йүнәлтергә теләй. Йыртҡыс ҡоштарҙы, һайыҫҡан һәм ҡарғаларҙы ҡыуып ебәрә. Бер айлыҡ бәпкәләр оса башлай.

Тукланыу өсөн умыртҡаһыҙҙар төркөмөнә ҡараған бөтөн ҡабырсаҡтар, ябай организмдар, быуынтыҡ аяҡлыларҙы һыуҙан һәм ярҙан тота. Үҫемлектәрҙән башлыса орлоҡтар һәм ҡуғанбаштарҙы ашай. Баҫыуға яҡын оя ҡороусы ҡоштар иген менән дә туклана.

Июль башында тупланып, августа йылы яҡҡа ҡуҙғала башлайҙар. Африка, Көньяҡ Азия, Австралияла ҡышлай.

БР Ҡыҙыл китабына һаҡлауға мохтаж төр булараҡ индерелгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

**Өфөлә Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусы һәм Башҡорт дәүләт аграр университеты майҙансыҡтарында "Киләсәк командаһы" ауыл йәштәре форумы үтте. Унда агросәнәғәт комплексының алдынғы вәкилдәре - барлығы165 йәш белгес һәм уҡыу йорттары студенттары ҡатнашты. Сара йәш белгестәргә ярҙам итеү һәм, уларҙың төбәк үҫешенә индергән өлөшөн иғтибарға алып, стратегик башланғыстар сиктәрендә урындағы властың ауыл йәштәре менән тығыҙ бәйләнешен булдырыу маҡсаттарында ойошторолдо.**

# АУЫЛДЫ КҮТӘРЕҮ ҘӘ...

## улар иңендә



Ике көн дауам иткән форумдың программаһы үҙ эсенә панель дискуссияларҙы, тормошта үҙ юлыңды табыу һәм уй-ниәттәреңде ғәмәлгә ашырыу алымдарын өйрәтеүгә йүнәлтелгән оҫталыҡ дәрестәрен, шулай уҡ ауыл биләмәләрен үҫтереү өсөн стартап проекттар эшләү буйынса практик сессияларҙы алды. Осрашыуҙар майҙанында власть һәм бизнес вәкилдәре сығыш яһаны, үҙҙәренең тәжрибәләре менән уртаҡлашты һәм кәңәштәр бирҙе. Әлбиттә, йәш аграрийҙар өсөн Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Хөкүмәт вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов менән аралашыу - иң фәһемле һәм иҫтәлекле ваҡиға булды.

-Бөгөн Башҡортостан - ҡымыҙ бешеү һәм бал алыу буйынса лидер, һыйыр ите етештереү, һауын һыйырҙары һәм аттар һаны йәһәтенән - 2-се, һөт һауыу һәм эре мөгөҙлө мал үрсетеү буйынса 3-сө урындар биләй. Шулай уҡ шәкәр сөгөлдөрө (5-се урын), картуф (8-се урын) үҫтереү күрһәткестәре менән дә тәүге 10 төбәк иҫәбенә инә, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров, йәш аграрийҙар алдында сығыш яһап. - Беҙ бөгөн ауыл хужалығын индустриялаштырыу юлын һайлағанбыҙ һәм әле үҙебеҙҙә барыһы менән дә тиерлек етерлек күләмдә тәьмин итәбеҙ. Һуңғы йылдарҙа республикала 21 индустриаль ферма асылды, улар тауар һөтөнөң 42 процентын етештерә. Тармаҡта 50 меңгә яҡын кеше эшләй.

Шул уҡ ваҡытта кадрҙар ҡытлығы ла бар - ауыл 5 меңгә яҡын белгескә мохтаж. Киләсәккә төбәлгән төп бурыстарҙың береһе - ауыл хужалығына инвестициялар йәлеп итеү. Шулай уҡ тармаҡ технологик яҡтан ныҡ үҫешә. Цифрлаштырыу, роботлаштырыу, биотехнологиялар, экологик башланғыстар, башҡа бик күп йүнәлештәр ауыл хужалығы производствоһын үҫтерә лә инде...

- Республика уҡыу йорттарында ветеринария һөнәренә конкурс - иң юғарыларҙың береһе, - тине Радий Хәбиров ауылда ветеринар табиптар етешмәүе тураһында һорауға яуап итеп. - Шул уҡ ваҡытта бөтә йәш белгестәр ҙә ауылға ҡайтырға уҡталып бармай. Улар шәхси клиникаларҙы өҫтөнөрәк күрә. Ә бит райондарҙа алып барған ветеринар табиптарҙың хеҙмәте бик мөһим - улар санитар кордон тотоп, ауыл хужалығы малдары эпидемияһын иҫкәртә, таралыуға юл ҡуймай.

Форумда ҡатнашыусыларҙы шулай уҡ йылҡысылыҡ, экологик туризм мәсьәләләре, хужалыҡтарҙы киңәйтеү өсөн субсидиялар алыу мөмкинлеге, Белоруссиянан Башҡортостанға ҡайтарылған зубрҙар яҙмышы ла ҡыҙыҡһындырҙы.

Билдәләнеүенсә, республикала йәш аграрийҙар өсөн көнүҙәк булып торған агростартап, ғаилә фермалары, кооперативтар һәм агротуризм буйынса ярҙам программалары 2030 йылға тиклем һаҡлана. Шулай уҡ республикала йыл әйләнәһенә йәшелсә-емеш үҫтереү мәсьәләһен хәл итеү өсөн теплицаларға ярҙам итеү мөмкинлеге ҡарала. Был турала вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов һөйләне.

"Киләсәк командаһы" ауыл йәштәре форумында Әлшәй районы Хәнифә ауылынан Марсель Муллағәлиев та ҡатнашты. Ул - Н. М. Сибирцев исемендәге Аксен агросәнәғәт колледжының икенсе курсы студенты. Ауыл хужалығы производствоһы мастеры буйынса һөнәргә уҡый. Марселдың юғары форумда үҙе белем алған уҡыу йортон һәм тотош тыуған районын кәүҙәләндереүе юктан түгел, әлбиттә. Егет уҡыуҙа, йәмәғәт эштәрендә, спортта әүҙем һәм ярайһы уңыштарға өлгәшкән. Ауылда тыуып үҫкәс, оҙаҡ икеләнеп тормай, туғыҙынсы кластан һуң тура Аксен колледжына бара. "Өйгә лә яҡын, һөнәр ҙә оҡшай", - ти ул. Форумда команда менән "Һөтсөлөк тауар фермаһы" проекты өҫтөндә эшләйҙәр. Уҡытыусылары биргән белемгә, эш тәжрибәһенә таянып, кәңәшсе-белгестәр ярҙамында заман талаптарына тап килгән производство ҡорорлоҡ план төҙөүгә өлгәшәләр.

- Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың сығышы ныҡ оҡшаны. Күтәрелгән темаһы еренә еткереп аңлата. Матур итеп ябай тел менән һөйләй, - тине Марсель, форум тәьҫораттары менән бүлешеп.

Колледждан һуң уҡыуын ул Башҡорт дәүләт аграр университетында дауам итмәксе. Армияға барып ҡайтыу ҙа егеттең алдағы тормош пландарынан төшөп ҡалмаған.

**Байгилде МОТАЛЛАП.**

ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ

# МӨҺИМ НӘМӘ ТУРАҺЫНДА ҺӨЙЛӘШЕҮ



**Һуңғы йылдарҙа йәш быуынға илһөйәрлек тәрбиәһе биреүгә етди иғтибар бүленә. Был - бик ваҡытлы күренеш, тип уйлайым. Һәр дүшәмбе мәктәптәрҙә гимн яңғырауы ғына ни тора! Хәҙер күптәр илебеҙ һәм Башҡортостаныбыҙҙың дәүләт гимндарының һүҙен ятлап бөтөп бара.**

"Мөһим нәмә тураһында һөйләшеү" тип аталған дәрестең әһәмиәте лә бик ҙур. Башланғыс класта уҡып йөрөгән ейәнем тап ошо дәрес аша дәүләт байрамдарының барыһы тураһында ла белә. Илһөйәрлек тәрбиәһе ғаиләлә башлана ла, тап ошондай үрҙә атап кителгән сараларҙа дауам итә. Быларҙың барыһы ла - бала йәки үҫмерҙең Ватанына һөйөүен, уның тарихы, милләттәштәренә ихтирамын тәрән тойоуын тәрбиәләүгә йүнәлтелгән процесс. Билдәле булыуынса, уны тәрбиәләүҙә бер нисә мөһим аспект бар.

***Беренсеһе, тарихи белем биреү.*** Балаларға илдең тарихын өйрәтеү мотлаҡ. Был йүнәлештәге белем уларға Ватандың ниндәй юлды үтеүен аңларға ярҙам итәсәк. Мәктәптәрҙә дәрестәрҙән тыш, элекке совет осорондағы кеүек, илһөйәрлек тураһында фильмдарға, тарихты өйрәнеү музейҙарына алып барыу файҙалы буласаҡ.

***Икенсеһе, милләттең мәҙәни мираҫына ихтирам тәрбиәләү.*** Ватанды һөйөү өсөн уның мәҙәниәтен белергә һәм хөрмәт итергә кәрәк. Балаға халыҡ йолалары, байрамы, әҙәбиәте, музыкаһы, һынлы сәнғәте һәм башҡалар тураһында белем биреү мөһим. Йолаларҙы бергәләп башҡарыу, милли кейем кейеү, фольклор ижадын яҡшы белеү - былар барыһы ла балала үҙ тамырҙарына һөйөүен арттыра.

***Өсөнсөһө, туған телде өйрәнеү һәм яратыу.*** Туған тел - милләттең рухи һәм мәҙәни нигеҙе. Туған телде белмәү йәки ихтирам итмәү Ватанға һөйөүҙе кәметергә мөмкин. Телгә ихтирам тәрбиәләү өсөн баланы әсә теле дәрестәрендә әүҙем ҡатнашырға, әҙәбиәт һәм шиғриәт уҡырға тәҡдим итергә кәрәк.

***Дүртенсеһе, яҡташтарҙы ихтирам итеү.*** Йәмғиәттәге мөнәсәбәттәр ҙә йәш быуынға илһөйәрлек хисен тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай. Балаларға туғандары, күршеләре, ауылдаштары менән һөйләшергә, ярҙамлашырға өйрәнергә кәрәк. Ошо рәүешле улар үҙен йәмғиәттең бер өлөшө итеп тоясаҡ.

***Бишенсеһе, тәбиғәтте һөйөү.*** Тәбиғәт - Ватандың аҫыл бер өлөшө. Балаларҙа тирә-яҡ мөхиткә һөйөү тәрбиәләргә кәрәк. Урмандарҙа, тауҙарҙа, күлдәрҙә сәйәхәт итеү, хайуандар донъяһы менән танышыу һәм экологик проблемаларҙы аңлау баланы Ватанының тәбиғәтен яратырға һәм һаҡларға өйрәтә.

***Алтынсыһы, патриотик сараларҙа ҡатнашыу.*** Илһөйәрлек рухы булған байрамдар, хәрби парадтар, хәрби-спорт уйындары һәм башҡа сараларҙа ҡатнашыу балаларҙа патриотизмды көслөрәк тойоуға булышлыҡ итәсәк. Илдең тарихи ҡаҙаныштарын, батырлығын һәм ҡыйыулығын аңларға ярҙам итәсәк. Шулай уҡ бала ата-әсәһенең ил алдында бурысын үтәп, эшенә тоғро булыуын күреп үҫһә, ул да шундай уҡ граждандыҡ сифаттарына эйә буласаҡ.

**Бына ошо алты йүнәлештең барыһы ла йәш быуынға таныш, аңлайышлы булырға тейеш. Шул сағында ғына ул үҙ иленең ысын патриоты булыр!**

**Ильвира БАРЫЕВА.**
**Көйөргәҙе районы.**

✓ *Обручев, үҙенән алдараҡ идара иткәндәр кеүек үк, башҡорттарға айырым иғтибар бүлә, уларҙың ярым күсмә тормошон заманға ярашлы итеп үҙгәртергә теләй, әммә уның был ниәте ғәмәлгә ашмай.*



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Генерал Владимир Афанасьевич Обручев**

**(1842 - 1851 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған)**

Ғөмүмән, Ырымбурҙа тормош тын ғына, шау-шыуһыҙ һәм башҡа шундай күренекле саралар һыҙ бара. Пасханың беренсе көнөндә сиркәүҙә булғандарҙың барыһы ла Обручевта тәғәмләнә; кемдәрҙелер һайлап алып, махсус саҡырыу ғәмәлдә булмай, әммә тантаналы көндәрҙә мәжлескә юғары вазифа биләүсе чиновниктар араһынан һайлап алынғандар саҡырыла. Обручев шулай уҡ яңы йылда һәм таж кейҙереү (тәхеткә ултыртыу) көнөндә махсус ойошторолған мәжлескә ҡырғыҙҙар араһынан иң хөрмәтлеләрен саҡырып ҡунаҡ итә, уларҙы һыйлау өсөн ҡазнанан йылына 6 мең һум ассигнация бүленә.

Уңышһыҙ тамамланған Хива походынан һуң һәм Обручевтың төбәк начальнигы вазифаһын башҡара башлауы менән хөкүмәт үҙенең ҡырғыҙ далаларына, унда көн иткән ҡырғыҙҙарға һәм беҙҙең Урта Азия ханлыҡтарына: Хиваға, Бохараға һәм Кокандҡа ҡарата ҡараштарын үҙгәртте. Элекке талаптар айырым ҡырғыҙ ырыуҙары араһында тыныслыҡ урынлаштырыу, низағтарҙы һәм барымталарҙы туҡтатыу менән сикләнде. Элек далала ярайһы уҡ ҙур ҡораллы шайкалар тупланыу хаҡында хәбәр алыныу менән һәр йәйен тейерлек унда казактарҙың артиллерияһы булған хәрби отрядтары ебәрелде. Юлбаҫарҙар тар-мар ителеп, уларҙы ойоштороусылап ҡулға алынып йә иһә үлтерелеп бөткәс, казактар линияға ҡайта, дала, күрәһең, өс солтан-хаким идаралығында тынысланып ҡалған, һәм улар аша барса яңы саралар уҙғарылған. Әммә ваҡыт солтан-хакимдарҙың ҡырғыҙҙарға йоғонтоһо ҙур булмауын күрһәтте, улар үҙҙәрен рус батшаһы подданныйҙары итеп таныманы, тип әйтергә була; буйһоноуҙың тышҡы билдәләренән ваз кисмәйенсә, улар Хива ханына һыйыныуҙы өстөн күрә һәм төп баш бирмәүселәр уның биләмәләрендә күсеп йөрөнө, уға яһаҡ (зәкәт) түләне; шул уҡ ваҡытта даланың беҙҙең ягына баҫып ингәндәрендә хан ҡаҙнаһын тулыландырыуы өсөн тирмә яһағын бик теләп түләнеләр. Бындай тәртипһеҙлектәрҙә хәрби отрядтарҙы дала төпкөлдәрендә тотоп, халыҡ араһында хәрәкәт башланыу менән һәр осраҡта ла уны баҫтыра алыу аша бөтөрөп булыр ине. Ошо маҡсатта 1845 һәм 1846 йылдарҙа Турғай һәм Ырғыҙ йылғаларында составында 200 казак, пехота ротаһы һәм хеҙмәтләндереүселәре менән бер нисә пушка булған ике нығытма төҙөлдө. Ырымбур казактары хеҙмәт иткәне Ырымбур нығытмаһы тип аталһа, Урал казактары гарнизонынан торғаны Урал нығытмаһы исемен алды. 1847 йылда Һырдарья йылғаһында, уның тамағы янындағы Раим ыҙанында ошо уҡ исем менән аталған тағы бер ҡеүәтлерәк нығытма төҙөлдө.

Ошондай нығытмалар төҙөтөү махсус белгестәрҙе, инженерҙарҙы һәм флот офицерҙарын саҡырыу зарурлығын тыуҙыра. Бында килеүселәр йәш, яҡшы белем алған кешеләр була. Улар Ырымбурҙа йәшәй, урындағы йәмғиәтте тәрләләндерел ебәрә, бигерәк тә дворяндар собраниеһының составы яҡшыра, бының менән иҫкерә барған тәртип-мөнәсәбәттәр яңылары - баш ҡала йәмғиәтендә ҡабул ителгәндәре менән алмаштырыла.

Йәш кешеләрҙең килеүе-китеүе Обручев идара иткән барса йылдарҙа ла дауам итә. 40-сы йылдар аҙағында - 50-се йылдар башындағы Ырымбур йәмғиәте генерал Перовский ҡалдырғандан күпкә айырыла: ул саҡта уға буйһонған һәм һәр саҡта ла уға теләктәшлек белдергән кешеләр бер бөләкәй төркөмдә тәшкил итһә, яңы йәмғиәттә билдәле бер ҙуллылыҡ хасил була һәм был урындағы тормошҡа йоғонто яһай.

Обручев, үҙенән алдараҡ идара иткәндәр кеүек үк, башҡорттарға айырым иғтибар бүлә, уларҙың ярым күсмә тормошон заманға ярашлы итеп үҙгәртергә теләй, әммә уның был ниәте ғәмәлгә ашмай.

Ырымбурҙа XVIII быуаттан бирле малайҙар өсөн хөкүмәт асҡан уҡыу йорттары була, мәҫәлән, баш халыҡ училищеһы, ул хәҙер беренсе 3-класлы ҡала училищеһы тип атала, әммә ҡыҙҙар өсөн мәктәптәр бөтөнләйгә булмай; ҡыҙҙарҙы шәхси кешеләр уҡыта, әммә уларҙың бындай эшкә әҙерлекһеҙ булыуы билдәле. Быға төбәк менән идара итеүселәрҙән беренсе булып граф Сухтелен иғтибар итә. Уның ваҡытында Петербургтың гвардия полктары эргәһендәге мәктәптәр өлгөһендә беренсе ҡыҙҙар мәктәбе асыла. Мәктәптә уҡырға, яҙырға, арифметиканың беренсе ғәмәлдәренә, ҡул эштәренә һәм башмаҡ тегеү һөнәренә өйрәтәләр. Ҡаланың түбәнге ҡатлам кешеләренең - мещандарҙың, отставкалағы һалдаттарҙың һәм һөнәрселәрҙең ҡыҙҙарын да уҡытыу күҙаллана, шуға күрә мәктәптең составы сыбар була. Ырымбурҙа хеҙмәт иткән, бигүк бай булмаған чиновниктарҙың ҡыҙҙарына фәндәр һәм ҡул эштәре өйрәтелһә, ә ябай ҡала кешеләренең ҡыҙҙарын уҡытыу тик һөнәрселеккә өйрәтеү менән сикләнә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

ТАРИХЫНДЫ ТАНЫТ...

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ

### Ҡараҡая ҡалаһы хәҙерге Өфөгә тап килә



Иҙрисизең картаһы буйынса, Өфөгә бигерәк тә Ҡараҡая ҡалаһы тап килә. Ул Атил, йәғни Ағиҙел йылғаһына ҡойған, уның уң яҡ ҡушылдығы Ҡариҙелде хәтерләткән урында билдәләнгән. Дөрөҫ, Өфө тип күҙалланған Ҡараҡая ҡалаһы хаталыҡ менән Ағиҙелдең уң яҡ түгел, һул яҡ ярында урынлаштырылған. Бында, әлбиттә, бер ваҡытта ла Башҡортостанда булмаған авторҙы ғәфү итергә мөмкин. Иҙриси: "Ҡараҡая - ағас өйҙәрҙән һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала, - тип яҙа. - Булғарҙар уларҙа даими баҫымсылыҡ яһап тора. Уларҙың араһы - 16 аралыҡ һәм улар араһында даими туҡтауһыҙ һуғыш бара..." Әгәр бер көнлөк аралыҡты 40 километр тип алғанда, Ҡараҡая ҡалаһы һәм булғарҙар араһы 640 километр тәшкил итә. Был Өфө менән Татарстандағы хәҙерге Булғар ҡалаһы араһына яҡын. Шулай итеп, Өфө-II археологик комарткыһы Иҙриси үҙенең яҙмаларында яҙған Ҡараҡая ҡалаһына ниндәйҙер кимәлдә тап килә, тип раҫларға мөмкин.

XIII быуатта Башҡортостан Алтын Урҙа составына инә. Мәғлүм булыуынса, монгол хандары, ҡағиҙә буларак, яулап алынған илдәрҙең эске эштәренә ҡыҫылмай, уларҙан бары тик яһаҡ түләүҙе һәм кәрәк булғанда һуғыш алып барыу өсөн ҡоралы ополчение ғына талап итә.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**

**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

III дәрәжә Дан ордены менән наградланыусылар: 20-се гв. ПВО дивизионы яугиры Акимов Терентий Семенович (Йылайыр районыны, Кананикольское ауылынан). Зандхаузен өсөн алыштағы батырлығы өсөн; гв. кесе сержанты, 148-се гв. артминполкының орудие командиры Ғәфуров Ғилемхан Ғәфур улы (Тәтешле районының Илмәт ауылынан), элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм ике тапҡыр "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән, Брунов (20 апрелдә) һәм Креммен (24 апрелдә) тораҡ пункттарын алғанда күрһәткән мәргәнлеге өсөн ; 58-се гв. атлы полкының ПТР тоҫҡаусыһы Сәйфуллин Абдулла Сәйфулла улы (Бүздәк районының Ҡаңлы-Төркәй ауыл советынан), элегерәк ике тапҡыр "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булған. 25 апрелдә Зило-каналдың икенсе ярындағы плацдармда дошмандың станковый пулеметын сафтан сығара, яралана; 60-сы гв. атлы полкының 76-миллиметрлы батареяһының орудие расчеты номеры Сәйфетдинов Шәйхи Сәйфетдин улы (Туймазы ауылынан). Одерҙан Бранденбургҡа тиклем барған алыштарҙа үҙен ҡыйыу яугир итеп таныта. 27 апрелдә Бранденбург өсөн барған алыштарҙа уның орудиеһы расчеты бер дзотты емерә, ике дзоттың утын баҫтыра.

Дивизия командирының 1945 йылдың 25 һәм 31 майындағы бойороғо менән Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булыусылар: 58-се гв. атлы полкының ПТР тоҫҡаусыһы ярҙамсыһы Мустафин Сабир (Тәтешле районының Үрге Ҡоҙаш ауылынан); 60-сы гв. атлы полкының 45-миллиметрлы орудиеһы ездовойы Ғиләжев Әхиәр Шаһап улы (Саҡмағош районының Митро-Әйүп ауылынан); корпустың комендант взводы автоматсыһы Хәзиев Мирхатип Ҡотлый улы (Туймазы районының Һалҡын-Шишмә ауылынан) һәм башҡа күп яугирҙар. Шулай уҡ полк командирҙары бойороғо менән йөҙәрләгән рядовой һәм сержант составындағы атлылар миҙалдар менән бүләкләнә. Уларҙың барыһының да исем-шәрифтәре дивизияның тарихи документтарында теркәлеп ҡалған. Мәҫәлән, 60-сы гв. атлы полкына ҡараған материалдарҙа түбәндә күрһәтелгән мәғлүмәттәр бар. 1945 йылдың 5 июнендәге бойороҡҡа ярашлы, "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнеүселәр: 3-сө эскадрондың станковый пулемет номеры (патрондар биреп тороусы), гв. ефрейторы Хәбибуллин Ғәзизйән Хәбибулла улы (Саҡмағош районының Яңы Балаҡ ауылынан). Барса алыштарҙа дошмандың көслә уты аҫтында гв. өлкән сержанты Аверьяновтың пулеметын боеприпастар менән тәьмин итә. Дошман атакаға күтәрелгәндә үҙенең карабинынан бер нисә һалдатты сафтан сығара; 76-миллиметрлы батареяның 3-сө орудиеһы тоҫҡаусыһы, гв. сержанты Ғәйсин Лоҡман Мөсәлим улы Бүздәк районының Көбәк ауылынан). 1945 йылдың 27 апрелендә Бранденбург янындағы алышта тура тоҫҡап атып немецтарҙың 2 пулемет расчетын юҡ итә, 3 контратаканы кире ҡаға; 62-се гв. атлы полкының 2-се эскадроны ҡылыссыһы, гв. рядовойы Хәкимов Мәсгүт Ханнан улы (Бүздәк районының Ҡаҙактар-Ҡобау ауыл советынан). 26 апрелдә Бранденбург өсөн алышта яугирҙар сафының иң алдына сыға һәм, карабинынан мәргән атып, өс фаустникты юҡ итә, һөҙөмтәлә взвод алға барыуын дауам итә. 2 майҙа Премниц ҡалаһын алған саҡта разведтөркөм составында дошмандың дүрт һалдатын әсиргә ала. Дивизияның артиллерия парҡы ездовойҙары, гв. рядовойҙары Хәйретдинов Хәбир Хәйретдин улы (Бүздәк районының Ҡаңлы-Төркәй ауылынан) һәм Фәхретдинов Әбүзәр Йәнгир улы (Маҡар районының Байгужа ауыл советынан) "Боевой хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән наградлана.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Атайым, Ниғәмәт Яппар улының өс ауылда өс ҡатыны булды. Әсәйем шуларҙың уртансыһы. Улар өс әхирәт ише татыу йәшәнеләр, тупһаға саң ҡундырмай береһе икенсеһенең хәлен белешеп, ҡунаҡҡа йөрөштөләр.*

# АУЫЛ

## Әҙәбиәттең ҡаҙаны

**Башҡорт АССР-ның халыҡ шағирҙары бар. Күп түгел. Дүртәү генә: Мәжит Ғафури, Рәшит Ниғмәти, Мостай Кәрим, Сәйфи Ҡудаш. Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағирҙары арыуыҡ. Әлегә ун ете. Халыҡ яҙыусылары ла шул сама - ун алты. Был исемлектәрҙә Хәйҙәр Тапаҡовтың исем шәрифе әлегә юҡ. Әммә ул ижадының башынан уҡ ауыл яҙыусыһы булып танылып, шул тирмәнгә ижади һыу ҡойоуын дауам итә, бай телле сәсмә әҙәрҙәрҙән яңынан-яңы өлгөләр тыуҙыра. Асылы, эскерһеҙ булмышы шундай. Яҙыусының рәсми танылыуға илткән юлы, ҙур тырышлыҡ аша тапалмаған юлдан барыуы һөҡландыра. 70 йәшлек юбилейы уңайынан "Киске Өфө" гәзитенең әүҙем авторы Хәйҙәр Ниғмәт улы ТАПАҠОВҡа тормошо һәм ижады тураһында бер нисә һорауға яуап биреүен һораныҡ:**

**Борон танышҡанда, ҡайһы ырыуҙанһың, ниндәй һыуҙы эскәнһең, атың-затың кем, тип белешкәндәр. Һеҙ башында беҙ ҙә һеҙгә шул һорауҙы юлламаҡсыбыҙ.**

- Үҫәргән ырыуынанмын, һылыуған һыуым - Һаҡмар. Һүҙҙе тыуған яғымдан башлайым әле. Иҫ китмәле, ожмахҡа тиң гүзәл бит ул беҙҙең яҡтар: бихисап төрлө ағастар һылашҡан ташлы ҡаялар, сәскәле болон-туғайҙар, өҫкә осоп ҡалҡҡан ҡара урман, әле әйтеп үткән суйын ҡаяларҙы урталай ярып, иретеп Һаҡмар ағып ятыр булыр. Шуғалыр ҙа Йылайыр яҡтарын юҡҡа ғына "икенсе Швейцария" тип атамағандарҙыр. Бына ошо хозур тәбиғәттә тыуып та яҙыусы, шағир булмау, ғәйеп һыналыр ине! Ауылдаштарым да йор һүҙлеләр, киң күңелләләр, мәрәкәселдәр, йыр-моңға, ижадҡа әүәҫтәр. Ауыл мәктәбен тамамлаусылар араһында бер фән кандидаты, ике фән докторы бар, бихисап атҡаҙанғандар хаҡында әйтеп тораһы ла түгел.

Атым-затыма килгәндә... Ғаиләлә ике апайым һәм мин әсәйем тәрбиәһендә үҫтек. Ҡатын-ҡыҙ мөхите минең ҡылыҡ-фиғелгә лә ыңғай йоғонто яһаған, әйләнә-тирәмә күп осраҡта гүзәл, хисле зат күҙе менән ҡарайым, ҡырыҫ йәшәйеште ҡабул итеүем дә башҡасараҡ, мәрхәмәтлерәк, миһырбанлыраҡ, тип әйтәйем микән. Әсәйем участка дауаханаһында ашнаҡсы булып эшләне, иртә таңдан эшенә китеп, ҡараңғы төшкәс кенә арып-талып ҡайтып инде гелән. Шуға хужалыҡ мәшәҡәттәренә бик иртә егелдем, өй тирәһен ҡарау, малды бағыу шөхсән минең өҫтә ине. Ун йәшем тулыртулмаҫтан бесән эшләргә төштөм, маҡтанып әйтмәйем, өйрәтә һелтәп, ыҙанды киң итеп алып ҡырып саптым бесәнде, күбә тарттырыуға, күбәләүгә, кәбән ҡойоуға иң әүәл осталыҡ, таһыллыҡ кәрәклеген дә бик иртә үҙләштерҙем. Мал бағыу, бесән сабыу, трактор менән һөйрәтеп килтерелгән утынды ҡырҡып-ярыу, аҙғы сәсеү осоронда туҙанға батып сәскес артына баҫыу, йәй көндәре өмәләрҙән ҡалмай бүлексә бесәнен әҙерләү, күлдәк-ыштаның йәшел һутҡа ҡатҡансы силос һалыу, көҙ етте иһә, төн уртаһына ҡәҙәр ырҙын табағында ашлыҡ таҙартыу, комбайнер ярҙамсыһы булыу... Теҙеп хисаплай китһәң эшләмәгән эштәрем дә ҡалманы шикелле.

Тағы ла бер тормош хәлемде ситләтеп үтеү мөмкин түгел - атайһыҙ, ярты етем үҫтем. Атайым, Ниғәмәт Яппар улының өс ауылда өс ҡатыны булды. Әсәйем шуларҙың уртансыһы. Һис кемде ғәйепләмәйем, заманы шулай булған, ҡәһәрле һуғыш ҡасафаты. Атайымдың белеме дүрт класс ҡына булһа ла, һуғыш ветераны, яҡшы ойоштороусы, оҫта оратор булараҡ, ғүмере буйы етәксе эштәрендә, атап әйткәндә, колхоз рәйесе, ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе вазифаларында эшләне, өҫтөнә һәр саҡ орденлы китель, гәләфи салбар, аяҡтарына хром итектәр кейҙе, егеп йөрөгән ажар айғырының дуғаһына зеңгер ҡыңғырау тағылған, шул ҡыңғырау сыңлап китһә: "Ана, Ниғәмәт-түрә килә ята!" - тип халыҡ шундуҡ клубҡа йыйылған, йәнәһе лә. Хәреф танып гәзит-журналдар уҡыһа ла, яҙыу-һыҙыуҙы белмәгәс, ике-өс сәғәткә һуҙылған докладын һәммәһен ауыҙына ҡаратып, аптыратып, һөҡландырып сығыш яһаған.

Ә өс әсәйемә килгәндә, улар өс әхирәт ише татыу йәшәнеләр, тупһаға саң ҡундырмай береһе икенсеһенең хәлен белешеп, ҡунаҡҡа йөрөштөләр, һис ҡасан мир алдында көндәштәренең ғәйбәтен һатманылар, йөҙөн йыртманылар. Тар күңелле үсал яңы быуат ҡатындары көндәштәренә хәҙер ниндәйерәк мөнәсәбәттә, ҡараш булырҙыр ине икән, әйтә алмайым, ауыр, сетерекле һорау. Әсәйем үлем түшәгенә яткас, кесе әсәйем һуңғы мәлгә тиклем уның янында ултырып күҙҙәрен йомдорҙо. Бик күп ағайҙарымапайҙарым араһында мин иң кесеһе һәм иң иркәһе инем, ҡулдарынан төшөрмәй яраттылар, әпәүләнеләр. Әле лә мин уларға шул сифатта ҡалдым һәм ҡалам. Мостай Кәрим Сибайға ҡунаҡҡа килгәс, минә уның менән бер өҫтәл артында ултырырға тура килде. Шунда, әңгәмә мәлендә, әйтә ҡуйҙым: "Мостафа Сафич, һеҙҙең ике әсәйегеҙ булған, ә минеке бит өсәү ине!" Ул һәр ваҡыттағыса мәрхәмәтле йылмайҙы ла былай тине: "Тимәк, Хәйҙәр, һин минә ҡарағанда өс тапҡырға бәхетлерәк булғанһың!"



**Фельдшер, уҡытыусы, ауыл хакимиәте башлығы, район хакимиәте башлығының урынбаҫары, яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе, гәзит мөхәррире... Үҙ яҙаныңды әҙләүме был, әллә яҙмыш елдәренең шулай иҫеүеме?**

- "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ!" тиҙәр бит әле, юғарыла башҡарған ауыл эштәрен теүәлләп үттем, тормошта ла шулай килеп сыҡты. Һабыр урта мәктәбен яҡшы билдәләргә тамамланым. Шулай тиһәм дә, аттестатымда бер "өсләү"м бар. Уны алгебраны уҡытҡан өс туған ағайым Ғәнеи Исҡужа улы "сәпәне". Уға һис тә үпкәләмәйем, тимәк, белемем шул кимәлдән ары китмәгән. Уның әйткәндәре бөгөнгөләй хәтерҙә: "Һин ҡара хисаптан арыны белмәнен, белмәҫһең дә, әммә киләсәктә яҙыусы булып китһәң, һис тә аптырамаҫ инем".

Мәктәпте тамамлағас, тура Сибай медицина училищеһына йүнәлдем, кесе апайым да минән алда шунда уҡып сыҡҡайны. Теләгем - бик йыш сырхаған әсәйемә ярҙам итеү, уны дауалау. Уҡыу йортона ҡереү өсөн тәүге имтихан химия фәненән ине. Ауыл балаһы рус телен ҡайҙан һыйна белһен инде, билет алғанмын да иң алғы партала аптыранып китеп ултырам. Сиратым етте. Имтихан алыусы ир "Отвечайте по билету", ти минең яҡҡа уҫал ҡарап. "Не магу!" тип яуапланым. "Если не можешь, выходи!" "Әгәр мин һорауҙарға саф башҡортса итеп яуап бирһәм, мөмкинме?". "Очень плохо знаю свой родной язык, ну попробуйте!" ти был юғалып ҡалып. Сатнатып яуап бирҙем һорауҙарға. Ир йылмайҙы ла зачеткама "бишле"не ҡуйҙы һәм былай тине: "Спасибо, парень, за урок башкирского языка, теперь точно буду изучать родной язык, и впредь буду знать его в совершенстве!"

Уҡыу еңел бирелмәне, тема ны шиғыр һымаҡ ятлап бара инем дәреҫкә, яуап бирер мәл етһә, юғалып, телдән ҡала ла ҡуям, тотош төркөм көлә ине яуабыма һәм һуңғы сиктә сираттағы "ике"лене алам. Журналда биш "ике"ле, алтау булһа, училищенән ҡыуалар. Бер көн аптырғас, училище директоры Ирмөхәмәт Мырҙағәле улы Һибәтуллинға киттем. "Уҡыуҙы ташлап ҡайтырға хәл иттем", тинем. "Сәбәбе ниҙә?" "Йәштәргә аҡса еткереп булмай, степендияны алдынғыларға ғына бирәләр". "Һуң, алдынғы бул!" "Башҡорт булып алдынғы булып булмай икән, шуны белдем әле..." "Буш хәбәр. Бер айға һинә күпме аҡса кәрәк!" "Әҙәмсә тукланыу өсөн 30 һум етә!" Директор кеҫәһенән теүәл мин һораған сығарып, өҫтәл ҡырына һалды ла былай тине: "Бына һин һораған аҡса! Ә училищенән ҡасырға хыялланма ла, журнал тулы насар билдә алһаң да мин һине уҡыуҙан ебәрмәйем, кеше фатирында көн итәһең шикелле, бөгөндән ятаҡтан урын табам!" Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Ирмөхәмәт Мырҙағәле улы Һибәтуллинға һаман да булһа рәхмәтлемен, йәнә йәннәттә булһын! Һунынан уҡыуым яйға һалынды, һалынып ҡына ҡалманы, ары гел "бишле" билдәләренә генә өлгәштем.

Армиянан һуң Калининград өлкәһендә сик буйы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иттем, санчастә эшләнем. Ябай курсанттар, офицерҙар мине "доктор" тип атап йөрөттө. Офицерҙарҙың ҡатындары, балалары ҡала поликлиникаһына түгел, мотлаҡ минә ҡабул итеүгә киләләр ине. Шул һалдат осорона бағышланған "Саҡыр мине зәңгәр киңлектәргә" тип аталған повесым да бар. Хәрби медицина академияһына йүнәлтергә булып киттеләр бер заман, яңғыҙ әсәйемде ҡалдырып, ҡайҙа ғына китеп олағайым инде, тормошҡа ашмаҫ хыял ине был. Ҡайттым. Ҡайтҡас, Ейәнсура район дауаханаһының "Тиҙ ярҙам" станцияһына эшкә төштөм, бер йыл тирәһе эшләнемме-юҡмы, районда сапҡынсы ебәрәп, тыуған ауылымда асылған табип амбулаторияһына етәксе итеп ҡайтарып алдылар.

Ситтән тороп Стәрлетамаҡ педагогия институтына уҡырға индем, уны уңышлы тамамланым, мәктәпкә, директорҙың уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары сифатында эш башланым, ойоштора алыу, халыҡ менән эшләй белеү һәләтемде иҫәпкә алып, ары ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе итеп һайлап ҡуйҙылар. Өйләнгәндән һуң районда йәшәп, эшләп алдыҡ, шунан Сибайға күсеп килдек. Күсеп килдек, тип әйтеүе генә анһат, йөк машинаһына булған әйберҙәрҙе тейәп, кабинаға ҡатынымды, ете йәшлек малайымды ултыртып, билдәһеҙлеккә китеп барабыҙ, морон төртөр ер ҙә, төбәп барыр эш тә юҡ. Ят ҡалала сит кеше итеп ҡабул иттеләр башта, ҡала зыялыларының ҡорона инеп китеү ҙә еңелдән булманы. Артыҡлап сурытмайым инде, улары айырым бер тарих. Сибайҙа "Ирәндек" лицейында уҡытып йөрөгәндә мине ҡайҙандыр табып алып, Рауил Бикбаев шылтыратты: "Касып-боҫһаң да эҙенә төштөм таҡ, иртәгә уҡ Сибай яҙыусылар ойошмаһына бараһың!" Унда ла ун йылға яҡын йөрөлдө.

Күп һөнәрҙәргә килгәндә, яҙыусы булараҡ, улар минең файҙаға ғына, күп күренештәрҙе "бармаҡтан һурып" ултырмайым, тормоштан алып, күргәнкисергәндәрҙе яҙам. Башҡортостандың халыҡ шағиры Тамара Ғәниева бер саҡ аптырап минә шундайыраҡ баһа ла биргәйне: "Ауыл тормошон, ҡатын-ҡыҙҙар психологияһын, медицина тармағын биш бармағыңдай беләһең бит һин!" Улайға уҡ китһә, ауыл халҡының еңел булмаған көнитмеше, шөғөлө, холоҡ-фиғеле, балалар психологияһы ла минә ят түгел...

**"Бәйләнештә" селтәрендәге сәхифәгеҙҙә донъя күргән "Хәтерҙәге хәтирәләр" циклы яҙмалары тормошоғоҙға байҡау яһаумы, әллә үткәндәрҙе йомғаҡлаумы?**

- Әйҙәгеҙ, ниндәйҙер сик ҡуйып, йомғаҡ яһарға ашыҡмайыҡ. Улайға уҡ китһә, һәр яҙыусы был донъяға тик бер әҫәр яҙыу өсөн генә килгән һымаҡ. Әгәр "Евгений Онегин", тиһәк, А.С. Пушкин, "Горе от ума", тиһәк, А. Грибоедов, "Тихий Дон", тиһәк, М. Шолохов, "Әймилә", тиһәк, Сыңғыҙ Айытматов, "Ырғыҙ", тиһәк, Һәҙиә Дәүләтшина, "Бөртөкләп йыйыла

***✓ Сибайҙа йәшәһәм дә, үҙемде башкөллө ауыл балаһы итеп тоям. Икенсе яҡтан, ни тиһәң дә "өф" итеп тормаһа ла, Өфө, Өфө инде, әҙәбиәттең ҡаҙаны шунда, шул ҡаҙанға яҡындар иң башта күҙгә эләгә, улар иғтибар үҙәгендә.***

алтын", тиһәк, Яңыбай Хамматов, "Бөйрәкәй", тиһәк, Таңсулпан Ғарипова күҙ алдына килеп баҫа. Ә минең күңелдә йөрөткән әҫәрем һаман да булһа яҙылмаған һымаҡ. Бәлки, яҙылмауы хәйерлерәктер ҙә, яҙылмаған әҫәр алда күренгән нурлы маяҡ менән бер бит ул, шуға ҡарай бараһың, шуға ҡарай ынтылаһың. Ә "Хәтерҙәге хәтирәләр"гә килгәндә Мөнир Ҡунафиндың әйткәне лә бар: "Хәтирәләрең"де киңәйтеп ебәрһәң уларҙың һәр береһенән ҙур әҫәр әүәләргә мөмкин!" Эйе, йәшермәйем, ҡыҫҡа кәлимәләрҙе мин дә күңелемдәге ижади орлоҡтар һымаҡ ҡабул итәм, ысынлап та, бер килеп тамыр ебәрһәләр, уларҙан яңы повестар, хикәйәләр тыуыуы бик тә ихтимал. Уймаҡ кәлимәләрҙең һәр береһендә әҫәрҙе әҫәр иткән фекер, идея ярылып ята.

**Һеҙҙең әҫәрҙәрҙәрегеҙҙең геройҙары башлыса ауыл кешеләре. Улар тормоштан алып яҙыламы, әллә башта тыуған персонаждармы?**

- Әйтеремде тағы ла ситләтеңкерәп башлайым әле. Бәлки, ҡуйҙы: "Тураһын әйтәм, шиғырҙар насар түгел, әммә урта ҡулдар, шаҡ ҡатырырлыҡтарын, тетрәндергәндәрен күрмәйем. Башҡорт әҙәбиәтенә лә килерһең, бәлки, әммә, шул урта тирәлә йөрөрһөң инде, үҙең дә йонсоп, башҡаларҙы ла йонсотоп. "Башҡортостан" гәзитендә яңыраҡ бер шәп новеллаң күҙгә эләкте. Әгәр яңылышмаһам, һин һәләтле яҙыусы шикелле. Хәҙер үк Аксаков урамында урынлашҡан "Ағиҙел" журналына бар, Рәшит Солтангәрәевты күр. Ул һине, моғайын да, үҙ кешеләй күреп ҡабул итер!" Барып күренеүем булды, Рәшит ағай һөрәнләп тә ебәрҙе: "Нишләп улайтып йөрөйһөң әле, миңә килмәй, аҙашып!" Бер нисә йылдан Рәшит ағайҙың булышлығы менән ҡаты тыш менән "Ғүмер бүләк итәм" тип аталған тәүге хикәйәләр йыйынтығым донъя күрҙе.

Шулай булһа ла, шағирлығымды ла бөтөнләй бөтөрөп ташламайыҡ әле, балалар өсөн "Мин - баһадир!" исемле шиғырҙар китабым нәшриәттә баҫылып сыҡты, балалар уны яратып ҡабул итте, һаман да булһа тәҙрә, бөтәһе лә тап килеп тора бит!" Минең "Эт күҙендәге ҡояш" тип аталған повесым бар. Унда, йәнәһе лә, мин, яңылышлыҡ арҡаһында Йылайыр төрмәһенә, әлеге камераға барып юлығам... Ҡайһы саҡ фантазия ысынбарлыҡҡа тап килеп тә ҡуя, тик шул ысын күңелдән фәстереүгә, хатта өҫтәп әйтер инем, керһеҙ, хәйләһеҙ алдашыуға уҡыусы мөкиббән китеп ышанырға тейеш. Әҫәр уҡыусыны ышандырғанда ғына әҫәр ул!

**Баш ҡаланан ситтә ятып ижад итеүҙең ыңғай һәм кире яҡтары нисек? Улар бармы?**

- Әгәр һин ижад кешеһе икәнһең, ҡайҙа ла ижад итергә мөмкин. Әммә, һаман да булһа бер яңылыш тенденция йәшәп килә: баш ҡалала йәшәгәндәр генә шағир, йәки яҙыусы! Йәшермәйем, ауыл тупрағында йәшәп ижад иткәндәр миңә ҡайһылыр кимәлдә яҡыныраҡтар ҙа әле. Айырып әйткәндә, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Мәрйәм Бураҡаева, Зөлфирә Ҡаҙаҡбаевалар... Ҡайһы саҡ уйлап та ҡуям, таш ҡала стенаһынан, шаулы ҡала мөхитенән ижад һығып алып тыным Вәсилә Фәйзулла ҡыҙы, Хәйҙәр эшләп ултыра, тип, ҡунаҡҡа саҡырылыуҙан баш тарта. Иртә таң менән ижад итеү ғәҙәтем бар. Рәхәт, бер кем дә ҡамасауламай, бар донъя йоҡлай...

**Хәйҙәр Ниғәмәт улы, һеҙ хәҙер башҡорт әҙәбиәте аҡһаҡалдары ҡорона инер йәштәһегеҙ, башҡорт әҙәбиәтенең хәлен нисек баһалайһығыҙ?**

- Бынан бик күп йылдар элек бер аҡыл эйәһе былай тип һандыраған имеш: "Заманалар ныҡ боларып китте, былай барыш менән барһа, тағы ла 10-15 йылдан дәүләтте тоторлоҡ аҡыллы кешеләр ҙә ҡалмаясаҡ!" Хәҙер килеп яңы быуатта йәшәйбеҙ, шөкөр, һин дә мин йәшәйбеҙ, аҡыллы кешеләр ҙә кәмемәгән беҙҙең арала. Һис бер кемгә ярамһаҡланмай, бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенә ыңғай баһа бирер инем. Республикабыҙ Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров һәр саҡ ижад кешеләренә яҡын, уларҙың эшен күрә, күтәрмәләргә, ярҙам итергә әҙер. Республикала йыл һайын үткәрелә килгән "Китап" байрамын ғына

# ЯҘЫУСЫҺЫ.

## Өфөлә булһа ла...

күптәргә әҙәбиәткә нисегерәк килеп инеүем ҡыҙығыраҡтыр. 80-се йылдарҙа шиғырҙар яҙыуға хиресләнеп киттем. Уларҙы район гәзитенә ебәрә торам, тегендәгеләр шунда уҡ тотҡарлыҡһыҙ баҫып та сығара. Билдәле журналист Әмир Моратовтың, яҙыусы Мөслим Әбсәләмовтың, шағирә Фәүзиә Юлдашбаеваның иғтибарына юлыҡтым. Аралашып йәшәй башланыҡ. Әмир ағай шиғырҙарымды килеп тороп маҡтай, һинең йәшеңдә беҙ былай уҡ шәп яҙмай инек, тип, шыттырып та ебәрә, ә мин шул ҡапаҡлауҙы ысынға алып, танау сөйөп йөрөгән булам. Район гәзите янында ай һайын сыға килгән "Шишмәләр" әҙәби битен ойоштороп ебәрҙек. Тыуған көнөмә район редакцияһы "Башкирия" тип аталған көс тә етмәҫ ауыр яҙыу машинкаһы бүләк итте. Шөкөр, район редакцияһы бәҙрәф ҡағыҙына оҡшаш һары ҡағыҙҙы тартыныуһыҙ бирә ине, ә бына "копировальная бумага"-ны еткереп булмай. Бер битте ауырлыҡ менән баҫып, уҡып ҡараһаң, унда хата киткән була, ҡабаттан ултыраһың. Шулай итеп, Шәйехзада Бабичтың яҙмышына арналған "Яра" поэмаһын баҫыу өсөн генә лә, шаштырып әйтмәйем, арба самаһы ҡағыҙ киткәндер.

Бер көн, баҫылып сыҡҡан шиғырҙарымды бер урынға туплап, Өфөгә юлландым, маҡсатым - өфөләрҙе шаҡ ҡатырыу. "Йәшлек" гәзитенә барып инһәм, унда Хәсән ағай Назар ултыра. Шиғырҙарҙы тегенең алдына алып барып һалдым. Ағайым оҙаҡ ҡына уҡып ултырҙы яҙмаларымды, шунан әйтә сәхнәнән һөйләп йөрөйҙәр. Ә айырып әйткәндә, яҙыусымын, шағир йәнле, шағир рухлы яҙыусымын. Проза ла һәр ваҡыт лирика ише балҡып, үҙенә уҡыусыны йәлеп итергә бурыслы.

Элек әҙәбиәттә "ауыл прозаһы" тип аталған бер йүнәлеш була торғайны. Шул йүнәлештең ике генә вәкилен атап үтәм: Валентин Распутин, Василий Шукшин. Улар баш-аяҡтары менән ауыл балалары, улар менән бер рәткә баҫырға ҡыймаһам да мин дә төпкөлдөң төпкөлөндә тыуғанмын. Ауыл тормошон яҙыуы миңә шул тиклем дә еңел, еңел генә түгел, ошо хаҡта ижад итеүем - күңел байрамым, йән тантанам. Ҡалала тыуып, ауыл хаҡында яҙып булмай, Әхмәр Үтәбай әйтмешләй: "Ҡалаларҙың ҡылыҡтары сәйер..."

Тик бер кешенән образ тыуҙырыуы мөмкин булмаған эш, яҙғанда берәүҙең яҙмышын алам, икенсенең төҫ-башын, өсөнсөнөң кейгән кейемен, дүртенсенең телен... Шул саҡта ғына тулы ҡанлы ышандырырлыҡ образ килеп тыуа. Ҡайһы саҡ әйткәндәре лә бар: "Мине яҙғанһың да баһа!". Бер саҡ автовокзалда торғанда, бер ҡойто ғына кейенгән әҙәм килеп ҡосаҡлап алып былай тине: "Һине бер эре кешегә иҫәпләп йөрөһәм, һин беҙҙең брат та баһа!". "Яңылыштығыҙ саҡ ҡына, мин нишләп һеҙҙең брат булайым тағы?". "Һуң, булмай ни, Йылайыр төрмәһендә ултырғанһың да баһа, ултырып ҡына ҡалмағанһың, мин ултырған камераға бикләгәндәр һине: ҡаҡ һике, һике аҫтындағы ҡылысһыҙ биҙрә, ау япҡан рәшәткәле була микән? Ерҙең йылыһын тойоу өсөн ергә ныҡлы баҫып торорға ла кәрәк бит әле. Бына мин Сибайҙа йәшәһәм дә, үҙемде башкөллө ауыл балаһы итеп тоям, ауылдарға, ауыл халҡына, уларҙың көнитмешенә яҡыныраҡмын ни тиһәң дә. Икенсе яҡтан, ни тиһәң дә "өф" итеп тормаһа ла, Өфө, Өфө инде, әҙәбиәттең ҡаҙаны шунда, шул ҡаҙанға яҡындар иң башта күҙгә эләгә, улар иғтибар үҙәгендә. Көнләшеүҙән түгел, нисек бар, шулай әйтәм.

**Максим Горький ҙа, беҙҙең Рәшит Солтангәрәев тә журналистика менән яҙыусылыҡ бер-береһенә ҡамасау, гәзиттә оҙаҡ эшләргә ярамай, тигән. Һеҙ инде 15 йыл "Атайсал"гәзитен етәкләйһегеҙ...**

- Был тәңгәлдә бөйөк әҙиптәр менән килешмәйем: түш кеҫәмдә ике - яҙыусылыҡ һәм журналистика ҡәләмдәре, ҡайһыныһы әлеге мәлдә мөһимерәк, шуға тотонам. Ижад һәр ваҡыт минең менән, атлап китеп барғанда, әңгәмәләшеп ултырғанда, хатта бәхәсләшкәндә лә. Бер көн "Хөкөм" повесын башымда яҙып, ашыҡмай ғына эштән ҡайтып киләм. Ҡаршыма атаҡлы бейеүсе, халыҡ артисы осраны ла, бейеү хәрәкәттәре яһап, минең тирәлә өйрөлә башланы, баҡтиһәң, унын филармонияға репетицияға китеп барыуы икән... Ни тиһәң дә, ижад кешеләрен аҙаҡҡаса аңлау, уларҙың шауҡымлы ҡылыҡ-фиғелдәренә тейешле баһа биреү мөмкин түгел. Мостай Кәримдең шаяртып әйткәне лә бар бит әле: "Аҡылға бер төрлөләрҙең, исмаһам, билеттары бар, ә беҙҙеке - юҡ!".

Мин ял көндәре ижад итәм. Әгәр эш өҫтәлендәмен икән, ҡаалып ҡарайыҡ, иҫ китмәле яҡшы, яҡшы ғына түгел, юғары аҡыл менән атҡарылған эш бит был! Тимәк, республика Башлығы китаплы булырға, китапҡа әйләнеп ҡайтырға саҡыра. Шунан, бөгөнгө көндә, Яҙыусылар союзының йортонда ремонт эштәре барҙы, уны тантаналы асыу шул "Китап" байрамында үткәреләсәк. Яҙыусыларҙы йортло итеү, уларҙың аллеяһын булдырыу, минең генә түгел, барлыҡ ҡәләмдәштәремдә ҡәнәғәтләнеү тойғоһо уята. Ошондай юғары иғтибар барҙа ижад итмәү үҙе үк гонаһ.

Шулай ҙа Яҙыусылар союзының составындағы күп кенә әҙиптәрҙең түш кеҫәләрендә танытма йөрөтөп тә ижад итмәүҙәре, ижад итмәһәләр ҙә шаулы ижад кисәләрен үткәреүҙәре кәйефте ҡыра. Яҙыусылар союзын үҫтерергә, нығытырға кәрәк, әммә, 60-70-се йылдарҙағы һымаҡ, әҙәбиәткә эркелеп килеүселәр күренмәй әлегә. Яҙылған әҫәрҙәрҙең дә кимәле ныҡ төштө, шул иҫәптән бөгөнгө уҡыусының да ҡабул итеү ыҙмаһы түбән. Яҙыусылар ифрат күбәйҙе, һәм шул уҡ ваҡытта тетрәнеп уҡырлыҡ, теленә ләззәтләнерлек яҙмалар юҡ. Замана шауҡымылыр, интернет ҡазаһылыр был, тип ҡуяһың, ҡайһы саҡ. Был да бер килеп үтер әле, тип өмөтләнергә ҡала, ә эшләнгән ыңғай эштәрҙе ҡабаттан иҫкә төшөргәндә киләсәккә ышаныс менән ҡарарға мөмкин. Таланттар аҙым һайын осрап тормай бит, улар һирәк тыуа, шул үтә һирәк тыуғандарҙы күреп алырға, күтәрмәләргә һәм яҡларға кәрәк.

**Яҙыусылыҡтың тотҡаһы ҡатын-ҡыҙҙар түгелме бөгөн? Яҙыусылар союзына ҡабул ителгән йәштәрҙең 90 проценты гүзәл заттарҙың булыуы уйландырмаймы? Егеттәребеҙ ҡайҙа ул?**

- Әҙәбиәттә генә түгел, тормошта ла ҡатын-ҡыҙҙар бөгөн алғы планда. Мәктәптәргә йыш саҡыралар. Шунда иғтибар иткәнем бар: класта лидер - ҡыҙ кеше, осрашыуҙар мәлендә лә малайҙар мөйөшкә ҡыҫырыҡланған. Ни хәл итәһең, мәктәптәрҙә ир-ат юҡ кимәлендә. Бәләкәй малайҙарҙы балалар баҡсаһында, башланғыс класта, урта һәм өлкән звенола фәҡәт ҡатын-ҡыҙ тәрбиәләй. Һәм бына һөҙөмтә! Ир ҡулы, ир аҡылы кәрәк бөгөн! Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы Байғусҡаров республика кимәлендә "Атайҙар ҡоро" ойошторол, бик тә урынлы, кәрәкле, мөһим эш эшләй, сөнки донъя күсәре - ир-ат, ә ҡатын-ҡыҙ донъяны йәмләүсе, ашты бәрәкәтле һәм тәмле итеүсе, йортто йылытыусы зат. Киләсәктә лә шулай булып ҡалһын ине. Әҙәбиәткә килгәндә, тотош донъя йөгөн тартып та ижад менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарайым да һоҡланам. Ә ижад менән шөғөлләнеүсе ир-ат ҡайҙа, тиһегеҙме? Бар улар ҙа, һис шикһеҙ, бар, уларҙы күреп, ижадҡа йәлеп итергә генә кәрәк. Ә Союзға ҡабул итеүгә килгәндә, уларҙы бер юлы тиҫтәләп, ҙур төркөм менән ҡабул итергә кәрәкмәйҙер, минеңсә. Союзға 90 процент ҡабул иткәнбеҙ икән, шуларҙың шунса саҡлыһы ижад итһен ине, шул саҡта ниндәйҙер һөҙөмтә лә буласаҡ.

**Яҙыусының өҫтәлендә бөгөн ниндәй әҫәр тыуа?**

- Алдан ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта, тиҙәрме әле? Яҙылған, яҙылып эшкәртелеп ятҡан әҫәрҙәрем бар, ваҡыты еткәс, улар уҡыусыға барып етер, әйҙә, шулай булырына ышанайыҡ һәм өмөт итәйек. Юбилейымды эш өҫтәле артында ҡаршылайым, шаулап-гөрләргә артыҡлап теләк тә юҡ һымаҡ. Ижад кисәһендә түргә ултырып, үҙемде маҡтатыуҙан, ҙурлатыуҙан шәберәк тә, һәләтлерәк тә булып китмәйем дә баһа. Шул, Хоҙай Тәғәлә биргән һәләтем сиктәрендә киләсәктә лә ижад итермен, мине ҡабул иткән, яратҡан уҡыусыларымды ҡыуандырырмын. Юбилейға килгәндә, республика баҫмаларында өс-дүрт повесым, тиҫтәгә яҡын хикәйәләрем баҫыуға планлаштырылған, ошо ижади отчет менән дә үтә ҡәнәғәтмен.

Әҙәби багажыма килгәндә, нәшриәттә 12 китабым баҫылып сыҡты, 40-лап повесть, 400-гә яҡын хикәйәләр авторымын, әммә эш һанда түгел, сифатталыр, шуға уларҙың һәр береһенә күңел йылымды һалырға тырышам. Форсаттан файҙаланып, тағы ла шуны өҫтәмәксемен: халыҡ гәзите иҫәпләнгән "Киске Өфө"нө алдырыусыларға сәләмәтлек, эштәрендә уңыштар, ғаилә бәхете, донъяларының бөтөн, теүәл булыуын теләйем, иң мөһиме, боларған донъялар тынысланһын, ситтә йөрөгән ир-егеттәребеҙ йорттарына әйләнеп ҡайтһындар, шул саҡта барыһы ла һәйбәт булыр!

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ ***Беҙҙең ғәзиз еребеҙҙә мин бығаса белмәгән, ишетмәгән замок... Ниндәй серҙәр һаҡлай ул? Ниңә уның тураһында бер ерҙә лә яҙылғаны ла, һөйләнгәне лә юҡ?***



*Ҡайҙа һеҙ,*
*ҡайҙа һеҙ,*
*һай, башҡорт егеттәре?*
*Ҡайҙа һеҙ,*
*ҡайҙа һеҙ,*
*Уралым бөркөттәре?*

Тәүәккәлләнем. Ваҡыт өйөрмәһе мине үҙе менән өйрөлтөп алып китте. Ваҡыт упҡыны мине үҙ эсенә йотто...

Өйөрмә шып туҡтаны. Сәйер тынлыҡҡа күҙемде асам... Ысын замок күрермен, тигән уй башыма инеп тә сыҡҡаны юҡ ине. Хыял тормошҡа ашты, тиер инем, был турала хыялланғаным да булманы. Бына ул замок! Һүрәттәрҙә, бигерәк тә тарих китабында, киноларҙа күргән замоктар һымаҡ уҡ. Һәм мин күҙ алдына килтергәнгә ҡарағанда күпкә мөһәбәт тә, ҡурҡыныс та. Бейек ҡаяла урынлашҡан замокка ҡарап тора биргәс, теҙ быуындарым ҡалтырап китте. Аҫта упҡын. Мин баҫҡан ер менән ҡаяны ел-ямғырҙан ҡарайып бөткән баҫма тоташтыра. Уның аша үткәс тә ҡалайтып ҡурҡмайынса өҫкә менмәк кәрәк? Ғөмүмән, ниңә унда менергә әле?..

Беҙҙең ғәзиз еребеҙҙә мин бығаса белмәгән, ишетмәгән замок... Ниндәй серҙәр һаҡлай ул? Ниңә уның тураһында бер ерҙә лә яҙылғаны ла, һөйләнгәне лә юҡ? Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй, тигәндәй, йөрәкте ҡурҡыу солғаһа ла, аяҡтарым таш баҫҡыстар буйлап һаман өҫкә үрләне.

- Рәхим ит, йәш егет, башҡорт ҡәлғәһенә!

Көтөлмәгән был тауышҡа һиҫкәндем. Башымды юғары күтәрәм. Ҡаршымда сәсе тигеҙ итеп ҡырҡылған, күлдәге өҫтөнән еңһеҙ елән һымаҡ нәмә ҡаплаған ҡырҡ йәштәрҙәге ирегет баҫып тора.

- Был... был замок... ғәфү итегеҙ, һеҙ бында йәшәйһегеҙме? - тим мин тамағыма тығылған төйөрҙө саҡ йотоп.

- Дуҫҡайым, башҡортом! - тине ҡаршы алыусы, баяғылай асыҡ йылмайҙы. - Ҡәлғәбеҙгә шикләнмәй үт! Һорауҙарыңа, теләһәң, мин юлда яуап бирермен, һин юлаусы - беҙҙең ҡәҙерле ҡунаҡ. Был күптән килгән башҡорт йолаһы!

Тамам яҡынлашҡас, мин уны тағы ла ентекләберәк күҙҙән үткәрәм. Матур, дөрөҫ йөҙ һыҙаттары, бигерәк тә ҙур, муйылдай ҡара күҙҙәре уның шәфҡәтле кеше булыуы тураһында асыҡ һөйләй ине. Шулай уҡ ҡара һаҡалы ла йөҙөнә әйтеп бөтөргөһөҙ күркәмлек өҫтәй.

- Һинең исемең Ҡараһаҡал бит? - тип һорайым унан. Бының шулай икәненә тамсы ла шигем юҡ.

Ул ынйылай тештәрен күрһәтеп йылмая.

- Әйҙә, һинеңсә булһын, ҡунаҡ! Рәхим ит!

Мин был һүҙҙәрҙең ысын йөрәктән әйтелгәненә ышанам. Өндәшмәй генә уның артынан эйәрәм. Ҡан-ҡәрҙәшемдең сәйер кейеме лә, замок та хәҙер ғәжәпләндермәй һымаҡ.

- Был ҡәлғә йөҙҙәрсә йылдар элек һалынған, ышанаһыңмы шуға һин, юҡмы? Әйтерһең, ата-бабаларыбыҙ уны мәңгелеккә төҙөгән. Тағы ла оҙаҡ хеҙмәт итер әле ул бәрәкәтле ерҙең бәрәкәтле халҡына.

Уның тауышы көсәйә һәм, таштарға шаңҡып, ҡабат-ҡабат яңғырап ишетелә.

Ҡаршы алыусым миңә сыра яндырып тоторға ҡуша. Үҙе өҙөлгән һүҙен дауам итә.

- Ошо ҡәлғәне төҙөр өсөн нисә мең кеше башын һалған. Тарих быны беҙгә еткергән...

Оло таш стеналар араһында беҙ үтә лә бәләкәй күренәбеҙ. Мине тағы ла ҡурҡыу солғап ала. Ниңә барам әле? Бынан сығыу юлын табырмынмы? Беҙ белмәгән ниндәй замок һуң ул әле? Ниңә был әҙәм ғүмерҙә лә күрмәгән мине, танышын тапҡандай, ҡыуана-ҡыуана үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра? Ниңә минең кем икәнемде лә һорашмай? Мине ниндәй уйҙар борсоғанын аңлағандай, юлдашым һүҙен дауам итә.

- Был оҙон, бормалы калидурҙар буйлап миңә көнөнә тиҫтәләрсә тапҡыр үтергә тура килә.




Минең хәҙер төп һөнәрем ҡаршылау һәм оҙатыу... - Һуңғы һүҙҙәрҙе әйткәндә уның тауышы ҡалтырап ҡуя. Сәбәбен мин белмәйем, һорашырға ла ҡыймайым. - Был калидурҙар буйлап күҙҙе йомоп үтһәм дә бер яңылыш аҙым яһамайым. Өйрәнгәнмен инде. Ә һин сыраңды юғарыраҡ тот, һөрлөгә күрмә.,.

Бормалы-бормалы оҙон юл. Таҡ-тоҡ, таҡ-тоҡ... Мин йәнә һағаям. "Ҡайҙа эйәрен китеп барам? Унда нимә көтә мине? Бындай замокта башҡорттар йәшәүе мөмкин түгел!"

- Ҡараһаҡал! Кем һеҙ, ҡайҙан һеҙ? Беҙ һинең менән ниндәй телдә һөйләшәбеҙ?..

- Һинең һәм минең телдә - туған телебеҙҙә, - тип яуаплай ул. - Йөрәгеңдә ҡурҡыу |ялмаһа, беҙ ошонда туҡталабыҙ. Ары бер аҙым да яһамаясаҡбыҙ, һин ирекле, туғаным.

Тыныс, бәрхәт тауышты ишеткәс, миңә йәнә хәл инә.

- Кисер мине, Ҡараһаҡал. Мин бары тик ҡайһы дәүергә килгәнемде белергә теләйем. Бик белергә теләйем.

- Дәүер... дәүер!.. - ти Ҡараһаҡал. "Дәүер, дәүер..." тип яңғырай тауыш.

- Һеҙ нишләп был замокта? Нишләп һеҙҙең турала берәү ҙә белмәй? Киләсәкме әллә һеҙ?.. Был замок кемдеке?

- Беҙҙеке. Мәңгелек ҡәлғәне ата-бабаларыбыҙ төҙөгән, - тип ҡабатлай ул баяғы һүҙҙәрен. - Был ҡәлғәгә килгән һәр халыҡ уны үҙенеке тип ҡабул итер. Ҡәлғә яҙмышы уны төҙөгән халҡына ҡарағанда бәхетлерәк булыр.

- Ләкин минең бер ерҙә лә, бер халыҡ тарихында ла был ҡәлғә тураһында ишеткәнем юҡ!

Ҡараһаҡал башын түбән эйгән килеш оҙаҡ һүҙһеҙ баҫып тора. Бына ул башын ҡалҡыта. Ҙур моңһоу күҙҙәре ҡайҙалыр алыҫҡа төбәлә.

- Дуҫым, ер йөҙөндә бик күп донъялар булып киткәне һәм буласағы һиңә мәғлүмдер...

Сыра үҙенән-үҙе ҡулымдан төшөп китте.

- Бер цивилизация тураһындағы мәғлүмәт икенсеһенә килеп тә етмәй. Бәлки, был кәрәк тә түгелдер. Сөнки һәр цивилизацияла тормош өр-яңынан башлана... Һин беҙҙе эҙләмә... Ә хәҙер - күтәр сыраңды.

Мин ҡысҡырып ебәргәнемде үҙем дә һиҙмәй ҡалдым.

- Мин һиңә ышанмайым, Ҡараһаҡал!

- Һәр халыҡ, дөйөм кешелек, айырым кеше кеүек үк, бала, йәшлек һәм ҡартлыҡ осорон кисерә, ләкин йәшәү өҙлөкһөҙ дауам итә. Һин быға ла ышанмайһыңмы?

- Һәр цивилизация һайын башҡорттоң яңынан тыуыуы мөмкин түгел!

- Һәр халыҡ үҙ тәҡдиренә яҙылғанын күреп бөткәс кенә юғала ер йөҙөнән, һин бер нәмәне хәтереңдә тот - рух үлемһеҙ. Рух йәшәгәндә халыҡты һис ҡасан да юҡҡа сығарып булмай. Юҡ ундай көс! Бер цивилизацияла беҙ күп һанлы булып йәшәйбеҙ икән, икенсеһендә - аҙ һанлы. Был да тарихи шарттарға бәйләнгән.

- Һеҙ беҙҙән бер нәмәгеҙ менән дә айырылмайһығыҙ!

- Айырылмайбыҙ? Бармы һеҙҙә бындай ҡәлғә?

- Юҡ, - мин башымды ҡалҡытып, тирә-йүнде байҡайым. - Мөһәбәт! Юҡ беҙҙеке.

- Булмаһын да!

Мин Ҡараһаҡал тауышында ярһыу тоям, тик ни өсөн икәнен аңламайым. Аңламағас, бәхәсләшмәйем.

Тора-бара тирә-йүн яҡтыра башланы. Ҡулымдағы сыра үҙенән-үҙе һүнде. Беҙ ниндәйҙер майҙанға килеп сыҡҡайныҡ. Мин ҙур ҡыҙыҡһыныу менән бындағы ҡоролмаларға ҡарайым. Халҡым өсөн үтә ят стиль! Осло ҡыйыҡтар, тар оҙон тәҙрәләр, ниндәйҙер киң тимер ишектәр. Архитектурала ла халыҡтың фекерләү, йәшәү үҙенсәлеге, донъяға ҡарашы, фәлсәфәһе сағыла бит. Ниңә әле мин ошоларҙы инҡар итеп, Ҡараһаҡалға оҡшашлығыбыҙҙы иҫбат итергә тырыштым, һис бер дәлилһеҙ!

Аҡ плащҡа уранған Ҡараһаҡал аяҡтарын айырып кирелеп баҫты. Был ҡиәфәте уның баһадир, көслө кеше икәнлеген апасыҡ һөйләй ине. Ә ул "мин ҡунаҡтарҙы ҡаршы алып, оҙатыусы ғына" тигән булды...

- Дуҫым, беҙ маҡсатыбыҙға, һин барып етергә тейешле урынға яҡынлашабыҙ. Мин һине ил яҙмышын хәл итеүселәр янына - Оло йортҡа алып инәсәкмен. Үтенесем шул: ғәжәпләнеүеңде белдермә, һинән бары тик йылмайыу, баш ҡағыу ғына талап ителә, сөнки унда иң ҡыҙған мәл...

"Иң ҡыҙған мәлдең" мәғәнәһен һорарға итәм, тик өлгөрмәйем.

- Һин ундағылар өсөн - ҡунаҡ, ә ҡунаҡҡа мөнәсәбәтте үҙең беләһең...

Беләм, әлбиттә. Беҙ ҙә ҡунаҡ яратабыҙ. Ата-бабанан килгән ҡәҙер-хөрмәт итеүҙе яҡшы беләбеҙ. Туҡта! Әллә мин бында ҡәҙер-хөрмәт күрер өсөн килдемме? Ниңә ҡыуанам? Маҡсатым бит...

Ябыҡ оло ишек артынан ишетелгән тауыштарға һиҫкәндем. Ҡараһаҡалдың күҙ ҡарашынан мин ул әйткән ергә килеп еткәнебеҙҙе төшөнәм.

Башта мин бындағы кешеләрҙең ни менән мәшғүл икәнен аңлай алмай торам. Шау-шыу, ҡулдар, баштар... Һәр төрлө ашһыу еҫе. Бәй, был бит мәжлес! Иң ҡыҙған мәле! Оҙон-оҙон өҫтәлдәр артындағы һанһыҙ әҙәмдәр. Кемдер көлә, кемдер өҫтәлгә башын һалып әүен баҙарына киткән...

- Ҡараһаҡал! Түргә уҙ!

Ләкин Ҡараһаҡал урынынан ҡуҙғалмай. Ауыҙ асып сәләмләргә лә өлгөрмәнем, бер кеше сайҡала-сайҡала яныма килеп баҫты. Ҡулында - әҙәм көсө еткеһеҙ оло мөгөҙ.

- Тот! Эсеп бөт!

Мин артҡараҡ тайпылам. Ҡарашым менән Ҡараһаҡалды эҙләйем. Ҡараһаҡал эйәге менән ымлауы була, теге эргәмдән китеп, мөгөҙҙө үҙ ауыҙына йүнәлтә. Мин шытырлатып күҙҙе йомам: хәҙер шартлай инде! Юҡ, һис ни булманы. Бер нисә минуттан был әҙәм буш мөгөҙҙө юғары күтәрә:

- Ха-ха-ха!.. Йәшәһен Зевыс һәм суска башы!

Мине оло һауытты бушата алыуы түгел, ә ул ҡысҡырған ят һүҙ аптыраштa ҡалдыра. "Алла", тип бышылдай Ҡараһаҡал. Ә-ә-ә, Зевс! Былар бит ул һүҙҙе бөтөнләй үҙ теле законына яраҡлаштырғандар, баҫымды һуңғы ижекҡә төшөрәләр: Зевыс. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе үҙ тел закондарына буйһондора алғас, телдәре беҙҙекенә ҡарағанда ла көслөрәк булып сыға түгелме? Тик ни өсөн Зевс? Оло өйҙө күмәк тауыш гөрһөлдәтә:

- Йәшәһен Зевыс!.. Йәшәһен!..

Өҫтәлдең төпкө яғында ултырған икәү иғтибарымды йәлеп итә. Баһадир кәүҙәлеһе аҫҡа ҡараған килеш баш ҡаға-ҡаға йәнәшәһендәге йоҡа кәүҙәле, ерән сәсле берәүҙең хәбәрен тыңлай.

- Башлығыбыҙ - Алып батыр, ә эргәһендә - уң ҡулы. Бында пәйҙә булғанына, башҡортҡа әйләнгәненә күп түгел, шулай ҙа тиҙ генә ышаныс яуларға өлгөрҙө, - тип һөйләй Ҡараһаҡал. - Исеме Килмешәк ине. Хәҙер Кико булып китте.

"Сәйер исем..."

- Башлығыбыҙға был яңылыҡ оҡшаһа, исем алмаштырыуҙар башланасаҡ.

Йылғыр әҙәм Кико! Башлыҡтың эргәһендә орсоҡ кеүек өйөрөлә. Ҡулынан килһә, хатта ауыҙына инеп китер ине!

Шул саҡ мин ике пар күҙҙең дә үҙемә төбәлгәнен тоям. Ҡараштарынан тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китә.

- Һин кем булаһың әле? - тип һорай Алып батыр аҫтан һөҙөп ҡараған килеш.

- Ҡунаҡ, ҡунаҡ!.. - тип күмәкләп яуап ҡайтарҙылар уға табындағылар.

- Ҡуна-а-аҡ? - Шаҡтай ҡыҙмаса булған Алып батыр күҙҙәрен йомған килеш йылмайҙы. - Беҙ ҡунаҡтарҙы яратабыҙ. Беҙ уларҙы ихтирам итәбеҙ. Иң бай һый-хөрмәт - уға. Ата-бабаларыбыҙ шулай иткән... Тфү, Зевыс ҡушҡан! О, Зевыс!..

- О, Зевыс! - тип күнегелгән ғәҙәт буйынса ҡабатланы халыҡ.

- Килтерегеҙ ат ҡунаҡҡа! - тип өҫтәлгә һуҡты Алып батыр. - Ер бирегеҙ!

Халыҡ шымып ҡалды. Күптәр башын эйҙе. Алып батыр эштең нимәлә икәнен үҙе лә төшөнгәйне.

- Ах, ер... Эйе... - тине ул бошонҡо ғына, шунан ялп итеп башын ҡалҡытты. - Ҡәлғәнең бер өлөшө буш, бирегеҙ шуны! Уға ла, батшаға ла, сит-яттарға ла!

- Батшаға ла, башҡаларға ла, - тип төҙәтте уны Кико.

- Ҡунаҡ, ал ҡәлғәнән урын! Йәшә һәм үрсе! - тип тантаналы тамамланы һүҙен Алып батыр.

- Йәшә, үрсе! - тип ҡабатланы бүтәндәр.

Шул саҡ бәлйерәп бөткән бер ҡарттың эргәһендә ултырған йәш егет, ҡаршы әйтергә типмелер, һикереп торҙо.

- Ултыр урыныңа, йәш-елкенсәй! - тип екерҙе уға Кико. - Ололар һөйләшкәндә ҡыҫылма! Ҡаршылашһаң, кәңәштәр берлегенә бүтәнсә аяғыңды ла баҫмаясаҡһың!

Шулай итеп, мин был табындың кәңәштәр берлеге икәнен аңланым.

**(Дауамы бар).**

✓ *Бөгөн дә башҡорт сәсәндәренең мираҫын туплау менән шөғөлләнәм. Ҡатын-ҡыҙ сәсәндәр - Гөлнур Мәмлиева, Әсмә Усманова, Мәмдүҙә Бузыкаевалар хаҡында мәҡәләләр яҙҙым.*



ЮБИЛЯРҒА ӨС ҺОРАУ

# ТАЛАНТЫН САРЫФ ИТМӘГӘНДӘР...

## моралына өлгәшә лә инде

**Республика Халыҡ ижады үҙәге директоры урынбаҫары, Рәсәй фольклорсылар, РФ һәм БР журналистар союзы ағзаһы, БР Матди булмаған этно-мәҙәни ҡаҙаныштарҙы билдәләү буйынса эксперттар советының яуаплы сәркәтибе, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Нәфисә Булат ҡыҙы ТУЛЫБАЕВА ошо көндәрҙә үҙенең матур юбилейын билдәләй. Ошо уңайҙан уға өс һорау бирҙек.**



**➔ Һеҙ, хеҙмәт юлын фән өлкәһендә башлап, артабан журналистикала көс һынап ҡаранығыҙ, Сибайҙағы "Атайсал" ҡала гәзитенең баш мөхәррире булдығыҙ. Күп йылдар инде Республика Халыҡ ижады үҙәге директоры урынбаҫары вазифаһын атҡараһығыҙ. Күркәм юбилейығыҙҙы ҡаршылағанда ғүмерегеҙҙең ҡайһы осоро күңелегеҙгә бигерәк тә яҡын һымаҡ тойола?**

- Һорау, асылда, минең тормошҡа ҡағылған, яуапты ошолайыраҡ башлайым, тием. Мин - Ейәнсура районында тыуып үҫкән кеше бит, шуға баҫалҡы түгелмен. Аңлатам. Элегерәк сауҙа, мәҙәни-мәғрифәти бәйләнештәр Ырымбур ҡалаһы аша барған. Карауандар менән тауар ғына түгел, белемле кешеләр, донъя яңылыҡтары, һөнәрҙәр ҙә йөрөгән, беҙгә килгән. Ата-бабаларымдың тыуған ере Башҡортостан менән Ырымбур өлкәһе араһына сик ҡуйыу кәртә була алмаған. Беҙҙең яҡ халҡын һәр заманда ла йүнселлек, белемгә ынтылыш, алдынғы ҡараш ҡыҙыҡтырған. Шәжәрәмдә Башҡортостан Хөкүмәтен ойоштоуҙа ҡатнашҡан кешеләр, ил һаҡлаусы яугирҙар, хәрби табиптар, дин әһелдәре, уҡытыусылар, ауыл хужалығы эшселәре бар. Шуға һөнәрҙәрем күп. Ауыл кешеһе башҡарған эштәрҙе һыпырып эшләй алам (шәл бәйләү, утын әҙерләү, мал ҡарау, кәртә-ҡура һылау), уларға өйрәнеп үҫтек. Саф башҡорт мәктәбендә уҡыһаҡ та, русса аралашыу бик енел биреләе. Әлеге лә баяғы Ҡыуандыҡҡа баҙарға йөрөү, аралашыу яҙам итте. Артабан һөнәр һайлау, кем булырға тигән икеләнеүҙәр һәм мин бөтөнләй уйламаған юлдан киттем. Хәйер, беҙҙең заман йәштәрен ғаиләлә гәзит-журналдар, хатта сәйәси баҫмалар тәрбиәләне бит. Әҙме-күпме әҙерлек булғандыр, дөрөҫөн әйткәндә, бер эштән дә ҡурҡытмай торған быуын инек беҙ.

Журналистиканың "ж" хәрефен дә белмәгән саҡта иншалар яҙырға, китап уҡырға яратҡан кешеләр менән аралашҡанмын икән. Юнай ауылында водитель булып эшләгән ағай, мәҫәлән, шиғыр уҡырға ярата ине. Әҡиәттәр сығарып һөйләү, көләмәс, лаҡапсылар оҙһы ине беҙҙең ауыл. Шунда беҙҙең дә, әсәйем әйтмешләй, "тел шымарҙы", яйлап ҡәләм дә осланғандыр. "Октябрь байрағы" район гәзитенә ауыл кешеләре тураһында мәҡәлә лә баҫтырғыланым. Әйткәндәй, хәбәрсе тигән таныптма миңә 1983 йылда бирелгән. Республика гәзит-журналдарына яҙышып тора инем. Кәтибә апай Кинйәбулатова, Фәүзиә апай Рәхимғоловалар миңә яуап та яҙып ебәрҙе хатта. Әллә кем булып, шул тиклем күңелем күтәрелгәне әле лә хәтерҙә.

Сибай педагогия училищеһында уҡып, аяҡҡа ныҡлы баҫкан осор - иң ҡәҙерле йылдар. Унда көслә, талапсан уҡытыусыларҙа белем алыу мөмкинлеге тейҙе. Һәр береһенә ғүмер буйы рәхмәтлемен. Яҡташым, оло йөрәкле остазым Светлана Кинйәбай ҡыҙы Буранбаева, әҙәбиәт кинлектәрен асыусы Рәсимә Булат ҡыҙы Ураҡсина менән бәйләнеште өҙмәнем.

Фәнгә килгәндә, ул тулыһынса үҙенә бойһонған кешеләрҙе ярата. БДУ-нан һуң тура аспирантурала уҡырға тәҡдим иттеләр. Студент саҡта ярайһы ғына өйрәнелгән теманы - сәсәндәр ижадын - фәнни тикшереү ниәте менән уҡып сыҡтым, диплом алдым. Фәндә етәкселәрем ғалимдар Ә.М. Сөләймәнов, Р.Н. Байымов, Ғ.Б. Хөсәйеновтар булды. Атап үтелгән теманан бер ҙә ситкә тайпылманым. Бөгөн дә башҡорт сәсәндәренең мираҫын туплау менән шөғөлләнәм. Ҡатын-ҡыҙ сәсәндәр - Гөлнур Мәмлиева, Әсмә Усманова, Мәмдүҙә Бузыкаевалар хаҡында мәҡәләләр яҙҙым. Аҙағыраҡ, Әсмә Усманова, Асия Гәйнуллиналар ижадын туплап, йыйынтыҡтар әҙерләнем. Башҡорт сәсәндәрен видеоәҙмаларға индереп барабыҙ, халыҡ-ара конкурстарға ҡырғыҙ, яҡут, ҡаҙаҡ сәсәндәрен саҡырып, беҙҙекеләр менән сағыштырып ҡарайбыҙ, өйрәнәбеҙ, үҫәбеҙ.

Халыҡ-ара, Рәсәй буйынса фәнни конференцияларҙа сығыштарымдың төп темаһы - сәсәндәр ижады. XXI быуатта ла сәсәндәр ижады бар, улар ҙа бейеүсе, йырсы, ҡурайсы һымаҡ уҡ, халыҡ ижадсылары, тигән фекерҙе нығыттым. Бында Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙы Шафиҡованың һүҙе хәл иткес булды һәм беҙ сәсәнлек традицияһын дауам итеүсе ижадсылар менән тиңдәр араһында тиң булып, һыңды турайта алдыҡ. Бөгөн 20 ижадсыбыҙ үҙешмәкәр сәнғәт өлкәһендә "Халыҡ сәсәне" исеменә лайыҡ, 7 сәсән мәктәбе ойоштора алдыҡ. Шуларҙың береһе К.А. Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжы нигеҙендә эшләй, унда профессиональ белгестәр әҙерләнә. Рәсәйҙә сәсәндәр, халыҡ кәсептәрен йүнәлеш буйынса уҡытҡан берҙән-бер уҡыу йорто ул. Был йәһәттән талантлы шәхес Асия Гәйнуллинаның фиҙакәрлеген беҙ бик оҙаҡ йылдарҙан һуң да иҫләйәсәкбеҙ. Яҡут, хаҡас, бүрәт, ҡырғыҙ, ҡалмыҡ халыҡтары ҡаршыһына сығып баҫыр кимәлдәге ижадсыларыбыҙ бар, Аллаға шөкөр! Шуға был йәһәттән эшмәкәрлек фәнни китаптар яҙып түгел, ә ғәмәли хеҙмәт булараҡ бара. Ситтән ҡарағанда, "башлаған да ташлаған" кеүек күренәләр, әммә улар бергә үрелгән. Заман күберәк ғәмәли эштәр талап итә. Коллегаларым менән бергә бурыстарҙы бик ваҡытлы атҡарып сығып килә беҙ. Башҡа илдәргә башҡорт сәсәндәре ижадын, фольклор ҡаҙаныштарын танытыу ғына түгел, ә уларҙы яҡлау ҙа кәрәк.

Ҡайҙа ғына эшләһәм дә (Сибай ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте мөхәррире,"Известия Башкортостана" ("Республика Башкортостан") гәзитенең Урал аръяғы буйынса хәбәрсеһе, "Атайсал" ҡала гәзите мөхәррире, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының Сибай студияһы яуаплы мөхәррире) тупланған тәжрибәм тик файҙаға булды.

Республика Халыҡ ижады үҙәге элегерәк, Республика Фәнни-методик үҙәк, тип атала ине. Сөнки халыҡ ижады гәүһәрҙәре - ул тарих, әҙәбиәт, сәнғәт, философия, культурология фәндәре аша өйрәнеү объекты. Һәм был һәр осорҙа ла актуаль. Үҙәккә эшкә килеүемә лә тиҙҙән 20 йыл тула. 2009 йылда бөтөнләй яңы йүнәлеш - Рәсәй Федерацияһы, шул иҫәптән Башҡортостан халыҡтарының матди булмаған этно-мәҙәни ҡаҙаныштарын рәсми документҡа индереү, барлау, һаҡлау менән шөғөлләнә башланыҡ. Был - фәнни эш, үҙе айырым бер тема. Әле халыҡ араһында аңлатыу алып барабыҙ: осрашабыҙ, рухи байлыҡты һаҡлаусыларҙы табып яҙҙырып алабыҙ, видеоға төшөрәбеҙ, семинар-курстарҙа уҡытабыҙ.

Ғөмүмән, йәшәгән йылдарымдың һәр осоро ҡәҙерле миңә.

**➔ Талантлы кеше һәр яҡтан килгән инде ул. Һеҙ - "Ирәндек моңдары", "Сая ҡыҙҙар", "Салауат йыйыны" кеүек халыҡ-ара кимәлдәге ҙур конкурс һәм байрамдар сценарийы һәм байтаҡ йырҙар авторы. Улар күңелегеҙҙә нисек тыуа, нисек яҙыла?**

- Талантлы кешеләр ғаиләһендә тыуғанмын мин, шуға әллә ниндәй балҡыштарһыҙ ғына үҙ алдыма ижад итеп йәшәйем. Атайым Булат Мәсәлим улы Вәлиев (Бирҙеғолов) оҙон көйҙәр башҡарыусы, гармунсы ине, матур итеп бейене, телмәре бик бай була торғайны. Әсәйем йор һүҙле булды, гел әйтем-йомаҡтар менән һөйләште. Тормошта ла талантлы шәхестәр менән аралашам икән. Бер мәл төрлө сараларға сценарий яҙырға саҡырғастары, яҙып ҡарағайным, уңышлы ғына килеп сыҡты. Әлмира Ҡыуатова Сибай дәүләт филармонияһына саҡырып ала, һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырып ебәрә, сценарийға тотонабыҙ, яҙып та ташлайбыҙ. Шулай Зөһрә Фәйзуллина, Асия Гәйнуллина, Дамир Ғәлимов, Азат Нәҙерғолов, Гөлназ Аҡназарова, Сулпан Асҡаровалар менән бик күп сценарийҙар, программалар өҫтөндә эшләнек. Миндә әстән тоҡана ала торған гәҙәт бар (шул үҙе ижад процесы бит инде). Шул турҡында булғанда, сценарий, йыр һүҙҙәрен бер тынала яҙам. Йырҙар ҙа һыпырылып ҡына төшә, тәҙәткеләп ултырмайым. Оҡшаһа, көйө лә тыуа. Иҫ киткес талантлы композитор Юлай Үҙәнбаев менән "Ирәндек моңдары", "Ейәнсурам" йырҙарын яҙҙыҡ, шундай уҡ юғары талант эйәһе Илгиз Зәкиров менән "Атай бесәнлеге" кеүек ижади эштәребеҙ бар. Улым Ильяс та көйҙәр яҙҙы, уларҙы ижади төркөмө менән йырлап йөрөйҙәр.

**➔ Әлбиттә, моңло йырлауығыҙҙы, халыҡ йырҙарын иҫ киткес башҡарыуығыҙҙы әйтеп китмәһәк, яҙыҡ булыр. Балаларығыҙға һеҙҙең ошо һәләтегеҙ күстеме икән?**

- Йырламаған кеше бармы икән беҙҙең халыҡта? Үҙемде белгәндән алып мөнрәп йөрөйөм шикелле. Атайым легендар башҡорт йырауысыһы Сөләймән Әйүп улы Абдуллиндың яҡын туғаны (Сафура ҡәртәсәй Әйүп Абдуллиндың бер туған апайы була, унан - Мәсәлим ҡартатай, унан атайым Булат тыуған). Шуға йыр йырлау беҙгә ят шөғөл түгел. "Йырламаным кәсеп итеп, йырлайым насибы тип", тиергә ҡала. Сөләймән олатайым осрашҡанда: "Ҡыҙым, балаға моң әсә һөтө менән һеңһен, йырлап йоҡлат!" - ти торғайны.

Беҙҙең ғаиләлә алты бала, барыһы ла бына тигән тауышлы, моңло. Ғәлиәс ағайым Вәлиев - республикала танылған оҙон көйҙәр башҡарыусы, бик күп конкурстарҙың Гран-при эйәһе. Оҙон көйҙәргә маһирлыҡ - тәбиғи һәләт, Хоҙай бүләге. Ирем Марат ҡурайсы булғас, уның менән бик күп йырҙар өйрәндек. Ҡыҙыбыҙ Сәлимә, улыбыҙ Ильяс та йыр-моңға һәләтле. Атайәсәйемдең 14 ейәне лә йырға оҫта, хәҙер бүләләрен тыңлап һөйөнәбеҙ, Аллаға шөкөр.

**Шулай итеп, үҙ эшенә мөкиббән киткән, Аллаһ Тәғәлә биргән талантын сарыф итмәгән кеше уңыштарға өлгәшә, моралына етә. Тормошоңа байҡау яһап, үткәндәргә баҡҡанда, йөрәгеңдә үкенестәр өтмәһен өсөн үҙеңә ышаныу, эҙләнеү, алға ҡарап атлау мотлаҡ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АСЫУ МЕНӘН НӘФРӘТ...

## ғаилә тормошон юҡҡа сығара

■ Тыныс океан психология мәктәбе доценты Лиана Блоктың яңы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, ғаиләлә тауыш сыҡҡан осраҡта ҡатындың үҙен нисек тотоуына күп нәмә бәйле. Тикшеренеүҙәр сиктәрендә Блок Берклиҙа урынлашҡан Калифорния университеты белгестәре менән бергә урта һәм оло йәштәге ғаилә иштәренең нисек мөнәсәбәттәр асыҡлауын анализлаған. Психологтар конфликттың сәбәбенә түгел, ә ике яҡтың килешеү процесына иғтибарҙы йүнәлткән. Асыҡланыуынса, ҡатындары тиҙерәк тынысланып, килеп тыуған хәлдә йәйға һалырға тырышҡан иштәр күпкә бәхетлерәк ғүмер кисергән. Хис-тойғолар, бигерәк тә асыу менән нәфрәт ғаилә тормошон юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә.

■ Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, офис хеҙмәткәрҙәренең үҙ-ара электрон хат алышыуы эш мөхитенә кире йоғонто яһап ҡына ҡалмай, хеҙмәткәрҙәрҙең психик сәләмәтлегенә лә зыян килтерә. Kingston бизнес-мәктәбенең бер төркөм ғалимдары төрлө фирмаларҙа эшләүсе 28 кешенең электрон почтаһына ентекле анализ яһаған һәм яуап хәбәренең ниндәй төрө кире хис-тойғолар уятыуын асыҡлаған. Мәҫәлән, ниндәйҙер үтенескә эш ваҡытында яуап бирмәнәләр, был яуапһыҙлыҡ һәр кемдә асыу тойғолары уяталыр, моғайын. "Пинг-понг" һөҙөмтәһе йәки ике хеҙмәткәрҙең электрон почта аша тиҙ һәм ҡыҙыу әңгәмә алып барыуы, хатта бер-береһенең яуабын да көтөп тормауы ике яҡта ла стресс тыуҙыра, быңдай әңгәмә мәғәнәһен юғалта. Шулай уҡ кем менәндер ҡуҙмә-ҡуҙ аралашып ултырғанда бер ыңғайы почта аша яҙышыу ҙа матур булмаған күренеш.

■ Рухи сәләмәтлек нигеҙендә ябай ғына ҡағиҙәләр ята, тип белдерә белгестәр. Уның беренсеһе - кеше эшенә ҡыҫылмау. Донъяла бер төрлө фекер йөрөткән, бер төрлө булған кешеләр юҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө итеп яратҡан. Шуға ла үҙ дөрөҫлөгөңдө кешегә көсләп тағырға кәрәкмәй. Ғәфү итә һәм онота белеү - күңел тыныслығына өлгәшеү өсөн һөҙөмтәле сара. Тормош шул тиклем ҡыҫҡа, ҡасандыр кемдер һеҙҙе рәнйеткән өсөн йөрәктә таш йөрөтөү уны мәғәнәһеҙерәк итәсәк. Өсөнсө кәңәш - йәмғиәттә абруй яуларға ынтылмағыҙ. Донъяла эгоистар шул тиклем күп, шәхси мәнфәғәтен алға ҡуйыусы бер ҡасан да башҡаларҙы баһаламаясаҡ. Етмәһә, бөтөн яҡтан камил кешеләр булмай, шулай булғас, ни өсөн һеҙ үҙегеҙ кеүек уҡ кешенең маҡтауына лайыҡһығыҙ? Көнләшеү, башҡаларҙы үҙгәртергә тырышыу ҙа рухи тыныслыҡҡа эйә булырға ҡамаусалаясаҡ.

■ Психологтар белдереүенсә, аралашҡан ваҡытта кешеләр гел генә бер-береһенең күҙенә ҡарамай, был дөйөм ваҡыттың 60 процент тирәһен ала. Күҙгә-күҙ ҡарашыуҙың был сиктәрҙән ситкә сығыуы ике осраҡта ғына була, ти белгестәр. Беренсеһе, ғашиҡ булған кешеләр бер-береһенең күҙенә оҙағыраҡ ҡарай. Икенсе төркөмгә нимәләр асыуланған, агрессив кешеләр инә. Шуға ла әгәр таныш булмаған кеше һеҙгә оҙаҡ итеп ҡарай икән, был йәшерен агрессия тураһында һөйләй. Ҡатынҡыҙҙар үҙҙәренә ошшаған ир-егетҡә оҙағыраҡ ҡарай, ә ир-егеттең ҡарашы уның һеҙгә булған ыңғай мөнәсәбәте тураһында һөйләмәй. Тура ҡараш ғәҙеллек һәм асыҡ булыу сифаты тураһында белдермәй. Ә бына күҙ ҡараһы аҡылға буйһонмай, уларҙың киңәйеүе кешенең һеҙҙең менән ҡыҙыҡһыныуын белдерә.

ХӘТЕРКИТАП

**Быйыл15 ғинуарҙа Рәсәй Президенты Владимир Путин Ишембайға "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" тигән почетлы исем биреүҙе кәрәкле указға ҡул ҡуйып раҫланы. Ишембайҙың хеҙмәт ҡаһарманлығы уның нефте менән бәйле. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ҡына ла Ишембай нефте илдә сығарылған бөтә нефттең дүрттән бер өлөшөн тәшкил иткән бит. Ишембай нефте, Ишембайға Хеҙмәт ҡаһарманлығы исеме биреләү ваҡиғалары тураһында һөйләгәндә бына ошо тарихты ла телгә алыу ғәҙеллеккә аяҡка баҫтырыу буласаҡ икәнен онотмайыҡ әле. Беҙҙең ата-бабалар Ишембайҙа вышканан тәүге нефть фонтаны атылғанға тиклем йөҙәр йылдар элек үк белгән был "ҡара алтын" - ер майы тураһында. Уны дауаланыу өсөн дә, арба майлау өсөн дә ҡулланғандар, тип һөйләй торғайны ҡарттар беҙҙең яҡтарҙа. Ә был ер майын нефть тип белгән яңы тарихи осор Ишембай ауылы кешеләренән башланған...**

# "ҠАРА АЛТЫН"ДЫҢ ШИШМӘ БАШЫ...

Һигеҙенсе Бөтә Рәсәй рәүиз саралары мәғлүмәттәре буйынса, 1834 йылда Ишембай Аҡбирҙиндың улы Әйүпкә 16 йәш була. Бәлиғ булыу йәшенә еткәс, атаһы уны Зәғибә Йәнбирҙинаға өйләндерә. 1840-1841 йылдарҙа уларҙың Мостафа исемле улдары тыуа. Мостафанан Сәғиҙулла (1862 - 1942 йй.) тыуа. Бәлиғ булғас, ул Мырҙаш ауылы муллаһы Сәйфетдин хажиҙың 13-14 йәштәр тирәһендәге ҡыҙы Бибиғәзизәгә өйләнә, айырым йорт һалып, атай йортонан башҡа сыға. 1900 йылда Бибиғәзизә тәүге балаһы Абдулланы ҡулына ала, шунан һуң ғаиләлә Камила, Фатима һәм Хәжәр исемле ҡыҙҙар тыуа.

Сәғиҙулла күп итеп мал аҫырай, иген, катруф сәсә. Стәрлетамаҡ ҡалаһының Ишембай ауылынан 18 генә саҡрымда урынлашыуы ла бик уңайлы була: ул итен-майын, игенен һәм башҡа төрлө ауыл хужалығы продукттарын Стәрле баҙарында һатып, ғаиләһен аҫырай.

Малы күп булғанға күрә, Сәғиҙулла яҙ етеү менән бөтә ғаиләһе, малдары менән Кәрләмә урманындағы йәйләүенә сыға, ә йортона ваҡытлыса йәйге осорға Стәрлетамаҡта йәшәгән отставкалағы полковник М.Г. Срословты ғаиләһе менән индерә.

1909-1910 йылдар тирәһендә Сәғиҙулла Ағиҙелгә ағып төшкән бер шишмәнең өҫтөндә май таптары йөҙөп йөрөүенә иғтибар итә. Һыуҙан кәрәсин еҫе аңҡып тороуы ла уны аптырата. Срословтарға һөт, ҡымыҙ һәм башҡа ауыл хужалығы продукттарын алып барғанында Ағиҙелгә ағып төшкән бер шишмәлә кәрәсингә оҡшаш шыйыҡлыҡ сығып ятыуы тураһында һөйләй. Был хәбәр полковникта ҡыҙыҡһыныу уята. Күрәһең, ул И. И. Губкиндың, Волга буйында эре нефть ятҡылығы булырға тейеш, тигән фаразы менән таныш булғандыр. "Сәғиҙулла, һин минә ул шишмәнең һыуын һәм балсығын алып кил. Мин уларҙы Санкт-Петербургҡа тикшертергә ебәреп ҡарайым", - ти ул. Икенсе Бакуҙың нефть эпопеяһы бына шулай Ағиҙелдең бәләкәй генә шишмәһенән башланып китә.

1911 йылдың йәйендә Срословтың ғаиләһе тағы ла Ишембай ауылына йәйләргә килә. Санкт-Петербургтан хәбәр алғас та ул нефть эҙләү маҡсатында Ишембай ауылынан Күсәпкол ауылына тиклемге ерҙәрҙе ҡуртымға алған була. Сәғиҙулла, уның улы Абдулла һәм ошо ауылдың биш-алты үсмер егете менән Срослов Ағиҙел буйында шахта ҡаҙа башлай. Ерҙең ике ҡатламында нефть эҙҙәре була. Әммә нефть табылмай.

Ҡалабыҙҙың Ишембай нефте тарихы һәм хеҙмәт батырлығы музейындағы документтарҙа түбәндәге юлдар бар: "... улар ҡаҙған 12,7 метр тәрәнлектәге шахта ике тапҡыр нефть тоҡомло ҡатламды үтә. Ә 1912 йылда тағы ла Фәтҡислам һәм Вәлиулла Ишембаевтар менән Срослов 16 метр тәрәнлектәге шахта ҡаҙа, һәм унан ике биҙрә шыйыҡ саф нефть алына".

Шулай итеп, Ағиҙелдең бәләкәй генә шишмәһе оло нефтҡә юл аса. Сәғиҙулла Ишембаев һәм уның "знакумы" полковник Г. М. Срослов Волга буйындағы бай нефть ятҡылығын асыуға юл һала. Ә Ишембай ауылының үсмер егеттәре 16 метр тәрәнлектән тәүге нефтте ҡаҙып сығарыусылар булып тарихҡа инеп ҡала.

Артабанғы йылдарҙа "ҡара алтын" эҙләү эше туҡтап ҡала, сөнки 1-се донъя һуғышы башлана. Ул бөтөп тә өлгөрмәй, революция, Граждандар һуғышы, 1921 йылғы аслыҡ... Халыҡ хатта кәрәсин сыҡҡан шишмә, йәғни нефть тураһында оноҡандай була.



*Сәғиҙулла Ишембаев*

Ә бына 1929 йылда Ишембай ауылына ғалим А.А. Блохин етәкселегендә геологик эҙләнеүҙәр партияһы килеп төшә. Ул Срословка ярҙам иткән Сәғиҙулла Ишембаевты ауылдан эҙләп табып, теге "кәрәсинле" шишмәне лә, Срослов етәкселегендә ҡаҙылған шахталарҙы ла ҡарап сыға. Шулай итеп, Ишембай ауылы янында нефть эҙләү башлана. Йөҙ башы Ишембай Аҡбирҙиндың ейәндәре, бүләләре: Ишембаевтар, Вилдановтар, Әйүповтар, Хәлиловтар, Яҡуповтар, Исхаҡовтар тәүҙә ярҙамсы эштәргә ылыҡтырыла.

Байтаҡ ҡына ағас вышкалар эшләнә. Ишембай ауылы тирәһендә ағас вышкалар "урманы" хасил була (хәҙерге ваҡытта ул ерҙәрҙә ИТЭМ заводы ултыра). Шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алыу урынлы булыр: быраулау эштәре алып барылған һәр скважинаның үҙенең генә персональ көндәлеге тултырылған. 90 йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә беҙ шул көндәлектәрҙән ул көндәрҙәге

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# УРАҘА - УЛ ҠАЛҠАН



**Бөтә Ислам донъяһы һағынып көтөп алған Рамаҙан айы ла килеп етте. Уны "Йылына бер тапҡыр ғына килеп китер ҡунаҡ" тип тә атайҙар. Йыл һайын ураҙаға бәйле төрлө һорауҙар менән беҙҙең редакцияға ла мөрәжәғәт итәләр. Беҙ, гәҙиттә, күпселек һорауҙарҙы дөйөмләштереп, уларға яуап бирергә тырышабыҙ. Ураҙаның кеше организмына файҙаһы һәм уны кемдәр тота ала - ошо турала табип фекерен еткерәбеҙ.**

❖ Башта ошо биш файҙалы кәңәште иғтибарға алығыҙ: ихлас тәүбәлә булығыҙ; Рамаҙан айында ураҙа тоторлоҡ көс һорап, йышыраҡ доға ҡылығыҙ; тотош бер айға эштәрегеҙҙе теүәл планлаштырығыҙ, сөнки был ай бүтән айҙарҙан айырыла; ураҙала йоҡо һәм ашауҙың сифаты бик мөһим икәнен иҫтә тотоғоҙ; был гонаһтар кисерелә торған бөйөк ай, шуға ла ҡыуаныста булығыҙ һәм күберәк изге эштәр эшләргә тырышығыҙ, сауаптары насип булһын!

❖ Ихтимал, кемдер сире менән бәйле ураҙаны ҡалдырып торорға мәжбүрҙер, был осраҡта нимә эшләргә тигән һорау ҙа ҡуялар. Ислам ҡушлегенән ҡарағанда, балиғлыҡ йәшенә етмәгән балаларға, ҡарттарға, ауырлы һәм бала имеҙеүсе ҡатындарға ураҙа тотмаҫҡа рөхсәт ителә. Медицина күҙлегенән иһә, сирҙең ҡатмарлы формалары - шәкәр сире, ашҡаҙан сей шеше (язва), хроник йөрәк сире, ишемия, ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән яфаланған кешеләр ураҙа торорға тейеш түгел. Ураҙа тоторға мөмкинлеге булмаған, сәләмәтлеге насар кеше һәр көн өсөн бер фәҡирҙе ашата, йәғни фиҙиә саҙаҡаһы бирә ала.

❖ Кеше көнөнә кәм тигәндә ике литр һыу эсергә тейеш. Ураҙалағы кеше ауыҙ асҡас, шул тиклем үк һыу эсһен. Сәхәрҙә лә күберәк һыу эсергә кәрәк. Организм һыуға туйһа, хәл бөтмәй. Ҡыҙыу көндәрҙә һыуҙы күберәк тә эсергә кәрәк. Минераль һыуҙар айырыуса файҙалы. Сөнки эҫәлә тир аша тоҙҙо күп юғалтабыҙ. Һыу-тоҙ алмашыныуҙы ба-

✓ *Стелаға Ишембай ерендә "ҡара алтын" сығарыуҙы ойоштороуға ярҙам иткән, скважиналар котловандарын ҡаҙыған, аҙаҡ тәүге нефть фонтанында ҡойоноп шатланған Ишембаевтарҙың береһенең дә исем-шәрифе яҙылмаған...*



ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтерә алабыҙ.

Әлбиттә, тәүге скважиналарҙы Баҡуҙан һәм Грозныйҙан килгән мастерҙар М. Коровников менән Д. Лебедев бригадалары быраулай. Улар үҙҙәренең белемдәрен, оҫталыҡтарын йәштәр менән уртаҡлаша, урындағы кадрҙарҙы әҙерләй. Шуларҙың береһе - башҡорттарҙан иң тәүге быраулау мастеры, һуңыраҡ инженер булып киткән Вәлийән Юлдашбаев (Ишембай ауылына күрше генә урынлашҡан Юрматы ауылынан).

1932 йылда нефттә эшләгән ауыл кешеләрен Пермь өлкәһенең Верхне-Чусовой ҡалаһына быраулау һөнәренә уҡырға ебәрәләр. Был турала Али Карнайҙың 1933 йылда баҫылып сыҡҡан "Ишембай" исемле очерк китабында ярайһы уҡ тулы мәғлүмәттәр бирелә. "Нефть эшенә тәүҙә Ишембай ауылының 17 иргете ылыҡтырыла. Улар, Ағиҙел ярын ҡырҡып, йылғаға табан юл һала. Ишембаевтар 115 километр алыҫлыҡта ятҡан Раевка станцияһынан, аттар, дөйәләр менән һөйрәтеп, буровойҙар өсөн пар ҡаҙандары ташый, шулай уҡ пар машиналары өсөн котловандар ҡаҙый, сөнки быраулауҙа пар көсө ҡулланыла", - тип яҙа ул. Уның яҙмаларында: "Беренсе сәнәғәт нефтен бирған 703-сө скважинаның котлованын 1931 йылдың ҡышында, сатлама һыуыҡта ҡаҙҙыҡ", - тип хәтирәләре менән уртаҡлашҡан Ленин ордены кавалеры Миңлебай Хәлилов.

Ул 701, 702, 703-сө скважиналарҙы быраулағанда ярҙамсы эшсе булып ҡатнашһа, артабан Ишембай ауылы янында ғына урынлашҡан 707-се скважинала верховой булып эшләй башлай (Али Карнайҙың "Ишембай" повесынан).

Ишембай ере тиҙ арала ғына үҙ байлығын бирергә теләмәй. Бер-бер артлы быраулаған скважиналарҙан йә һыу, йә газ фонтаны атыла, йә булмаһа, скважина һыулы баткаҡ "сөскөрә". Шуға күрә геология партияһының ҡайһы бер белгестәре: "Әле бындағы нефть өлгөрмәгән, тик 20-30 йылдан ғына нефть алырға мөмкин булыр", - тип, кире Мәскәүгә ҡайтыу юлын ҡарай башлай. Уларҙың һүҙенә Мәскәүҙәге етәкселәр ҙә ҡолаҡ һала, шуға Ишембайҙағы геология партияһына аҡса бүлеүҙе туҡтатырға ниәтләйҙәр. Ләкин геология партияһы етәксеһе А. А. Блохин Ишембай ерендә нефттең булыуына ышана һәм финанстар бүлеүҙе туктатмауҙарын талап итә.

1932 йылдың 12 майында Ағиҙелдең уң яҡ ярындағы Буранбай ауылы янында урынлашҡан 702-се скважинанан бик үк көслө булмаған нефть фонтаны ата, әммә 50 тонна сығарғандан һуң, ул газ фонтанына әүерелә.

1932 йылдың 15 майынан 16-һына ҡарай төндә Ағиҙелдең һул яҡ ярында ятҡан Ишембай ауылы янындағы 703-сө скважина яғынан хатта ҡолаҡтарҙы ярып килгән көслө геүелдәү яңғырай башлай. Шул мәл Ишембай ауылында фатирҙа йәшәгән бурмастер Лебедевҡа төнөн 703-сө скважина янында дежурҙа торған егеттәр килеп инә һәм скважинан кәрәсин еҫе сыҡҡан ҡара шыйыҡлыҡ атыла башлауы тураһында хәбәр итә.

Был хәбәр йәшен тиҙлегендә бөтә ауылға тарала. Йоҡо ҡайғыһы китә, бөтә ауыл халҡы 703-сө вышкаға табан йүгерә һәм нефттең тәүге йыны ағымында ҡойона. 16 майҙа 41 метрлы вышка башында дежурҙа торған верховой Бәхтийәр Ишембаев беренсе булып йыны нефттең төмен тоя. Аҡырыу тауышы сығарып һауаға атылған фонтан уны саҡ-саҡ вышка башынан осороп төшөрмәй.

Ул фонтан шул тиклем көслө була, хатта белгестәр 10 көн буйы уны ябып, торбаларға тоташтыра алмайҙар. Бөтә тирә-яҡтағы күлдәр, бөтә ер өҫтө шыйыҡ нефть менән ҡаплана. Ҡара күлдән һуң, йырын табып, нефть ағымы Ағиҙел йылғаһына ағып төшөп, саҡ ҡына Өфөгә барып етмәй туҡтай...

Шулай итеп, йөҙ башы (сотник) Ишембай Аҡбирҙиндың ейәндәре, бүләләре еребеҙҙең быға тиклем арба тәгәрмәстәрен майлау, быуындар ауырыуын дауалауҙа ҡулланылған "ер майын" тотош ил мәнфәғәтендә ҡулланыуға юл яра. Нәҡ улар - Ишембаевтар, шатлыҡтары эстәренә һыймай, йып-йылы ғына булған "ҡара алтын" фонтаны аҫтында ҡойона. Быуна улар - ысын нефть батырҙары: 1912 йылда полковник Срослов менән бергә ер аҫтынан ике биҙрә таҙа нефть сығарған Фәтклисłам һәм Вәлиулла Ишембаевтар. Тәүге нефть фонтанын атҡан 703-сө скважинаның тормознойҙары Бәхтиәр һәм Кәлимулла Ишембаевтар. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Әхмәт Ишембаев. Шулай уҡ 707-се скважинаның верховойы Миңлебай Хәлилов, артабан ул быраулаусы булып, Туймазы нефть ятҡылығын үҙләштерергә ярҙам итә һәм Ленин ордены менән бүләкләнә. Шулай уҡ Миңләхмәт Яҡупов һәм Ғабдулхаҡ Ишембаев, ударник Ғүмәр Вилданов ("Башҡорт вышкаһы" гәзитендә уның тураһында мәҡәлә баҫыла). Армиянан ҡайтыу менән Быраулау контораһының төрлө промыслаларында эшләп, министрлыҡтың һәм идаралыҡтың бихисап юғары наградаларына лайыҡ булған Йәһүҙә Ишембаев, Насырйән, Фазылйән һәм Вәлийән Ишембаевтар. Вәлиулла Ишембаевтың улы Насибулла Ишембаев, оҙаҡ йылдар төрлө нефть промыслаларында эшләп, артабан Ишембай һөнәрселек училищеһында булаҫаҡ нефтселәргә белем бирә. Ул СССР-ҙың Хеҙмәт резервтары отличнигы, 1965 йылда Ленин ордены менән бүләкләнә.

Нефть сәнәғәте батырҙары исемлеген артабан да бик оҙаҡ дауам итергә була. Һәм улар быға лайыҡ. Буранбай ауылы янында быраулаған 702-се скважина "Әбей вышка" тип танылды. Тарихи вышка эргәһендәге таш стелаға Ишембайҙа беренсе булып нефть аҡҡан кешеләрҙең исемлеге яҙылған. Тик унда геология партияһы етәксеһе А. А. Блохинға Ишембай ерендә "ҡара алтын" сығарыуҙы ойоштороуға ихлас күңелдән ярҙам иткән, ҡаты һыуыҡтарға, күҙ аҫҡыһыҙ буранларға ҡарамайынса скважиналар котловандарын ҡаҙыған, аҙаҡ тәүге нефть фонтанында ҡойоноп шатланған Ишембаевтарҙың береһенең дә исем-шәрифе яҙылмаған...

Ваҡыт һыу кеүек аға. Ишембай нефтенең тарихы йөҙ башы Ишембай Аҡбирҙин тоҡомдарының күңел түренә ырып яҙылған, һәм улар был тарихты түкмәй-сәсмәй быуындан-быуынға тапшырып килә. Әммә ҡалабыҙҙа һуңлап булһа ла, ошо төбәктә үҙ итеп һаҡлаған һәм яҡлаған сотник Ишембай Аҡбирҙиндың, шулай уҡ нефть тармағында фиҙаҡәр эшләгән батырҙарыбыҙҙың рухын ихтирам итеп, уларҙың эшен, тырышлығын дөрөҫ баһалаһаҡ ине. Юғиһә, тарих беҙҙе ғәфү итмәҫ.

**Хаят ЙОСОПОВА,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.**
**Ишембай ҡалаһы.**

**(Мәҡәләне яҙғанда Миңегәле Яҡуповтың "Сотник Ишимбай" китабына һәм Али Карнайҙың "Ишембай" очерктар китабына һылтанмалар яһалды).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ икенсе хат: "Сәнғәтте аңлау"

Мәсьәлә тик шунда ғына - ябайыраҡты төшөнмәй тороп, ҡатмарлыны аңлап булмай. Фәндә булһынмы, сәнғәттәме - баҫҡыстарҙы ашатлап үтергә ярамай. Классик музыканы аңлау өсөн музыка сәнғәте нигеҙҙәрен белеү аша әҙерләнергә кәрәк. Живопись һәм шиғриәттә лә шулай. Нигеҙ математиканы белмәй тороп, юғары математиканы төшөнөп булмай.

Сәнғәткә ҡарата ихласлыҡ - уны аңлау өсөн тәүшарт, әммә быһын менән генә бөтмәй әле. Сәнғәтте аңлау өсөн белем дә кәрәк. Сәнғәт тарихы, һәйкәл тарихы һәм уны эшләүсенең тормош юлы тураһында мәғлүмәтле булыу сәнғәтте эстетик йәһәттән ҡабул итергә ярҙамлашыр. Шул уҡ ваҡытта был уҡыусыны, тамашасыны йәки тыңлаусыны сәнғәт әҫәренә ҡарата ниндәйҙер билдәле бер мөнәсәбәт күрһәтергә, баһаларға ирекһеҙләмәй, әммә еңелерәк аңларға булышлыҡ итә.

Фактик мәғлүмәттәр, тәү сиратта, сәнғәт әҫәре тарихи перспективала ҡабул ителһен өсөн кәрәк, сөнки ҡомарҡҡа эстетик ҡараш һәм ваҡыт тарихтан сығып барлыҡҡа килә. Әгәр алдыбыҙҙа хәҙерге заман һәйкәле икән, хәҙерге заман да тарихтың билдәле бер осоро, һәм был һәйкәл беҙ йәшәгән дәүергә эшләнеүе тураһында белергә тейешбеҙ. Әгәр һәйкәлдең Боронғо Мысырҙа эшләнеүен белһәк, был уға тарихи мөнәсәбәт барлыҡҡа килтерә һәм уны аңларға ярҙам итә. Ә Боронғо Мысыр сәнғәтен тағы ла нығыраҡ аңлау өсөн теге йәки был ҡомарҡы уның ҡайһы тарихи осоронда барлыҡҡа килеүен дә белеү кәрәк булаҫаҡ.

Белем беҙгә ишектәрҙе аса, әммә артабан үҙебеҙ эскә үтергә тейешбеҙ. Бигерәк тә деталдәрҙең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алғы килә. Ҡайһы саҡта ваҡ ҡына бер нәмә күпте төшөнөргә ярҙам итә. Теге йәки был әйбер нимә өсөн яҙылған һәм төшөрөлгәнен белеү шул тиклем мөһим!

Бер мәл Эрмитажда XVIII быуат аҙағы - XIX быуат башында Рәсәйҙә эшләгән, Павловск баҡсаларын биҙәүсе һәм төҙөүсе Пьетро Гонзаго күргәҙмәһе үтте. Уның һүрәттәре - күберәген архитектураға ҡоролған - перспектива ҡуйылышы йәһәтенән иҫ киткес матурлыҡ. Ул натурала горизонталь, әммә һүрәттәрҙә офоҡта барып тоташҡан (перспектива өсөн шулай кәрәк тә инде) бөтә һыҙыҡтарҙы ла айырып күрһәтеп, үҙенең оҫталығы менән маҡтанғандай ҙа итә. Уның натурала был горизонталь һыҙыҡтары бихисап. Кәрниздәр, ҡыйыҡтар.

Һәм бөтә урында ла горизонталь һыҙыҡтар кәрәк булғандан бер аҙ ҡалыныраҡ итеп эшләнгән, ә ҡайһы берҙәре кәрәккәндән "артығыраҡ" хатта, натуралағынан тышҡа сығып китә.

Ләкин бына тағы бер ҡыҙыҡ: Гонзагоҙың был иҫ киткес перспективаларына ҡараш бер аҙ аҫтан төшкән кеүек. Ни өсөн? Ҡараусы бит картинаға туп-тура баға. Сөнки былар барыһы ла театр биҙәлеше өсөн төшөрөлгән һүрәттәр, ә театрҙа тамаша залы (һәр хәлдә, иң "мөһим" тамашасы өсөн) аҫта урынлашҡан һәм Гонзаго үҙенең композицияларын партерҙа ултырған тамашасы өсөн тәғәйенләп төшөрә.

Сәнғәт әҫәрҙәрен аңлау өсөн һәр ваҡыт ижад итеү шарттарын, ижадтың маҡсатын, рәссамдың шәхесен һәм дәүерен белергә кәрәк. Сәнғәтте ҡоро ҡул менән генә тотоп булмай. Тамашасы, тыңлаусы, уҡыусы "ҡоралланырға" тейеш - белем, мәғлүмәт менән. Бына ни өсөн баш һүҙҙәр, комментарийҙар һәм дөйөм алғанда сәнғәт, әҙәбиәт, музыка тураһындағы эштәр юғары әһәмиәткә эйә.

Белем менән ҡоралланығыҙ! Юҡҡа ғына: белем - ул көс, тимәйҙәр. Әммә был фәндә генә түгел, сәнғәттә лә шулай. Сәнғәт көсһөҙгә асылмай.

Белем ҡоралы - тыныс ҡорал.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

ланста тотоу өсөн ураҙа ваҡытында минералдар һәм витаминдар комплексы эсергә була. Организмдың һыуһауы айырыуса йөрәк-ҡан тамырҙары эшмәкәрлегендә сағыла: ҡан ҡуйыра, тромбтар хасил булыуы бар. Эсемлектәргә килгәндә, ураҙаға тиклем нимә эскән булһағыҙ, шуны уҡ ҡулланығыҙ. Быға тиклем ҡара сәй эсеп, ураҙа ваҡытында йәшел сәйгә күсеү, йәки киреһенсә эшләү кәрәкмәй.

❖ Беҙҙең баш мейеһе һәм мускулдарға глюкоза кәрәк. Шуға күрә углеводлы ризыҡтар ашағыҙ. Әммә ул тиҙ яна торған шәкәр, кәнфит булмаһын, былар зыянлы ғына. Глюкозаға бай еләк-емеш ашау кәрәк. Хөрмә, йөҙөм кеүек кипкән еләк-емештәр менән ауыҙ асырға була. Иң мөһиме, ауыҙ асыр ваҡыт еткәс, ризыҡҡа кинәт йәбешмәҫкә кәрәк. Был - организмға стресс һәм аш һеңдереү ағзаһына ла ауырлыҡ тыуҙыра. Бер хөрмә йәки бер йотом һыу менән ауыҙ асҡандан һуң намаҙға бүленеү юҡҡа түгел бит. Иртәнгә, сәхәргә тиклем әҙәрләп ашауҙы ғәҙәткә индерегеҙ.

Мин үҙем ураҙа башланғанда отпуск алырға тырышам. Быйыл да отпускыға китәм. Кемдендер, бәлки, тап шул көндә ял алыу мөмкинлеге барҙыр.

Ысынлап та, ураҙаның беренсе көнө - организмдың күнегеү осоро, стресс. Әммә ул файҙалы стресс. Күптән түгел АҠШ-тың ҡартайыу проблемаларына ҡағылышлы милли институтының нейробиология лабораторияһы етәксеһе Марк Мэттсондың һүҙҙәрен уҡыным. Ул: "Ҡыҫҡа ваҡытлы ас тороу нерв күҙәнәктәре өсөн файҙаға", - тип яҙған. Күҙәнәктәр был ваҡытта стресс кисерә, ас торған саҡта кетондар формалаша, былар күҙәнәктәрҙә күп күләмдә энергетик митохондриялар эшләп сығара. Улар иһә үҙ сиратында нерв күҙәнәктәре менән күберәк элемтәләр булдыра һәм хәтерҙе яҡшырта. Әлеге доктор Альцгеймер ауырыуына ҡаршы тороу маҡсатынан да ҡыҫҡа ваҡытлы ас тороуҙар файҙаға, ти. Шулай уҡ күптән түгел Массачусетс университеты биологтарының фекерҙәрен дә уҡырға тура килде. Улар 24-48 сәғәтлек ҡыҫҡа ваҡытлы ас тороу эсәктәр өсөн файҙалы, тип яҙа.

Эйе, теләһә ниндәй стресс файҙалы ла була ала. Беҙҙең олатай-өләсәйҙәр беҙ хәҙер ашаған кеүек тукланмаған. Ә ғүмер оҙайлыҡтары - сөбхан Аллаһ! Улар бит йыш ҡына ризыҡҡа ла туймаған, тимәк, организмдары ла стресс халәтендә булған. Ураҙа ул - ашҡаҙан, ашҡаҙан аҫты биҙе, эсәктәр өсөн дә ял. Был ял балдар организм өсөн бик кәрәк.

**Рөстәм ФӘХЕРТДИНОВ,**
**табиб.**



## 3 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.25, 0.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 Премьера. "Время героев". [16+]
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. В бегах". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.40, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Круги на воде". [16+]
0.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.15 Т/с "Сируси". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15, 17.45, 20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 3.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00, 3.30 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Д/ф "Легенды об Акмулле". [12+]**
**21.00 Ради добра. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**1.00 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

## 4 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. В бегах". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Душа нараспашку". К 100-летию со дня рождения Риммы Марковой". [12+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 20.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.40, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Круги на воде". [16+]
0.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сируси". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.50 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.00 Концерт "Башкирская образцовая семья". [6+]**
**23.00 Бишбармак. [12+]**
**0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**

## 5 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. В бегах". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.40, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Круги на воде". [16+]
0.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.15 Т/с "Сируси". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 17.45, 20.15, 0.00 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 "100 имён Башкортостана". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 4.30 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ представляет… [12+]**
**2.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**

## 6 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. В бегах". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 20.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.40, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Круги на воде". [16+]
0.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.15 Т/с "Сируси". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15, 0.00 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.50 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башҡорт" йыры представляет… [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]**

## 7 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Х/ф Премьера. "Болеро. Душа Парижа". К 150-летию со дня рождения Мориса Равеля". [18+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 15.30 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 20.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Один в один". [12+]
0.30 "Истории Большой Страны". [12+]
1.30 Х/ф "Дура". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сируси". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15, 20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Международному женскому дню.**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Гора новостей. [6+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Аҫылйәр". [12+]**
**4.45 Мама. [12+]**
**5.00 "100 имён Башкортостана". [12+]**

## 8 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.20 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. Большой праздничный концерт "Будьте счастливы всегда!" [12+]
13.35 Х/ф "Служебный роман". [0+]
16.40, 18.20 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50, 21.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
23.20 Х/ф "9 1/2 недель". [18+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00, 1.20 Большой праздничный концерт "О чём поют 8 Марта".
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
20.50 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
22.50 Х/ф "Лёд-3". [6+]
3.10 Х/ф "Красавец и чудовище". [12+]
5.09 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 С праздником, милые женщины! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45, 12.30, 5.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Хазина. [6+]**
**9.00, 19.00 Весело живём! [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 Концерт детский. [6+]**
**10.30 Атайсал. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Преград. Net. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном… [12+]**
**18.00 Легенды Урала. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.30 Байыҡ. [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 Концерт Гульсум Бикбулатовой. [12+]**
**3.00 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]**

## 9 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Прожить, понять...". К 85-летию Ларисы Голубкиной". [12+]
13.10 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
16.05 Д/ф Премьера. "Жить, сниматься, любить!". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. Большой юбилейный концерт Стаса Михайлова. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Территория".
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 1.35 Х/ф "Праздник разбитых сердец". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Легенды Урала. [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15, 4.30 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 Весело живём. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Бирешмә. Йырла! [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Спектакль "Деревья умирают стоя". [12+]**
**18.45 Бал маленьких принцесс. [12+]**
**19.30 Әлләсе… [12+]**
**20.15 Патриот РФ. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Минзифы Искужиной. [12+]**
**1.30 Спектакль "Анфиса". [12+]**
**4.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Март (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (3) дүшәмбе | 6:01 | 6:21 | 8:02 | 13:30 | 16:58 | 18:56 | 22:36 |
| 4 (4) шишәмбе | 5:58 | 6:18 | 8:00 | 13:30 | 17:00 | 18:58 | 22:39 |
| 5 (5) шаршамбы | 5:56 | 6:16 | 7:57 | 13:30 | 17:02 | 19:00 | 22:41 |
| 6 (6) кесе йома | 5:54 | 6:13 | 7:55 | 13:30 | 17:04 | 19:02 | 22:43 |
| 7 (7) йома | 5:51 | 6:10 | 7:52 | 13:30 | 17:05 | 19:04 | 22:45 |
| 8 (8) шәмбе | 5:49 | 6:08 | 7:50 | 13:30 | 17:07 | 19:06 | 22:47 |
| 9 (9) йәкшәмбе | 5:46 | 6:05 | 7:47 | 13:30 | 17:09 | 19:08 | 22:50 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ҠУРСАҠ ТЕАТРЫ

**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының тарихы бай. Ул 1932 йылдың 5 февраленән алып яҙыла башлай - тап ошо көндә Өфө сәнғәт һарайының Бәлкәй залында (хәҙерге Башҡорт опера һәм балет тетары) беренсе спектакле - "Шалҡан" уйнала.**

Тәүге өс айҙа театрҙа спектаклдәр тик рус телендә генә бара, ә 1932 йылдың йәйендә директор Мария Николаевна Елгашина Башҡорт драма театры артисы Ғәмбәрә Мансурованы эшкә саҡыра һәм ул театрҙың башҡорт төркөмөн етәкләп алып китә.

Ҡыҙғанысҡа күрә, оҙаҡламай Бөйөк Ватан һуғышы башлана һәм ҡурсаҡ театры агитбригадалар эшмәкәрлегенә әүҙем ҡушылып китә: яугирҙарҙы дәртләндереп сығыштар яһай.

Артабан, тыныс тормош яуланғас, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры коллективы дәртләнеп ижад итә, өр-яңы спектаклдәр ҡуйыла, ил һәм донъя кимәлендә балаларҙың күңелен арбаған сәхнә әҫәрҙәре ижад ителә. Бөгөн Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры 93 йыллығын билдәләй. Уның туғыҙ быуатлыҡ юбилейына арнап, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса 2023 йылдың аҙағында яңыртып төҙөлгән заманса ҙур бина кескәй тамашасыларға үҙ ишектәрен асты.

Балаларға мөғжизәле әкиәт иленә, яҡшылыҡ һәм матурлыҡҡа юл күрһәткән ижади коллективҡа арнайбыҙ был башватҡысыбыҙҙы.






*Театрҙың директоры*



*"Буратино"лағы Карабас Барабас*

Сканворд һорауҙары:

- Ҡурсаҡ театрында төп жанр
- 1
- 2
- Миләүшә Ҡаһарманованың әҫәре
- Шайтандың бармағын ҡыҫтырыусы
- "Йәш кесәнә таяна, (...) - аҡылына"
- 3
- 4
- Ике материкта
- "Ир бала ла (...) - атаһынан ҡот инһән, ҡыҙ бала ла (...) - әсәһенән һөт имгән"
- Кубаның юлбашсыһы
- "Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы - ана ишек (...)һы"
- Театрҙағы Шәрәфетдинова һәм Дудкаҡың исеме
- Күсәктең атаһы
- Балыҡ
- "(...)һы дуҫтың балаһы дуҫ"
- "(...) аҫтынан көн аҫты"
- Ҡеүәт берәмеге
- Ауылдан ҙур, ҡаланан бәләкәй
- 5
- 6
- Сифатһыҙ тауар
- Эш хаҡының өлөшө
- Ҡатын-ҡыҙ исеме
- Белдереү
- "Күк (...)һы - Тимер ҡаҙыҡ"
- Композитор
- Йәйге аш бүлмәһе
- Ҡыйыҡ терәүе
- "Бауыр ите"
- Йәйәү хәрәкәттең "берәмеге"
- Һауаның тормош иптәше
- Башҡорт тәмлек әсе
- "Ярамаған" емеш
- Интернеттағы бит
- Башҡортостандағы халыҡ
- Моң ҡушылған нәфис һүҙ
- Ҡышҡы йорт



*"О чем поет орнамент?" - Таңдыса*



*"Гадкий утенок" - Инә өйрәк*



*"Һабантуй"ҙағы хан*



*"Гадкий утенок" - төп роль*

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**6-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡандала. Рәсми. Ямантау. Ашыҡ. Ришүәт. Таблетка. Етен. Ҡан. Төркөм. Алама. Автор. Мәктәп. Таҡмаҡ. Аршын. Тр. Азат. Утыҙ. Амур. Һике. Ынйы. Ҡала.

**Вертикаль буйынса:** Тапаҡов. Аҡбулатова. Артыш. Яҡут. Ыласын. Нартайлаҡов. Турһыҡ. Тоҙаҡ. Ҡорт. Абитуриент. Мәһәҙиева. Ракета. Үрнәк. Телем. Порт.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 март "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

**2 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

**4 март "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов), провинциаль проза. 16+

**5 март "Ҡыҙыл паша"** (Н.Асанбаев, А.Абушахманов), музыкаль комедия. 12+

**6 март "Урал Батыр"** (А. Борисов), башҡорт халыҡ эпосы. 12+

**7 март "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль милодрама. 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 март "Башҡорт туйы"** (М. Бурангулов, А. Йыһаншин), романтик драма. 6+

**2 март "Холодное сердце"** (В. Гауф, М. Ҡолбаев), өлкәндәр һәм балалар өсөн әкиәт. 12:00. 6+

**4 март "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәҡим, Р. Хәҡимов), комедия. 16+

**6 март "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"** (М. Кәрим, М. Ҡолбаев). 12+

**7 март "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н.Саймон, А.Наҙырғолов), трагикомедия. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 март "Кошкин дом"** ( С. Маршак). 0+

**2 март "Три поросенка"** (Д.Гараева). 0+

**5 март "Озеро заколдованного коня"** (Г. Шафиков). 12+

**6 март "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). 0+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 март "Ағиҙел өҫтөндә классика"** VII Бөтә Рәсәй камера һәм хор музыкаһы фестивален ябыу. 12+

**6 март "Яҙ мажаралары"** Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө айҡанлы Рәсәй саксофонсылары квартеты (Мәскәү). 12+

**7 март "Һин - яҙ, һин - мөхәббәт..."** Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә арналған ҙур эстрада концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**5, 6 март "Һалҡын ер"** (С. Козлова), заман драмаһы. 16+

**7 март "Беҙҙән - һеҙгә!"** Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө айҡанлы театрлаштырылған тамаша. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**6 март "Боевым подругам посвящается"**, Бейеү театры концерты. 12+

**7 март "Әсәй, бына һиңә килен...дәр"** (И.Зәйниев, А.Зарипов), комедия. 12+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**5 март Арыҫлан Тимеровтың** (BABY Ti) концерты. 12+

## БР Милли музейы

**1 март "Ғаилә шәмбеһе"** программаһы сиктәрендә музей буйлап экскурсия. 15:00. 6+

**2 март "Әсәйемә бүләк"**, ағас һырлау буйынса оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+

**4 март "Емеш"**, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Раушания Бәҙретдинованың күргәҙмәһен асыу. 16:30. 0+

**5 март "Музей шаршамбыһы"** программаһы сиктәрендә "Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында хеҙмәт ҡаһарманлығы" темаһына экскурсия. 12:00. 12+

**"Донъя - тылсымлы быяла аша"**, Элеонора Саунина эштәре күргәҙмәһе. 15:00. 6+

**7 март Ротангтан кашпо үреү** буйынса оҫталыҡ дәресе. 11:00. 12+

*ПРЕМЬЕРА!*

# ЯУГИРҘАРЫБЫҘ...

## был тамашала үҙҙәрен күрергә тейеш!



**Ошо көндәрҙә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында билдәле яҙыусы Мөнир Ҡунафиндың әҫәре буйынса "Бер ғүмер етмәй икән..." илһөйәрлек поэмаһы тәүге тамашасыларын йыйҙы һәм... барыһын да хайран итте! Яңы спектакль тураһында беҙ ҙә бер кәлимә яҙып үтергә булдыҡ.**

Бынан теүәл 3 йыл элек Украиналағы Махсус хәрби операция башланғас, кем ниндәй тойғо кисереүен һәр беребеҙ үҙе генә беләләр. Илдә нисә кеше булһа, фекерҙәр ҙә шул ҡәҙәре төрлө ине, ахыры. "Бер ғүмер етмәй икән..." спектакле лә нәҡ шул осорҙо һүрәтләүҙән башлана: Ватанды һаҡларға йүнәлгән ир-егеттәр, уларҙы оҙатып ҡалған яҡындары араһында ла төрлө уй-ниәттәрҙә булғандары байтаҡ. Кемдер тормош иптәшенән ялҡып, кемдер тормошонда толҡа тапмай, кемдер осраҡлы рәүештә, кемдер Ватанды һаҡлау - изге бурыс, икәнлеккә инанып, ҡыҙыу нөктәгә юллана. Һәм тамашасы алдында һәр сәхнә күренеше һайын ошо ҡырҡ ата балаһын берләштергән яҙмыш йомғағы һүтелә башлай. Унының менән бергә тамашасы ла үҙенең күңелендәге төйөндәрҙе сискәндәй була: сөнки сәхнәләге образдарҙың барыһында ла үҙеңде, таныш-тоноштарыңды күрәһең, улар менән бергә борсоған һорауҙарға яуап табып маташаһың. Был спектакль Махсус хәрби операцияның маҡсаттары, унда юлланған яугирҙарҙың асылдарынан алып, кешелеклек һәм миһырбанлыҡ кеүек мәңгелек төшөнсәләр тураһында ла уйландыра.

Замандаштарыбыҙ "Ҡаһарман", "Хакер", "Тарихсы", "Сәсән", "Иман", "Носорог", "Комбат" һәм "Малыш" ҡушаматлы яугирҙарҙың яҙмышы аша тамашасының күҙ алдына килеп баҫа. Пьеса авторы, яҙыусы Мөнир Ҡунафин уларҙы "тупланма образдар" тип атай һәм сәхнә геройҙарының аныҡ бер генә прототибы булмауын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Шулай ҙа тамашасы Украина нацистарын үҙе менән бергә шартлатҡан Рәсәй Федерацияһы Геройы Илдар Суфияровты танымай ҡалманы. Ә инде "Ҡаһарман" ҡушаматлы дыуамал егеттә Батырлыҡ ордены кавалеры, дошман БТР-ын ҡулға төшөргән Фәнис Хөсәйеновты күрҙе. Әйткәндәй, премьерала батырыбыҙҙың әсәһе лә булды һәм был образды сәхнәгә сығарған йәш актер Байегет Мөхәрләмовты оҙаҡ ҡына ҡосаҡлап торҙо. Әсә йөрәге нисек һулҡылдап типкәндер инде был минуттарҙа...

"Атыш ныҡ булһа, беҙ бында һуғышып, аҡса эшләп тик ятабыҙ ул", - "Хакер" ҡушаматлы яугир ауыҙынан яңғыраған был һүҙҙәр ҡапыл һиҫкәндереп ебәрә. Ватан азатлығы өсөн ғүмерен ҡыл өҫтөнә ҡуйып йөрөгән ир-егеттәребеҙ араһында, ысынлап та, шундай уйлылар бармы икән ни? Мөнир Ҡунафин билдәләүенсә, ундайҙар бар, әммә бик һирәктәр һәм тәүге яуҙан һуң уҡ донъяға ҡараштары, ҡиммәттәре бөтөнләй үҙгәрә. БР-ҙың атҡаҙанған артисы Вадим Ҡылысовтың "Хакер"ы тап шундай кешеләрҙән булып сыҡты: беҙ спектакль дауамында унының менән бергә күп нәмәгә ҡараштарыбыҙҙы үҙгәрттек.

- Был - һүҙҙәрен ятлаһам, эшләп сығарам ул, тип еңел генә ҡул һелтәп атҡара торған эш түгел. Спектакль буйынса эшләгән саҡта күңелдә ниндәйҙер бер шом да, рух күтәренкелеге лә тойҙоҡ, кисерештәр төрлө булды. Халыҡ аңлармы, әллә боролоп сығып китерме, беҙ уларҙы туплар көскә әүерелә алырбыҙмы икән, тип тә уйландыҡ, - ти спектаклдә "Комбат"ты сәхнәгә сығарған БР-ҙың атҡаҙанған артисы Рәмзил Сәлмәнов.

- Беҙ был спектакль менән бергә йәшәнек. Уны үҙебеҙ ҙә һаман тулыһынса аңлап етмәйбеҙҙер, бәлки, әммә тырышып эшләнек. Беҙҙең алда шундай бурыс тора ине: иртәгә ошо залда яугирҙарыбыҙ ултырасаҡ һәм беҙ уларҙы алдарға тейеш түгелбеҙ. Улар ошонда килеп үҙҙәрен күрергә тейеш. Спектаклде тыуҙырғанда бына ошо иң ауыры булды беҙҙең өсөн, - тине спектаклдең режиссеры Рөстәм Хәкимов. Ул шулай уҡ: "Тиҙерәк тыныс тормош тураһында ғына спектаклдәр ҡуйғыбыҙ килә", - тип тә өҫтәне.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кеше өсөн үҙ-үҙен, тимәк, замандаштарын аңлау иң ауыры. Шуға ла ул барыһын да ваҡыт хөкөмөнә ҡалдыра, йәнәһе, ваҡыт үҙе хәл итер һәм дөрөҫ баһа бирер. Әммә арабыҙҙа ваҡыттан да, заманынан да алда барған шәхестәр була - улар беҙгә үҙебеҙҙе һәм замандаштарыбыҙҙы аңларға ярҙам итә. Тап бына шундай шәхестәрҙең дөйөм ижад емеше булып сыҡты ла инде "Бер ғүмер етмәй икән..." спектакле. Был - катарсис тыуҙыра торған әҫәр.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ҮТЕМБЕЙ ҠАРМАҒЫНА ҠАПМА

**Яңы йорттоң үткелеге яҡты, иркен. Хужалар үткелекте матур һүрәттәр менән биҙәгән.**

**Үткелек.** Тамыры яҡшы таныш булһа ла, унан яһалған әлеге һүҙ ҡулланылмауы бик йәл. Ә бит үткелектә һәр көн, һәр кем була. Рус телендәге "прихожая"ға тура килә ул. *Ҡунаҡты үткелектә тотоу килешмәҫ. Түр яҡҡа үткелектең уң ишегенән үттек.*

**Үткәүел. 1.** Бер мәғәнәһе - йәйәүлеләр юл аша сыға торған урын. *Мәҫәлән: Ер аҫты үткәүеле. Машинаға үткәүелдә туҡтау тыйыла.*

**2.** Үткәүелдең икенсе мәғәнәһе - һирәк урман, үтәнән-үтә күренгән ағаслыҡ. *Миҫалға: Ҡайын үткәүелендә еләк бешкән. Йәш шыршылар үҫеп, үткәүелде ҡапланы.*

**Үтембей.** "Хәйләкәр", "йылғыр" тигән сифаттарҙы алыштырған һүҙ. *Миҫал өсөн: Үтембей әҙәм. Үтембейҙең ҡармағына эләгеп ҡуйма.*

**Үтәләк. 1.** "Үтәләк" тиер урынға, ниңәлер, "шумовка" тип һөйләйбеҙ. "Үтәләк" ул - аш-һыу болғатыу, унан нимәнелер һоҫоу өсөн хеҙмәт иткән тишекле йәлпәк ҡулайлама. *Миҫалдар: Уңайлы үтәләк. Бауырһаҡты үтәләк менән һоҫоп ал. "Үтәләк"тең ҡайһы бер һөйләштә "сулпы" тигән синонимы ла бар.*

**Үрмәк.** Ҡатын-ҡыҙ яланаяҡ кейә торған йәйге аяҡ кейеме, босоножка. *Күн үрмәк. Яҙ иртә килгәс, май айында уҡ үрмәк кейҙек.*

**Шулай итеп, хәтеребеҙ үтәләге көн дә яңғыраған һүҙҙәр донъяһынан тик туған телебеҙгә туған, яҡын һүҙҙәрҙе һөҙөп алһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮҘЕҢ БЕШЕРМӘГӘН АШҠА...

## бешереүсенән алда үрелмә

- Алтмыш, һиңә ни ҡылдым?
- Аяғыма бау һалдың, ҡолағыма шау һалдың!
- Етмеш, һиңә ни ҡылдым?
- Уртымдағы теште алдың, башымдағы һушты алдың!
- Һикһән, һиңә ни ҡылдым?
- Маңлайҙағы күҙҙе алдың, бурбайҙағы биҙҙе алдың!
- Туҡһан, һиңә ни ҡылдым?
- Ауыҙҙағы һүҙҙе алдың, илтеп ләхеткә һалдың!

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ тормошобоҙҙоң һәр йәше үренә бер ниндәй тәжрибәһе булмаған сабыйҙай барып баҫабыҙ.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Кешенән башҡа бар йән эйәләре лә ерҙә йәшәүҙән ләззәт алырға кәрәк икәнде аңлай.

**(Самюэл Батлер).**

Үҙеңдән өлкән ҡатын-ҡыҙҙан тулы өҫтөнлөккә ынтылма.

**(Джон Апдайк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хаким урамда бер фәҡирҙе осратҡан да, унының ямаулы кейеменә, табаны айырылып сыҡҡан аяҡ кейеменә ҡарап, уны йәлләп, шулай тип өндәшкән:**

**- Әй, фәҡир, һиңә бик ныҡ ауырҙыр инде был донъяла йәшәүе...**

**- Эйе, мин ярлымын, ләкин был, мин ауыр йәшәйем, тигәнде аңлатмай әле, - тигән фәҡир кеше. - Ауыр йәшәү - ул барыр юлыңды, ундағы уңайлыҡтарҙы, мөмкинлектәрҙе, көс-ҡеүәтте белеп тә, шул юлдан бармау ул. Ямаулы кейем, табаны аҡтарылған аяҡ кейеме - ул ауыр йәшәү түгел, ул ярлы йәшәүҙе, ул уңайһыҙ ваҡытта тыуыуҙы аңлата.**

**Ҡарағыҙ, үҙҙәренең урманында саҡта маймылдар ағастан-ағасҡа һикерә, дошманынан ҡаса, үҙенә ашар ризыҡ таба ала. Әгәр ҙә ниндәйҙер асыҡ яланға йә ҡыуаҡлыҡҡа барып эләкһә, улар үҙҙәрен ышаныcһыҙ тота, һикерә, ырғый ҙа алмай. Сөнки улар ғәҙәти булмаған мөхиткә барып эләгә, ә бит бынан ғына улар үҙгәреп китмәйҙәр, шундай уҡ өлгөр һәм көслө булып ҡалалар, ләкин үҙҙәренең мөхитендә булмағас, көстәрен һәм һәләтлектәрен тормошҡа ашыра алмайҙар.**

**Нисек кенә булмаһын, намыҫлы кешегә насар хаким һәм унының мут чиновниктары янында ярлы булмайынса сара юҡ. Ләкин ярлы йәшәү ауыр йәшәү түгел..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 25008

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33.
(453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 396